ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

1-7 август (урағай)

2015

№31 (657)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Теленде...**

теш артында тот икән ул



3

**Сәсәнен ҙурланы ҡыпсаҡтар**



6

**Ауырлыҡтарға түҙеү сифаты...**



ҡатын-ҡыҙға ҡайҙан килә?

8-9

**Сәмәрә**



12

**ТВ-программа** 14

*Башҡорт урман эргәһенән барһа - урман тураһында, тау буйлап барһа - тау тураһында, йылға буйлап барһа - йылға тураһында йырлай. Ағасты ул һылыу ҡыҙ менән сағыштыра, ҡырҙағы сәскәләрҙе уның күҙҙәре менән, күлдәгенең төҫө менән сағыштыра.*

***Р.Г. Игнатьев.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Август етә килә йә дефолт, йә хаҡтар артыуы, йә башҡа берәй күңелһеҙ хәлдәр тураһында һүҙ ҡуйырта башлайҙар. Бындай хәбәрҙәр һеҙҙе ҡурҡытамы?

***Шәфҡәт ТИМЕРБУЛАТОВ, хеҙмәт ветераны:*** Халыҡ шағиры Мостай Кәрим әйтмешләй, бар эшемдең сыҡтым осона - минә ниҙән ҡурҡырға? Илдә именлек булһын, үҙебеҙгә - һаулыҡ. Байҙар банктағы аҡсалары өсөн ҡурҡып, төн йоҡоларын йоҡламағанда, рәхәтләнеп йоҡлайым - кассала һаҡлаған аҡсам юҡ. Хаҡтарға килгәндә, уға ла аптырарға түгел: ай һайын арттырып ҡына торалар, һис ҡыуып етермен, тимә. Күрәһең, шулай итеп халыҡты әкрен генә өйрәтәләрҙер инде. Дефолт булмаҫ, тип ышандыралар ҙа ул, унын ҡарауы, һауалар ғына бит ябай халыҡты. Йә бензинға, йә аҙыҡ-түлеккә, йә электр энергияһына туҡтауһыҙ хаҡ артып тик тора.

Ә былай августы Рәсәйҙә хәтәр ай тип йөрөтәләр икән, рәсми түгел, халыҡ араһында ғына бит инде ул. Уныһы ла 1998 йылдың августындағы дефолттан һуң башланғандыр инде. Бер уйлаһаң, бында августың бер ғәйебе лә юҡ... Власҡа Ельцин килеп харап итте бит. Унан бер йыл алда ғына һумлыҡ аҡсаларҙың номиналь ҡиммәтен үҙгәртеү һәм шуға ярашлы 1:1000 нисбәтендә хаҡтарҙы үҙгәртеү тураһында указға ҡул ҡуйғайны. Шунын һөҙөмтәһе лә булғандыр. Ғөмүмән, ул йылдарҙы хатта иҫләге лә килмәй: ата - улын, инә ҡыҙын танып-белмәгән болғаныш булып хәтерҙә ҡалған. Бына ул йылдарҙа хәтәр бар ине! Аҙ-маҙ гәзит уҡыштырып, телевизор ҡарап торам, хәҙер ундай хәл булмаҫ, тип вәғәҙә итәләр былай. Ә шулай ҙа донъя хәлдәрен үҙегеҙ күрепбелеп тораһығыҙ - беҙҙең ил, беҙҙең етәкселәрҙән генә тормай, күп нәмә халыҡ-ара хәлдәргә бәйле. Бындай ваҡытта, тик һуғыш ҡына була күрмәһен, тип теләй халыҡ. Төрлө бәлә-ҡаза ла ғибрәт биреп тора ала белгәнгә. Шуға ла, бәлки, хаҡтар артыуҙы тынысыраҡ ҡабул итәбеҙҙер. Донъяла именлеккә ни етә һуң! Тик халыҡтың ана шулай албыраған сағын файҙаланып ҡалырға маташҡан осраҡтар ҙа бар. Әлеге лә баяғы коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәрен күҙҙә тотам. Бик ныҡ булышалар икән халыҡтан "аҡса һауыу" менән. Уларҙы туҡтауһыҙ әрләгән, тәнҡитләгән булалар, тик бер ниндәй сара ла күрмәйҙәр - бына шуныһы аңлашылмай минә.

***Рәхимйән ИҘЕЛҒУЖИН, менеджер:*** Ипотекаға фатир алдым. Ошо юҫыҡта 1998 йылдың августындағы дефолт, инфляция эҙемтәләренең ул саҡта кредит һәм башҡа шундай бурысҡа батҡан ҡайһы берәүҙәр өсөн отошло ситуация килеп тыуыуы хаҡындағы хәлдәр иҫкә төштө әле. Шуға ла былтырлы-быйыллы һумдың тотороҡһоҙлоғо арҡаһында бына-бына тағы көрсөк була, тип торғанда, мин әллә ни ҡурҡманым: әлеге шул тарихтар күңелде бер аҙ йылытып торҙо. Их, мин әйтәм, финанс тотороҡһоҙлоҡ бурысты түләүҙе бер аҙ еңеләштерһә... Бәхеткә күрә, дефолт-фәлән булманы. Һәм булмаһын да инде ул! Юғиһә, бөтөн илгә, халыҡ иңенә төшкән бәләнән үҙеңә өлөш өмөт итеп ултырыу, бер яҡтан, намыҫһыҙлыҡ булыр ине... Үҙ илемдең гражданы булараҡ, һумдың ныҡлап аяҡҡа баҫыуын теләйем, әлбиттә. Был илдең финанс һәм иҡтисад нигеҙен ышанысլы итәсәк бит. Ул саҡта беҙгә эш хаҡын да әкренләп арттыра барырҙар ине. Эшең булып, даими рәүештә хеҙмәт хаҡы алып торһаң, ипотеканы түләүе лә еңелләшер ине, тигән уйҙамын хәҙер. Дөйөм бәлә килгәндә, үҙ файҙаңды уйлап ҡына йәшәп булмай бит инде. Бәхеткә күрә, ил етәкселәре, финансистар һәм иҡтисадсылар, дефолт булмаясаҡ, тип ышандыра халыҡты. Юрағандары юш килһен! Яҡынраҡ ҡына баш ҡалабыҙ Өфөлә булып үткән ШОС һәм БРИКС илдәре, айырыуса донъя лидерҙарының береһе Ҡытай менән хеҙмәттәшлек һөҙөмтәләре оҙаҡ көттөрмәҫ, тормош кимәлебеҙ тағы ла яҡшыра төшөр, тип өмөтләнергә нигеҙ бирә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "БАЙЫҠ"ТЫ БЕР КҮРҺӘҢ...

## күрге килеп тик тора



*Бөрйән ҡыҙы Әҙилә Ишмөхәмәтова Учалының "Оҙонгүл" ансамбле менән.*

**Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы"нда башҡорт бейеүен башҡарыусы балалар араһында "Байыҡ" республика телевизион конкурсының гала-концерты үтте. 3 йәштән 15 йәшкә тиклемге балалар араһында быйыл етенсе тапҡыр үткәрелгән "Байыҡ" бәйгеһен тамаша ҡылыуҙан алған һығымталар шуны раҫлай: бейеүсе балалар хәрәкәттәрендә һиҙелерлек үҫеш, камиллыҡ, теүәллек, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас нәҙәкәтлек, ир-егеттәргә хас батырлыҡ күҙәтелә.**

**(Дауамы 11-се биттә).**

12+

БЫЛ АЙҘА...

# ХӘРБИ КӨСТӘР - ҠЕҮӘТЛЕ...

## донъябыҙ тыныс булһын!



**Йәйҙең һуңғы айы ла килеп етте. Шулай инде, тәмле нәмә күп булмай... Ләкин августа ла әле көҙгө рашҡыларҙа, буранлы ҡышҡы мәлдәрҙә һағынып һөйләнәсәк матур, ҡояшлы, емеш-еләкле - "татлы" көндәр байтаҡ буласаҡ. Мәҫәлән, был айҙа ер еләге, ҡурай еләге, сейә, ҡарағат кеүек баҡса емештәре бөтөүгә, ситтән килтерелгән баҡса "емеше" - арбуз, ҡауын сезоны башлана. Дөрөҫ, диетологтар һәм санитар табиптар был тәмлекәстәр менән ләззәтләнеү мәлен август урталары-аҙаҡтарына уҡ ҡалдырып торорға кәңәш итә, сөнки иртә һатыла башлаған емештәрҙә нитраттар - тиҙ өлгөртөү өсөн минераль ашламаға ҡушып индерелгән азот кислотаһы тоҙҙары күп була, ти улар.**

Иҫтәлекле даталарҙы күҙҙән үткәргәндә, шул иғтибарҙы йәлеп итә: был ай Рәсәйҙең Хәрби Көстәре ҡеүәтен данлаусы көндәргә бай икән. Үткән йәкшәмбе генә әле беҙ Өфө урамдарында тельняшка менән "бескозырка"ларын кейеп алған элекке моряктарға ҡарап һоҡланһаҡ, был йәкшәмбе, йәғни **2 август**, Һауа-десант ғәскәрҙәре көнө билдәләнә. Ошо уҡ көндө илебеҙҙең тимер юлсылары ла һөнәри байрамдарын ҡаршылай. Тағы ла ун көндән, йәғни **12 августа** - Хәрби-Һауа Көстәре көнө. Һәм, ниһайәт, был айҙың өсөнсө йәкшәмбеһенә тап килгән **16 август** - Рәсәй Һауа флоты көнө байрам ителә. Был тантаналы көндәрҙә ошо төр ғәскәрҙәрҙең флагтары менән бергә флагштоктарҙа Рәсәй Федерацияһы Флагы ла ғорур елберҙәйәсәк. Әйткәндәй, **22 август** - РФ Дәүләт Флагы көнө лә бит әле! Ә уның иртәгәһенә (**23 август**) илебеҙ халҡы тағы бер Хәрби дан көнө - совет ғәскәрҙәренең Курск һуғышында немец-фашистарҙы тар-мар иткән көнөн билдәләй, илебеҙ азатлығы өсөн баштарын һалған яугирҙарыбыҙҙың иҫтәлеген хөрмәтләй. Тап бына ошондай көндәрҙә Ер йөҙөндә тыныслыҡтың ни тиклем ҡәҙерле һәм кәрәкле икәнен ҡайта-ҡайта аңлайһың. Айырыуса бөтөн тереклек донъяһына һәләкәт менән янаусы ядро ҡоралланыуына ҡаршы көрәш алып бара прогрессив кешелек донъяһы. **6 август** - Хиросима көнө һәм шулай уҡ Бөтөн донъя ядро ҡоралланыуын тыйыу өсөн көрәш көнө. Ошо көн менән тыныс тормош күрһәткесе булған Төҙөүселәр көнөнөң (**9 август**) йәнәш килеүе үҙе бер ҙур мәғәнәгә эйә кеүек: илебеҙҙә генә түгел, бөтөн ер йөҙөндә шартлау-емерелеүҙәр булмаһын, фәҡәт төҙөлөш эштәре генә барһын ине, тип теләге килә. Яңы предприятиелар, завод-фабрикалар төҙөлһөн - кешеләргә эш урындары асылһын; мәктәптәр, балалар баҡсалары төҙөлһөн, яңы ауылдар, ҡалалар барлыҡҡа килһен, балалы ғаиләләр, йәштәр йортһоҙ интекмәһен - һуғыштар түгел еребеҙҙә, ә төҙөлөш барһын!

**9 август** шулай уҡ беҙҙең өсөн тағы бер мөһим дата - Халыҡ-ара аҫаба халыҡтар көнө билдәләнәсәк. Уның берҙәй үк кимәлдә беҙҙең башҡорт халҡына ла туранан-тура мөнәсәбәте бар. "Урал армыттарында, уның көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш урманлы-яланлы ерҙәрендә бынан 4-5- мең йылдар әүәл көн күргән башҡорттар ошо заманда әҙәми затҡа билдәле булған барлыҡ көнитмеш төрҙәрен дә үҙендә туплаған... Аҫаба хоҡуғы башҡорт өсөн һәр саҡ иң мөһим тормош ҡануны булған... Аҫабаны берәүгә лә бирмәҫ өсөн башҡорт диңгеҙҙәй ҡан түгә, миллиондан күберәк йән бирә, сөнки аҫабанан башҡа уның бер ниндәй бүтән мөлкәте лә юҡ. Бар булған мөлкәте - аҫаба ере" (Ғ. Хисамов "Аҫабалыҡ","Киске Өфө", №23, 2010). Үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, ер темаһы халҡыбыҙ тарихының һәр этабында ла көнүҙәк мәсьәлә булып ҡала. Ата-бабаларыбыҙ ерен һаҡлап, батшаларға ҡаршы баш күтәрһә, бөгөн тыуған ерен ташлап, ситкә тайыуҙы хуп күрә башҡорт ир-егеттәре...

**Фәйрүзә МИҘХӘТОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Август етә килә йә дефолт, йә хаҡтар артыуы, йә башҡа берәй күңелһеҙ хәлдәр тураһында һүҙ ҡуйырта башлайҙар. Бындай хәбәрҙәр һеҙҙе ҡурҡытамы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәрит ҒИЛӘЖЕВ, Өфө районы Подымалово ауылының ветерандар советы рәйесе:*** Элегерәк август етһә, шатлана инек: пенсия арта, тип. Хәҙер, киреһенсә, хаҡтар ғына арҡандан-арта бара. Халыҡ телендә был айға, ысынлап та, "ҡара август" тигән ҡушамат тағылды шул. Күңелһеҙ ваҡиғалар сылбыры 1991 йылдың һигеҙенсе айындағы путчтан башланып китте. СССР тарҡалып, власть башына Ельцин килгәс, ваҡиғалар тағы ла ҡуйыра төштө һәм ҡотолғоһоҙ хәл килеп тыуҙы. Ахырҙа, Ельцин үҙе теләп отставкаға китергә мәжбүр булды бит. Ул урынына ҡалдырып киткән Владимир Путин етәкселегендә "ҡырағай баҙар" упҡынынан яйлап ҡына ҡотола барабыҙ, тигәндә генә 2000 йылдың 12 авгусында "Курск" һыу аҫты кәмәһе менән ҡот оскос фажиғә булып ҡуйҙы... Ҡурҡыһың да шунан был "ҡара" августан. Аллаға шөкөр, һуңғы йылдарҙа былай ыңғай ғына килә башлап, халыҡ алдында августың "йөҙө" бер аҙ ағарҙы ағарыуын, ләкин кеше күңелендә ҡурҡыу ҡалды, ысынлап та. Хәҙер, уның ҡарауы, туҡтауһыҙ хаҡ арттыралар. Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙе генә алып ҡарағанда ла ниндәйҙер реаль сиктәр һәм нормаларҙың бөтөнләй булмауы был өлкәлә тулыһынса законһыҙлыҡ хөкөм һөрөүен күрһәтеп тора. Ирекһеҙҙән, урыҫ халҡының "Морозко" әкиәте иҫемә килеп төштө. Урманда, шыршы төбөндә туңып-ҡалтырап ултырған үгәй ҡыҙ менән нисек уҫал "шаяра" һуң әле Һыуыҡ бабай! Шаҡ ҡатырлыҡ һыуытып ебәрә лә үҙе ҡыҙыҡайҙан һорай: "Йылымы һиңә, ҡыҙыҡай, йылымы, матурҡай?" Зарланып өйрәнмәгән үгәй ҡыҙ сер бирмәҫкә тырышып:"Йылы, Һыуыҡ бабай, йылы, олатай,"- тип яуаплай. Һыуыҡ бабай уның һайын ҡотора, шарт та шорт килә, үҙе әйләнеп килә лә бер үк һорауҙы бирә ҡыҙыҡайға, әйләнеп килә лә һорай: "Йылымы һиңә, ҡыҙыҡай, йылымы, һылыуҡай?.."

Йылылыҡ, электр энергияһы, газ, эҫе һәм һыуыҡ һыу өсөн беҙгә лә әлегеләй әйләнә лә килә яңы хаҡтар, әйләнә лә килә... Ә беҙ һаман шыршы төбөндә дер ҡалтырап, туңып ултырған баяғы һылыуҡай шикелле, дөрөҫөн әйтергә, законлылыҡты талап итергә баҙнат ҡылмайбыҙ - "уңайһыҙланабыҙ", йәнәһе. Дәүләт Думаһы депутаттары коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙың туҡтауһыҙ артып тороуына сик ҡуйырға йыйына, тигән хәбәр ҡолаҡ "осона" ғына эләгеп ҡалғайны ла, тағы шым булдылар. Бәлки, август тыуғанын көтәләрҙер, халыҡты бер ҡыуандырайыҡ әле, тип. Август гел генә үгәй ай булып, ҡыйырһытылып йөрөмәһен, тиҙәрҙер, бәлки. Хәүеф-хәтәр етеп торор, йүнле хәбәр көтәйек, йәмәғәт.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. 31 авгусҡа тиклем 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына быға тиклемге хаҡ менән, йәғни 539 һум 76 тингә (индексы 50665) яҙыла алаһығыҙ.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 402 һумға яҙылырға була.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға 252 һум.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 252 һум.
- Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә **он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша vipishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.
- **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", "Антология поэзии Башкортостана", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", 2016 йылға башҡортса "Дини календарь", 2016 йылға "Мәктәп календары", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?
- Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.
- **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.
- Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә академик Н.Н.Бурденко исемендәге хәрби клиник госпиталдә Омскиҙа казарма емерелеү һөҙөмтәһендә зыян күргән һалдаттар Владимир Петров һәм Рөстәм Нәбиев, уларҙың ата-әсәләре һәм туғандары менән осрашты. Ике десантсының да хәле ауыр. Улар аңына килгән һәм юғары квалификациялы медицина ярҙамын ала. Рөстәм Зәки улы шулай уҡ ошо уҡ ваҡиғала зыян күргән 23 йәшлек Ейәнсура районы егете Илнур Ҡыуандыҡов менән телефон аша һөйләште. Әлеге көндә ул Мәскәү өлкәһендәге Солнечногорск шифаханаһында реабилитация үтә.

✓"Башнефть" акционерҙар нефть компанияһының директорҙар советы рәйесе итеп Рәсәй энергетика министрының беренсе урынбаҫары Алексей Текслер һайланды. Яңы советҡа ун кеше, элекке составтан "Башнефть" президенты Александр Корсик һәм бойондороҡһоҙ директор Чарльз Ватсон инә. Директорҙар советында Башҡортостандан республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рөстәм Мәрҙәнов һәм Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьев инган. 2014 йылдың 8 декабрендә "Башнефть" Мәскәү Арбитраж судының ҡарары буйынса федераль миләккә күсте. 21 июндә Рәсәй Президенты Владимир Путин "Башнефть" компанияһы акцияларының 25 процентын Башҡортостанға тапшырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.

✓"Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең 5 миллиард 18 миллион һум күләмендәге дивидендтары 2015 йылда Башҡортостан бюджеты сығымдарын өҫтәмә финанслауға йүнәлтеләсәк. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған тейешле указ республика хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Аҡса Рәсәй Президентының 2012 йылдың 7 майындағы указдарын тормошҡа ашырыуға, шул иҫәптән балалар баҡсаларына сиратты бөтөрөү буйынса сараларға, инженер инфраструктураһын үҫтереүгә, шулай уҡ социаль объекттар төҙөүгә һәм уларҙы реконструкциялауға, иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең мөһим тармаҡтарына ярҙамға, республика бюджетының тигеҙләнешен тәьмин итеүгә йүнәлтеләсәк.

✓ *Һүҙ ҙур көскә эйә. Уның менән һаҡ эш итеү тураһында атай-олатайҙарҙың меңәр йылдар аша килеп еткән мәҡәл-әйтемдәрендә лә сағыла: "Телең бауҙа булһа, башың һау булыр", "Теле ямандың көнө яман", "Телеңде теш артыңда тот.*



АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# ТЕЛЕҢДЕ...

## теш артыңда тот икән ул




**Бер танышым һуңғы осорҙа әленән-әле тормошона зарланды. Шылтыратҡан һайын ниндәй ҙә булһа ваҡиғаға, кешегә, әйбергә ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Тотоп ҡына битәрләр хәл-күренеш булмаһа, һөйләшеүҙе көнгә, һауа торошона ҡәнәғәтһеҙлек күрһәтеүҙән башланы. Уға ямғыр ҙа, ҡоро, эҫе көн дә оҡшаманы. Июнь башындағы ямғырҙарҙы әрләп кенә бөткәйне, уны самаһыҙ эҫе көндәр алмаштырҙы. Ҡояшлы көн дә уны тиҙ еҡһетте. Елле-ямғырлы һалҡын көн килгәйне, унан да ялҡты.**

Бер яҡтан уйлап ҡараһаң, зарланмай ҙа сараһы юҡ түгел кеүек. Йәшенле-ямғырлы бер көндө көслө ел мунсаһының ҡыйығын алып ырғытҡан. Эҫе көндә үҙенә ҡояш тейеп, саҡ шәбәйеп алды, дауыллы-елле көндә ауыҙ-мороно осондо...

Күптән түгел уны дауахана ҡаласығы биләмәһендә осраттым.

- Шул тиклем туйҙырҙы был тормош. Бер рәхәт күрмәй үлеп китермен инде, - тине хәләхүәл дә белешмәҫтән. Төҙҙә поликлиникалағы сиратҡа зарланды, шунан врачҡа, унып янындағы медсестраға ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Ҡыҫҡа ғына ваҡытта иренә, ҡыҙына ла һүҙ тейҙереп өлгөрҙө.

- Тормоштан ваз кисмәй тор, әле өйөгөҙҙө төҙөп бөтөрөп, ҡыҙыңды кейәүгә биргәнең, пенсияға сығып, ял итәһең бар бит әле, - тим.

- Иҫкә төшөрмә әле шул өйҙө, ҡоҫҡо килә башлай. Ул өй минән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй. Үлгәнсе, шуны эш итеп бөтөрөп булырмы-юҡмы, белмәйем. Дөрөҫөн әйткәндә, өй күптән минең бына ошо тирәлә инде, - танышым һуҡ бармағы менән муйынын ҡырҡҡан һымаҡ хәрәкәт эшләп күрһәтте. - Һуңғы ваҡытта бер нәмә лә ашай алмайым, тамағымдан аш үтмәй. Ябыға башлағанымды тойғас, тикшерелергә килгәйнем, ашҡаҙан сире таптылар. Һыу буйы оҙонлоҡ дарыуҙар рецебы алып ҡайтып барам бына...

Танышымдың һуңғы мәлдә "туйҙырҙы", "ҡоҫҡо килә", "уҡшытҡыс" тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡулланыуы, бөтә нәмәнән ерәнеүе, шикләнеүе, сирҡаныуы иҫкә килеп төштө. Күптән түгел генә шул хаҡта бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәткә тап булғайным. Танышыма ошо хаҡта һөйләй генә башлағайным, ташла әле фәлсәфәңде, юҡ-бар нәмә уҡыйһың да, шуға ышанып тик йөрөйһөң, тип ҡул һелтәне. Немец психотерапевы Носсрат Пезешкиандың һүҙҙәрҙең мәғәнәһе һәм көсө тураһында асышҡа юлығыуы, дөрөҫөрәге, төрлө ауырыуҙарҙы программалаған һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе асыуы тураһында яҙғандарын һөйләргә уҡталғайным уға.

Беҙ күптән инде уйҙың, һүҙҙең, фекерҙең матдилашыуы, йәғни күҙгә күренер хәлгә килтерелеүе, әүерелеүе хаҡында уҡып та, ишетеп тә беләбеҙ. Пезешкиан иһә иң сәләмәт кешенең дә һаулығына зыян килтергән ҡурҡыныс һәм емергес һүҙҙәрҙе асыҡлаған. Был һүҙҙәр, әлбиттә, йәнле телмәр эсендә бик яҡшы йәшенгән. Тәү ҡарамаҡҡа улар хәтер ҡалдырмаҫлыҡ, ҡәҙимге һүҙҙәр кеүек яңғырай, әммә кешенең физиологик ағзаларына туранан-тура кире йоғонто яһай, ти психотерапевт.

Пезешкиан емергес көскә эйә булған һүҙҙәрҙе ҡулланып, беҙ үҙебеҙгә, тәнебеҙгә, йәнебеҙгә аныҡ бойороҡ бирәбеҙ, тип иҫбатлай. Туйҙырҙы, ҡоҫторҙо тигән һүҙҙәр - иң ҡурҡынысы, бәҡһаң. Улар ашҡаҙан сиренән анорексияға тиклем килтереүе ихтимал. Был һүҙҙәрҙе күберәк ҡатын-ҡыҙҙан ишетергә тура килә. Тәкәбберлегебеҙҙән сығып, теге йәки был кеше хаҡында йыш ҡына, уның тураһында ишеткем дә, күргем дә килмәй, тип әйтеп ебәрәбеҙ. Был һүҙ ҙә туранан-тура беҙҙең күреү, ишетеү һәләтебеҙгә йоғонто яһай, ти врач.

Ҡанымды эсеп бөтөрҙә, елек майымды һурҙы, һығылған лимон һымаҡ булдым, тигән һүҙҙәр ҙә бар телмәребеҙҙә. Быларҙы асыу һәм тәрән күңел кисерештәре менән йыш әйткән осраҡта ҡанға зыян килә икән.

Ат кеүек эшләйем, иң ауыр йөктө мин тартам, бөтә эш минең елкәлә, тип зарланғандарҙа быуын, һөйәк ауырыуҙары һәм остеохондроз йыш осрай. Бынан тыш, уларҙың ғаилә мөнәсәбәттәре көйһөҙ була һәм карьера өлкәһендә лә ырата алмай.

Элегерәк икенсе бер танышымдың "хәйерсе" һүҙен йыш ҡулланыуы иҫкә төштө. Ҡулынан бер нәмә төшөп китһә, бер нәмәне онотһа, унынса булмаһа йәки уйлағаны килеп сыҡмаһа, ҡәһәтләнеп, айырым бер асыу менән әйтә ине был һүҙҙе. Үҙен әрләнеме, әллә эргәһендә торған кешенеме - белмәҫһең. Хәҙер уйлайым, әллә шул хәйерсе, хәйерһеҙ тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡулланғанға бер ҡайҙа ла тотороҡло ғына эшләй алманымы икән? Эшкә талымһыҙ, әрһеҙ булһа ла, бер ҙә йәлсемәне. "Психологтар биш йыл һайын эш урынын алыштырырға кәрәк", ти, тигән булып, бер эштән икенсеһенә күсеп йөрөп, хаҡлы ялға сыҡты инде, әммә үҙенең даими йәшәү урыны ла юҡ.

Һүҙ ҙур көскә эйә. Уның менән һаҡ эш итеү тураһында атай-олатайҙарҙың меңәр йылдар аша килеп еткән мәҡәл-әйтемдәрендә лә сағыла: "Телең бауҙа булһа, башың һау булыр", "Теле ямандың көнө яман", "Телеңде теш артыңда тот, ҡолағыңды киҫмәһен", "Уйламай әйткән - ауырымай үлгән". Бик хаҡ әйткән боронғолар. Һаҡ булайыҡ һүҙ менән, үҙебеҙгә лә зыян килтермәйек, эргәләге кешеләрҙең дә күңелен ҡыймайыҡ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ЕТӘКСЕЛӘР ҺҮҘЕН

## йышыраҡ ишеттерегеҙ

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙҙың гәзитебеҙ, унда баҫылған мәҡәләләр тураһындағы хаттарын, шылтыратыуҙарын көтөп алабыҙ. Ләкин, күрәһегеҙ, "Шаңдау" рубрикаһы бик һирәк кенә килеп сыға баҫмабыҙҙа, тимәк, уҡыусыларыбыҙ хаттары менән беҙҙе артыҡ иркәләмәй. Бына әле "Уҡып сыҡтым..." тигән яңы рубрика асып, уҡыусыларыбыҙға, гәзиттә баҫылған мәҡәләләр буйынса фекерҙәрегеҙҙе ишеткебеҙ килә, тигән саҡырыу ташларға булдыҡ. Яҙығыҙ, шылтыратығыҙ. Ә түбәндәге хат ошо рубриканың тәүге ҡарлуғасы булһын, әйҙә.**

"Киске Өфө" гәзитенең 27-се һанында Өфө ҡалаһы башлығы Ирек Ялалов менән әңгәмәне ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым. Баш ҡалабыҙ әле генә ҙур саралар - ШОС саммиты менән БРИКС илдәре лидерҙары осрашыуын үткәреп ебәрҙе. Бындай мәртәбәле ваҡиғаларҙың республикабыҙ, баш ҡалабыҙ өсөн ни тиклем кәрәк һәм мөһим булыуы тураһында фекерҙәр төрләнәгә булды, әлбиттә. Әңгәмәлә ҡала башлығының ошо фекерҙәргә, сараларға, эшләнгән эштәргә ҡағылмай ғына, өфөләр, Өфө тураһындағы яуаптары үтә ҡыҙыҡлы тойолдо.

Шундай йәмғиәттә йәшәйбеҙ, бөгөнгө заманда тарихың, үткәнең менән ғорурланып ултырып ҡына алға китеп булмай. Ҡалалар менән дә шундай уҡ хәл. Беҙҙең ҡалала теге йәки был шәхес тыуған, тип кенә, мәҫәлән, ҡаланы донъяға танытыу мөмкин түгел. Бөгөнгө көндә донъяның эре ҡалалары юҡҡа ғына халыҡ-ара саралар үткәреү хоҡуғы өсөн ярышмай. Сөнки был һәр ваҡыт ҡабул иткән яҡтың имиджына эшләй. Саммиттарға майҙансыҡ биреп, Өфөнө бар донъяға танытыҡ түгелме һуң әле лә! Сәйәси ваҡиға, тип кенә ҡараһаң да, күпме эшлекле бәйләнештәр булдырылды, инвесторҙар йәлеп ителде. Киләсәктә лә был беҙҙең файҙаға эшләйәсәк, ана, Екатеринбургты ғына хәтергә төшөрөгөҙ. Шанхай ойошмаһы хеҙмәттәшлеге һәм БРИК (ул ваҡытта Көньяҡ Африка Республикаһы ағза-ил булып тормай ине) саммиттары ҡатнашыусыларын ҡабул иткәндән һуң, ул хәҙер донъя кимәлендә танылыу яулаған ҡала булараҡ, Рәсәй, донъя кимәлендәге төрлө сараларҙы йыш үткәрә. Беҙҙең республиканы, ҡаланы бер кем дә белмәй ул, тип ҡул ҡаушырып ултырыу түгел был, донъя аренаһына сығыу, донъя мәҙәниәтенең бер өлөшөнә әүерелеү.

Әлбиттә, халыҡтың фекере төрлөсә була инде ул, үҙгәрештәрҙе лә йыш ҡына тәүҙә кире тойғолар менән ҡабул итә торған холҡобоҙ бар. Шуға ла тап ошондай мөһим һәм һынылышлы осорҙа республика, баш ҡала етәкселәренең яуаплылығы икеләтә арта. Ирек Ишмөхәмәт улы дөрөҫ әйтә, үткән быуаттың 60-90-сы йылдары, хатта 2000 йылдарҙың башы менән сағыштырғанда, Өфө бөгөн танырлыҡ түгел. Ысынлап та, тотош ҡала үҙәк һымаҡ була ла алмай, әле башҡарылаһы эштәр күп, ҡала коммуникациялары, транспорт, торлаҡ проблемалары хәл итеүҙе көтә. Бөтөн иҫке нәмәне ҡапыл яңыртыу ҙа мөмкин түгел, шуға халыҡҡа бер аҙ сабыр булыу ҙа ҡамасауламаҫ ине.

Әйткәндәй, ҡала башлығының өфөләр тураһындағы фекере лә оҡшаны миңә. Халыҡтың ышанысын аныҡ эштәр менән генә яулап булыуын аңлай етәксе. Бөгөнгө көндә Рәсәй ҡалаларының һәр береһендә осраған ҡала хужалығындағы ауыр хәлде күҙ уңында тотоп, илленең 20-30 йылда ҡала менән идара итеү системаһында инженер белемле кешеләр эшләргә тейеш, тигәне менән дә килешмәй булмай. Шул уҡ ваҡытта, Ирек Ялаловтың халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә лә битараф булмауы, йәшәйеш өсөн рухи күтәренкелеге кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алыуы һөйөндөрҙө.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы - гәзит уҡыусыларҙы ҡалабыҙҙың етәкселәре, депутаттар менән таныштырып, беҙҙең һәр беребеҙҙе лә борсоған һорауҙарға уларҙың яуаптарын ишеттерербә бик күркәм күренеш. Шуға ла гәзит биттәрендә улар менән яңы осрашыуҙар көтөп ҡалабыҙ.

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БРИКС һәм ШОС илдәренең беренсе йәштәр форумы Өфөлә 26 июлдә эшләй башлағайны. Унда Рәсәй, Бразилия, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ Африка Республикаһы, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Үзбәкстандан йөҙҙән ашыу йәш лидерҙар ҡатнашты. Йәштәр форумында Рәсәй йәштәр союзы Көньяҡ Африка Республикаһы һәм Бразилияның ҙур йәштәр ойошмалары менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәргә ҡул ҡуйҙы.

✓Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты мөфтиәт резиденцияһы урынлашасаҡ урын өсөн тауыш биреү уҙғара. Әлеге мәлдә Өфө исемлектә беренсе урынды биләй. Икенсе урында - Ҡаҙан, өсөнсөлә - Мәскәү һәм Махачкала. Грозный ҡалаһы иң аҙ тауыш йыйған. Конкурс "Бәйләнештә" социаль селтәрендә Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының рәсми битендә уҙа. 5 августҡаса теләгән һәр кем үҙ фекерен белдерә ала.

✓3 августан 7-нә тиклем Республика дауалау-физкультура диспансерында Физкультурниктар көнөнә арналған Асыҡ ишектәр аҙналығы ойошторола. Был көндәрҙә сәләмәт йәшәү рәүеше, спорт медицинаһы, умыртҡа бағанаһының боҙолоуын, сколиоз һәм башҡа терәк-хәрәкәт системаһы сирҙәрен иҫкәртеү буйынса бушлай кәңәштәр алырға мөмкин. Өлкәндәр Сәләмәтлек үҙәгендә тын алыу, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын, ҡандағы шәкәр, холестерин кимәлен тикшертә ала. Диспансерҙың адресы: Өфө ҡалаһы, Блюхер урамы, 1. Эш режимы: иртәнге сәғәт 9-ҙан көндөҙгө 4-кә тиклем.

✓30 июлдән Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу талисманын эшләүгә конкурс башлана. Сара 2016 йылдың 1 июленән 15 августына тиклем үтәсәк. "Комсомольская правда" нәшриәт йортоноң сайтында конкурс шарттары баҫылған. Конкурс 30 июлдән 31 августҡаса дауам итәсәк, эштәр 26 августҡа тиклем ҡабул ителә. Тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса иң күп балл йыйған 10 ҡатнашыусы билдәләнәсәк. Жюри уларҙың араһынан еңеүсене һайлап аласаҡ һәм уға аҡсалата премия - 50 мең һум тапшырыласаҡ.

✓Республика райондарында күреү һәләтен диагностикалау үҙәктәре асыла. Шишәмбе, 28 июлдә, Иглин районы үҙәге Иглинда ла ошондай учреждение үҙ ишектәрен асты. Муниципалитет хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, бөгөнгө тиклем район үҙәгендә күреү һәләтен диагностикалау, шулай уҡ яңы быуын оптикаһы булмаған. Халыҡ тикшерелеү өсөн баш ҡалаға йөрөгән.

✓ *Ҡалала өҫтәмә рәүештә 500 мең квадрат метр торлаҡ барлыҡҡа киләсәк. Иң ҙур проект 20 гектар майҙанда 201 мең квадрат метр торлаҡ, шул иҫәптән бейеклеге 154 метрға еткән ике 51-әр ҡатлы игеҙәк-башня төҙөү күҙаллана.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШ ҠАЛАБЫҘ...

## юғары баһа алды

**Ҡала округы хакимиәтенең сираттағы кәңәшмәһендә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Ул муниципалитет командаһына һәм баш ҡала халҡына ШОС илдәре башлыҡтары саммиты һәм БРИКС илдәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтары осрашыуына әҙерлек, уларҙы үткәреү буйынса эшмәкәрлеге өсөн рәхмәт белдерҙе.**

- Барыһы ла Өфөнөң йөҙөн, уның ниндәй кимәлдә үткәрелеүен, әҙерлек барышын һәм ҡала матур булһын өсөн көстәрҙе бергә туплау эшмәкәрлеген лайыҡлы баһаланы. Рәсәй Президенты Өфө ҡалаһы һәм республика халҡына үҙенең рәхмәтен еткерҙе. Барығыҙға ла рәхмәт, - тине Рөстәм Хәмитов йыйылыусыларға мөрәжәғәт итеп һәм, әҙерлек эштәре тап ябай кешеләр ҡулы менән башҡарылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, һәр етәксегә үҙ коллективында эшләүселәргә рәхмәт һүҙҙәре еткереүҙәрен һораны.

Шулай уҡ Республика Башлығы һуңғы ике йылда үҫешкә юғары планка ҡуйылыуын да билдәләне:

- Өфө күҙгә күренеп үҙгәрҙе, унда йәшәү өсөн уңайлы мөхит булдырылды. Яңы ял итеү урындары асылды, уларҙа ғаилә менән ял итергә, балалар менән йөрөргә мөмкин. Был беҙҙең үҫеш йүнәлешен дөрөҫ һайлауыбыҙҙы раҫлай. Ошо йүнәлештә артабан да эшләйәсәкбеҙ.

Киләсәккә пландар менән таныштырып, республика Башлығы ҡала округында ғына түгел, ауылдарҙа ла халыҡ өсөн уңайлы һәм имен шарттар тыуҙырыу буйынса эштәр дауам итергә тейешлегенә баҫым яһаны. Был торлаҡ менән тәьмин итеү менән бер рәттән, мәшғүллек һәм лайыҡлы эш хаҡы алыу кеүек мотлаҡ булған талап. Шулай уҡ ҡаланың төньяҡ өлөшөн төҙөкләндереү, Дим, Затон, Ағиҙел, Ҡариҙел йылғалары аръяғы территорияһын үҫтереү, ғөмүмән, барлыҡ йүнәлештәрҙә лә эш алып барыу кәрәклеген белдерҙе.

ШОС һәм БРИКС саммиттарынан һуң Башҡортостан һәм Өфө Рәсәйҙең ҙур халыҡ-ара сараларҙы ҡабул итергә һәләтле ҡалалар иҫәбенә инде. Был йәһәттән көҙгә ҡарай пландар күҙаллана ла инде.

*... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# УҠЫУ ЙЫЛЫНА ӘҘЕРҘӘР



**Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов мәғариф идаралығы вәкилдәре менән бергә мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү учреждениеларының яңы уҡыу йылына әҙерлеге менән танышты.**

Эш сәфәренең беренсе туҡталышы - Октябрь районының Яр буйы урамында төҙөлөп ятҡан балалар баҡсаһы. Ул баш ҡаланың 230 балаға иҫәпләнгән иң ҙур мәктәпкәсә учреждениеһы буласаҡ. Социаль объект йыл һуңында ҡулланыуға тапшырылырға тейеш. Дөйөм алғанда, Өфө ҡалаһында мәктәпкәсә белем биреүсе 246 учреждение бар, шуларҙың 230-ы - муниципаль, 4-е - ведомство, 12-һе - дәүләттеке булмаған балалар баҡсаһы. Уларҙа йәмғеһе 55 меңдән ашыу бала тәрбиәләнә.

Былтыр Орджоникидзе һәм Октябрь райондарында барлығы 406 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөлгән. Быйыл тағы ла өс төҙөлөштө ("Дим-8", Инорс-7", "Шаҡша-5" биҫтәләре) тамамлау планлаштырыла.

Шулай уҡ Орджоникидзе районының әлеге ваҡытта фасадына реконструкция үткәрелгән 85-се урта мәктәбе һәм Киров районының 9-сы урта белем биреү мәктәбе лә иғтибар үҙәгенә эләкте. Ирек Ишмөхәмәт улын социаль объекттарҙың эстәрен йыһазландырыу һәм биҙәү, ҡараңғы мәлдә ихатаны яҡтыртыу, уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеге, сәләмәтлектәре сикләнгән балалар өсөн булдырылған шарттар ҙа ҡыҙыҡһындырҙы.

# ИГЕҘӘК ЙОРТТАР



**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында депутаттар ҡала бюджетына үҙгәрештәр индерҙе, әммә уның ҡабул ителеп раҫланған күләме шул килеш ҡалды. Төҙәтеүҙәр индереү февралдә хакимиәттең Ер ресурстары буйынса һәм Муниципаль милек идаралыҡтары бөтөрөлөү сәбәпле, уларға тәғәйенләнгән аҡсаны бүлеү зарурлығы менән килеп тыуған.**

Ултырышта былтыр 30 декабрҙә ер участкаларына кадастр хаҡын раҫлау һөҙөмтәһендә 2007 йылда ҡабул ителгән ҡуртымға алынған ерҙәргә түләү тураһындағы ҡарарға үҙгәрештәр индереү мәсьәләһе лә ҡаралды. Был ер мөнәсәбәттәре өлкәһендә тәртип булдырыуҙа тағы бер аҙым булып тора. Муниципалитеттың ошо мәсьәләгә бәйле алып барылған эшмәкәрлеге баш ҡала территорияһында "һоро схема"ларға юл ҡуймау, ер участкалары менән мутлашыу һәм спекуляция осраҡтарын бөтөрөүгә йүнәлтелә. 2012 йылдан алып был өлкәлә килешеүҙәр төҙөүгә тәрән анализ яһала, участкаларға сығып тикшереүҙәр алып барыла һәм ер ҡануниәте боҙолған осраҡта акттар төҙөлә. Сөнки ҡуртымға алынған участкаларҙа яңы йорттар, социаль, спорт объекттары, сауҙа-күңел асыу комплекстары, предприятиелар төҙөлгән осраҡта ғына муниципалитет үҙ бюджетын тулыландыра ала.

Ултырыш барышында депутаттар бер нисә биҫтәлә комплекслы төҙөлөш планлаштырыуға бәйле ҡала территорияһын межалау һәм планировкалау буйынса йәмәғәт тыңлауҙары урынын һәм көнөн билдәләне. Был проекттар тормошҡа ашырылғанда ҡалала өҫтәмә рәүештә 500 мең квадрат метр торлаҡ барлыҡҡа киләсәк. Иң ҙур проект Салауат Юлаев һәм Сәғит Агиш, Николай Дмитриев урамдары киҫелешендә буласаҡ. Бында 20 гектар майҙанда 201 мең квадрат метр торлаҡ, шул иҫәптән бейеклеге 154 метрға еткән ике 51-әр ҡатлы игеҙәк-башня төҙөү күҙаллана. Биҫтәлә 1100 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп, парк, поликлиника, спорт майҙаны, паркинг, 125 һәм 100 урынлыҡ ике балалар баҡсаһы буласаҡ.

Икенсе ҙур биҫтә Сипайлово, Ватутино, Рудольф Нуриев һәм Өфө шоссеһы урамдары менән сикләнгән территорияла буласаҡ. Бында 151,6 мең квадрат метр торлаҡ һәм 170 мең квадрат метр самаһы майҙанда йәмәғәт тәғәйенләнешендәге бина төҙөү планлаштырыла. Биналарҙың бейеклеге 33 метрға етәсәк.

Тағы ике бәләкәйерәк масштаблы төҙөлөш Затон биҫтәһендә һәм ҡаланың үҙәгендә планлаштырыла. Барлыҡ алты проектты ла тормошҡа ашырғандан һуң яңы йорттарҙа кәмендә 16700 кеше йәшәйәсәк.

# ӨЙ ТУЙЛАЙҘАР



**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең беренсе ведомство йорто үҙенең хужаларын ҡабул итте. Уларҙы тәбрикләргә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов менән РФА ӨҒҮ рәйесе Усеин Джемилев та килгәйне. Бөгөндән күсеп йәшәү мөмкинлеге булған бер, ике, өс бүлмәле фатирҙарға 102 ғаилә асҡыс алды.**

Йәш ғалимдар өсөн үҙ фатирыңдың асҡысын ҡулға тотоу - оҙаҡ көтөлгән һәм шатлыҡлы ваҡиға ул. Шул уҡ ваҡытта эшләү, яңы асыштар яһау һәм алға барыу өсөн стимул да. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, бындай мөнәсәбәт фәнгә яңы һәләтле йәштәрҙе йәлеп итеү мөмкинлеге бирәсәк.

Ведомство йорттары төҙөү тәжрибәһе артабан да дауам итәсәк һәм яҡын киләсәктә йәш ғалимдар өсөн тағы ла бер йорт төҙөү күҙаллана.

# УҢАЙЛЫ БУЛҺЫН ҠАЛАБЫҘ



**Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы алдындағы көнүҙәк бурыс - ул Өфөнө донъя кимәлендә танытырлыҡ шарттар булдырыу. Шул саҡта лайыҡлы сифатлы ҡала мөхитенә өлгәшәсәкбеҙ, тине сираттағы матбуғат конференцияһында идаралыҡ етәксеһе Илдар Ибраһимов.**

Бының өсөн территорияларҙы үҙләштереү һөҙөмтәлелеген күтәрергә һәм улар менән эшләү технологияларын үҙләштерергә, был процеста муниципалитет һәм инвесторҙарҙың ниндәй роль уйнауын асыҡларға кәрәк. Әле Орджоникидзе һәм Калинин райондарын үҫтереүгә етди иғтибар бирелә. Икенсенән, сәнәғәт территорияларын реконструкциялау һәм реновациялау менән шөғөлләнеү мотлаҡ. Бында "УЗЭМИК" заводының эшмәкәрлеген миҫал итеп килтерергә мөмкин: уның территорияһында ете мең кешелек торлаҡ комплексын төҙөү планлаштырыла. Бынан тыш, архитекторҙар ҡунаҡхана, мәктәп, балалар баҡсаһы һәм парковка төҙөүҙе лә күҙаллай.

Шулай уҡ территорияларҙың бер-береһе менән бәйләнешен дә тәьмин итеү зарур. Сөнки тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, һәр райондан эшкә яраҡлы халыҡтың 30-40 проценты баш ҡаланың үҙәгенә эшкә йөрөй. 20 процент уның төньяҡ өлөшөнә бара. Дим районы халҡының 14 проценты көн һайын Черниковкаға йүнәлә, Затон халҡының 11 проценты - Димгә, Черниковканың 11 проценты - Йәшел сауҡалыҡҡа, Йәшел сауҡалыҡтың 8 проценты Сипайловоға йөрөп эшләй. Был мәғлүмәт киләсәктә Өфөнөң транспорт селтәрен

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөләге парктарҙа, клубтарҙа, мәктәп һәм балалар баҡсалары биләмәләрендә китапханасылар йәйге "Китап уҡыусы ихатаһы" эшен ойоштորҙо. Бында китапхана яҙҙырған яңы гәзит-журналдар, сағыу балалар әҙәбиәте күргәҙмәгә ҡуйыла. Теләүселәр ҡыҙыҡлы һәм файҙалы әҙәбиәт менән алмаша аласаҡ. Кескәйҙәрҙе "Яратҡан әкиәтселәр" кроссворды көтә, уны сисеүселәргә татлы бүләктәр ҡаралған. Һауа торошо яҡшы торғанда йәйге китапхана 31 авгусҡаса көн һайын көндөҙгө сәғәт 4-тән 6-ға тиклем асыҡ буласаҡ, шәмбе һәм йәкшәмбе - ял көндәре.

✓Хунгароринг та үткән ярыш Өфө спортсыһы Даниил Квят - "Формула-1" уҙышсыһы өсөн уңышлы булды. Етенсе позициянан старт алғандан һуң ул икенсе урын яуланы. Үҙенең еңеүен яҡташыбыҙ һәләк булған автоуҙышсы Жюль Бьянкиға һәм уның ғаиләһенә арнаны.

✓Башҡортостанда ата-әсәләр балаһының наркотиктар ҡулланыуға бирешеүсәнлеген асыҡлай ала. Бының өсөн уларға "Сәләмәт ғаилә" наркоманияны иҫкәртеү буйынса проект сиктәрендә әҙерләнгән тест үтергә кәрәк. Проект етәксеһе, психиатр-нарколог Азат Әсәҙуллин һүҙҙәренсә, бындай тикшереүгә биш минут тирәһе ваҡыт талап ителә. "Әлеге тест фәнни нигеҙләнгән, ә интернетты файҙаланыу теләгән һәр кемгә ғалимдарҙың асышын ҡулланырға мөмкинлек бирә", - тип билдәләй Азат Әсәҙуллин. Был тесты "Сәләмәт ғаилә" проекты порталында үтергә мөмкин.

✓Өфөнөң төньяғындағы ташландыҡ Новоалександровка ҡасабаһы сәнәғәт йүнәлеше буйынса кластер булараҡ үҫешәсәк. Был хаҡта Өфө округы хакимиәтенең Баш архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы етәксеһе Илдар Ибраһимов мэрияла үткән матбуғат конференцияһында белдерҙе. Новоалександровка ҡасабаһы Өфөнөң төньяғында Ағиҙел буйында урынлашҡан. 1992 йылдан 1995 йылға тиклем халыҡты нефть сәнәғәте предприятиеларының санитарһаҡлау зоналарынан ситкә күсергәндәр.

✓Өфөлә транспортты тәбиғи газ менән заправкалау өсөн яңы форматтағы станция асылды. Ул Затон биҫтәһендәге Әхмәтов урамында урынлашҡан газ менән заправкалау станцияһын реконструкциялау һөҙөмтәһенә барлыҡҡа килде. Был - илдә "Газпром" компанияһының федераль газ менән заправкалау селтәренең бер өлөшө буласаҡ тәүге объект. Яңыртыу барышында станцияла юғары ҡеүәтле компрессорҙар ҡуйылған.

***✓ Ете һыу алыу ҡоролмаһының бишеһендә һыуҙы ультрафиолет менән зарарһыҙландырыу системаһы ҡуйылған, улар микробиологик бысраныуҙан һәҙөмтәле һаҡлай.***



үҫтереүҙә иҫәпкә алынасаҡ. Ғөмүмән, баш ҡала йәшәү өсөн уңайлы ҡала булараҡ үҫешеүгә йүнәлеш ала.

## "ҠЫҘЫЛ ӘТӘС" ЯЛ ИТӘ



**Баш ҡалала йыл башынан алып былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда янғындар 11-гә әҙерәк теркәлгән. Һуңғы ете йылда тоторокло кәмеү күҙәтелә. Һөҙөмтәлә янғында һәләк булыусылар һаны ла әҙәйә бара.**

Шулай уҡ янғын сығанаҡтарын һүндереү мәсьәләләрендә лә алға китеш бар. Былар барыһы ла муниципаль янғын хеҙмәтен үҫтереү һәм ҡалала янғынға ҡаршы профилактик саралар үткәреүҙе көсәйтеү һөҙөмтәһе булып тора. Янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләһенә килгәндә, Өфөнөң тарихи һәм тәбиғи үҙенсәлектәренә ҙур иғтибар бирелә: былда ағас йорттар бихисап, ҡала ситендәге өйҙәр урманға яҡын төҙөлгән. Ошоларға бәйле йыл һайын профилактика эштәре башҡарыла: шәхси йорттарҙа йәшәүселәргә рекомендациялар бирелә һәм янғын ҡағыҙәләрен һаҡларға өйрәтелә, имен булмаған ғаиләләр йәшәгән йорттарға рейдтар үткәрелә. Шулай уҡ ауыр хәрәкәтләнеүсе халыҡ төркөмө лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай.

Урмандар алты маршрут буйынса оператив төркөм тарафынан тикшерелә. Урман янғындарын һүндереү өсөн ойошторолған йыйылма отряд урмандарҙы патрулләй. Махсус техника һәр саҡ әҙерлек һыҙығында тора. Өфөнөң иҡтисад объекттарында һәм уҡыу йорттарында 4809 кешене берләштергән 289 ирекле янғын һүндереү дружинаһы ойошторолған. Өфө дәүләт нефть техник университетында һәм Өфө дәүләт радиоэлектроника колледжында ирекле янғын һүндереү командалары бар.

Янғын хәүефе ҙур булған миҙгелгә әҙерлек сиктәрендә "Өфө һыу каналы" предприятиеһы менән берлектә һыу менән тәьмин итеү торошо ла тикшерелгән. Шулай уҡ тәбиғи сығанаҡтарҙан һыу алыу мөмкинлеге лә билдәләнгән. Максимовкалағы күлдә, Нуғай ауылындағы быуала, Димдәге Кустаревка күлендә, Нижегородкалағы Оҙонкүлдә янғын пирстары эшләй. Өфөләге урман территорияһында янғын сыға ҡалһа, уны тиҙ арала һүндереү өсөн 137 берәмек техника һәм 1,5 мең кеше әҙерлектә тора.

## ХЕҘМӘТЕНӘ КҮРӘ - ХӨРМӘТЕ



**Күптән түгел генә асылған "Ете ҡыҙ" фонтаны ҡала халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары араһында ҙур популярлыҡ яуланы. Кем өсөндөр ул ғаилә менән ял итеү урыны әүерелһә, йәштәр унда дуҫтары менән осраша.**

Фонтандың үҙенсәлеге шунда: ул "йырлай". Кискеһен бында махсус яҡтыртыу ҡоролмалары тоҡандырыла һәм уның нурҙарында ҡыҙҙар бейеп йөрөгән кеүек тойола. Фонтандың боронғо легенда нигеҙендә эшләнгәнен һәм уның асылын аңлатыу өсөн экран аша республика күренештәре һәм "Ете ҡыҙ" бейеүе трансляциялана.

Ошо көндәрҙә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов композиция авторын - Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Хәниф Хәбибрахмановты Өфө ҡала округы хакимиәтенең Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләне. Хәниф Мирзаһит улының эштәре баш ҡаланың бер нисә территорияһын биҙәй ҙә инде. Салауат Юлаевтың скульптураһы БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Йорто алдына ҡуйылған, Заһир Исмәғилов һәйкәле Ленин урамында урынлашҡан, Муса Гәрәевтың бюсы - Еңеү паркында һ.б.

*АЛДАНМАҒЫҘ!*



## ЭСӘР ҺЫУЫБЫҘ ТАҘА -
### фильтр ҙа кәрәкмәй

**Баш ҡаланың Черниковка биҫтәһендә фатирҙар буйлап йөрөп, үҙҙәрен "Өфө һыу каналы" МУП-ы хеҙмәткәрҙәре тип таныштырып, кешеләрҙе, бигерәк тә пенсионерҙарҙы йыйылышҡа саҡырып һәм бер йылдан һуң барлыҡ граждандарға ла өйҙәрендә фильтр ҡуйҙыртылырға тейеш буласағы тураһында Федераль программа тураһында һөйләүҙәре хаҡында мәғлүмәт таралды.**

Муттар үҙҙәренән хәҙер һәм акция буйынса арзан хаҡҡа фильтр һатып алырға тәҡдим итә. Улар Өфөлә эсәр һыуҙың бик бысраҡ, ҡаты, составында ауыр металдар булыуын раҫлай. Ғәмәлдә бер ниндәй ҙә Федераль программа юҡ һәм һыуға ҡағылышлы барлыҡ ғәйепләүҙәр нигеҙһеҙ.

"Өфө һыу каналы" МУП-ы белдереүенсә, Өфөлә һыу барлыҡ күрһәткестәр буйынса ла Рәсәй, халыҡ-ара хәүефһеҙлек һәм сифат талаптарына яуап бирә. Ете һыу алыу ҡоролмаһының бишеһендә һыуҙы ультрафиолет менән зарарһыҙландырыу системаһы ҡуйылған, улар микробиологик бысраныуҙан һөҙөмтәле һаҡлай. Һыу алыу ҡоролмаларында хәүефле шыйыҡ хлор урынына натрий гипохлориды ҡулланыла.

Эсәр һыуҙың сифатын контролләүҙе тәьмин итеү системаһында төп урында тикшерелеүсе күрһәткестәрҙең күләме һәм составы тора. "Өфө һыу каналы" МУП-ының Үҙәк лабораторияһы эсәр һыу составын һәм сығанаҡтағы һыуҙы 105 күрһәткес буйынса ныҡлы тикшерә, ә дөйөм аккредитацияла 209 сифат күрһәткесе бар. Үҙәк лаборатория заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған һәм ул һыуҙың сифатын мотлаҡ программа күрһәткестәре, шул иҫәптән уның ҡатылығы, тимер миҡдары һәм асыҡлығы буйынса ла баһалау мөмкинлегенә эйә. "Өфө һыу каналы" МУП-ы эсәр һыуҙың эпидемиологик күҙлектән ҡарағанда һәм химик составы буйынса хәүефһеҙлегенә гарантия бирә һәм фильтрҙар һатыу менән шөғөлләнмәй.

*ҺОРАУ - ЯУАП*



## ФАТИРҘЫ НИСЕК ЯҘҘЫРЫРҒА?

**Таныштарым 2012 йылда ҡыҙҙарына фатир алыу өсөн аҡса бирҙе. Ҡулдарында аҡса бүләк итеү тураһындағы килешеү бар. Әлеге мәлдә ул фатирҙа үҙҙәре йәшәй һәм барлыҡ түләүҙәрҙе лә үҙҙәре башҡара. Фатирҙы үҙҙәренең шәхси милкенә күсереү өсөн уларға ни эшләргә? Әгәр ҙә ҡыҙҙары менән берәй хәл булһа, фатир кемгә ҡаласаҡ? Ҡыҙҙары кейәүҙә, улы бар.**

- Әгәр ҙә фатир ҡыҙҙары кейәүгә сыҡҡанға тиклем һатып алынһа, ул бүләк итеү йәки һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөп ата-әсәһе исеменә яҙҙыра ала. Кейәүҙә саҡта һатып алынған булһа, бындай килешеү төҙөү өсөн иренең нотариуста теркәтелгән ризалығы кәрәк буласаҡ.

Ҡыҙҙары вафат булған осраҡта, әгәр ҙә мираҫнамә яҙылмаған булһа, ире үҙенә фатирҙың 1/2 өлөшөн алып (йәмәғәт өлөшө - супружеская доля), ҡалған өлөшө туғандарына, шул иҫәптән иренә лә мираҫ буйынса күсәсәк. Әгәр ҙә таныштарығыҙ фатирҙың улар бүләк иткән аҡсаға һатып алыныуын иҫбатлай алһа, кейәү кеше йәмәғәт өлөшөн бүлдерә алмаясаҡ һәм фатир вариҫтар араһында тигеҙ өлөштәргә бүленәсәк.

## ҮГӘЙ БАЛАҒА ПЕНСИЯ БУЛАМЫ?

**Ирем вафат булғас, уртаҡ улыбыҙға ҡараусыһыҙ ҡалыу буйынса пенсия тәғәйенләнде. Ләкин Пенсия фонды беренсе никахтан булған ҡыҙыма, уның ирем тарафынан ҡыҙ итеп алынмауына һылтанып, бындай пенсия билдәләүҙән баш тартты. Был законға ярашлымы?**

-Ҡараусыһыҙ ҡалыу буйынса пенсияға вафат булыусының хеҙмәткә яраҡһыҙ бөтөн ғаилә ағзалары ла, шул иҫәптән үгәй балалары ла дәғүә итә ала. Был хаҡта 173-сө һанлы "РФ Хеҙмәт пенсияһы тураһында"ғы Федераль законның 9-сы статьяһының 2-се һәм 9-сы пункттарында билдәләнгән. Бының өсөн баланың ирегеҙ вафат булғанға тиклем уның тәрбиәһендә һәм ҡарауында булыуын иҫбат итергә кәрәк. Был фактты дәлилләү өсөн ғаилә ағзаларының бөтөн килемдәре күрһәтелгән белешмәне, шулай уҡ урындағы үҙидаралыҡ ойошмаһынан йәки торлаҡ (жилищный фонд) фонды белешмәләрен дә ҡулланырға була. Шулай ҙа иң эффектлы һәм ышаныслы дәлил - суд ҡарары. Урындағы Пенсия фондында һеҙҙең мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙән баш тартһалар, республика Пенсия фондына, прокуратураға йәки судҡа мөрәжәғәт итеү үҙ файҙаһын бирәсәк.

## АЛИМЕНТТАН БАШ ТАРТАМ

**Минең улым һәм киленем ата-әсәлек хоҡуҡынан мәхрүм ителгән. Ейәнсәрем минең опекунлыҡта. Улым уға алимент түләй. Ләкин миңә ул аҡсалар кәрәкмәй, шуға күрә алименттан баш тарта аламмы?**

- Алименттан баш тартыу законға яраҡһыҙ. Улай эшләгәндә, һеҙ ейәнсәрегеҙҙең хоҡуҡтарын боҙаһығыҙ, сөнки аҡса һеҙгә түгел, ә уға тәғәйенләнгән. Әгәр ҙә матди яҡтан тәьмин ителгәнһегеҙ икән, банкта иҫәп асып, алиментты ейәнсәрегеҙ исеменә, шунда һаҡлауға һалып бара алаһығыҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аҙ ҡанлылыҡ

❖ Таҙа итеп йыуылған алманы шулай уҡ таҙа итеп йыуылған сөй менән тишеп сығырға кәрәк. Кистән эшләгәҙ һәм алманы иртән ашағыҙ. Был рәүешле анемияны 2-3 ай дауаларға кәрәк. Бындай алма хәлһеҙлектән йонсоғандарға ла файҙалы.

### Йөрәк ритмының боҙолоуы

❖ Мелиссаны сәй урынына эсергә була.

❖ Йөрәк ритмының боҙолоуына күп итеп һарымһаҡ ашау килтереүе ихтимал. Шулай уҡ газлы эсемлектәр ҙә зыянлы, улар эсәктә газ барлыҡҡа килтерә һәм һөҙөмтәлә диафрагма күтәрелә һәм йөрәк механик ҡыҫыуға ала. Был аритмияға ғына түгел, тахикардияға - пульс йышайыуға ла килтерә. Ауырыған саҡта дингеҙ кәбеҫтәһе һәм составында йод булған башҡа ризыҡтарҙы, мәсәлән, хөрмә ашамағыҙ.

### Атеросклероз

❖ Атеросклерозды дауалау һәм уны булдырмау өсөн 1 ҡалаҡ кипкән юл япрағы үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут төнәтегеҙ һәм бер сәғәт эсендә бәләкәй йотомдар менән эсеп бөтөрөгәҙ.

❖ Тәйөрсәләр ҡан тамырҙарын тулыһынса тиерлек ҡаплап бөткәндә лә склерозды булдырмау мөмкин. Бының өсөн махсус туҡланыу кәрәк. Баҡса елеген һәло бутҡаһына ҡушып ашау ҡан тамырҙары шешеүен туҡтатып ҡына ҡалмай, вена, артериялар һәм капиллярҙар муртлығынан һаҡлай, ҡан тамырҙарын тәйөрсәләренән таҙарта. Баҡса елегендә элаген кислотаһы бар. Бағыр (форель) балығын бальзамик һеркәгә ҡушып ашағыҙ. Был осраҡта ҡан тамырҙарындағы май төйөрсәләре ирей һәм ийлап организмдан сығарылып бөтә.

❖ Әгәр ҙә кеше татлы ризыҡтар яратһа, әммә насар хәрәкәтләнһә, ҡан ҡуйыра һәм ҡан тамырҙарын эстән йөрәхәтләй башлай. Организм был бәләкәй генә йөрәхәтте шунда уҡ "ямап" ҡуя һәм был урындар тәйөрсәләргә әйләнә. Шуға ла бер стакан шәкәрле сәй эстегеҙ икән, йәйәү йөрөргә ваҡытығыҙ юҡ икән, бер нисә күнегеү эшләп алығыҙ. Йә булмаһа, шәкәрҙән бөтөнләй баш тартығыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӘКҮК БЕЙЕҮЕ

**"Кәкүк сәйе"ндә кәкүктең хәрәкәттәренә оҡшатып бейеү ҙә киң таралған булған. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш районларындағы һәр ауылда был бейеүҙен үҙ бейеүселәре булған.**

Ирҙәр башҡарыуындағы "Кәкүк" бейеүе лә фольклорсылар тарафынан ентекләп яҙып алынған. Бейеүҙе башҡарғанда бер нисә ҡурайсы "Кәкүк" көйөн уйнап торған. Бейеү ике өлөштән тора. Ҡыҫҡа көйгә бейей башлап, бейеүсе ҡулдарын ҡанаттар кеүек йәйеп, түңәрәк буйлап әйләнә. Һуңынан ул ҡурайсы эргәһендә туҡтап, алға ҡарай эйелеп, өс тапҡыр: "Кә-күк! Кә-күк! Кә-күк!" тип ҡысҡыра. Был мәлдә ул башын һиҫкен хәрәкәттәр менән йә бер яҡҡа, йә икенсе яҡҡа бора. Елән итәген артҡа ҡоштоң ҡойроғо рәүешендә ҡуйып, уңға-һулға ҡыҫҡа хәрәкәттәр яһаған. Оҙон көй мәлендә иһә бейеүсе ергә ултырып, илауҙы, ҡайғыны һүрәтләгән. Һуңынан тағы ла тиҙ көй башланған. Бейеүсе шунда уҡ иҫенә килеп, күңелле ҡиәфәт менән ҡулдарын йәйеп, түңәрәк буйлап бейеп киткән. Туҡтап, дәртле итеп тыпырлатып, елән итәген артҡа ташлап, тағы ла : "Кә-күк! Кә-күк! Кә-күк!" тип ҡысҡырған. Оҙон көйҙә тағы башын эйеп ҡайғырған.

Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланған. Бейеү аҙағында бейеүсе тауышын юғалтыуҙы һүрәтләгән. Иң аҙаҡтан ул: "Куку" тип ҡысҡырған һәм бейеү тамамланған.

"Кәкүк бейеүе"нең иң боронғо формаһы, Л. Нагаева фекеренсә, Әбйәлил һәм Баймаҡ районларында һаҡланған. Көйҙөң оҙон өлөшөндә бейеүсе ҡоштоң йомортҡа һалыуын күрһәтеп, кәкүк тураһында оҙон йыр йырлаған. Бейеү йырҙың бөтөн куплеттары бөткәнгә тиклем дауам иткән. 1966 йылда Әбйәлил районының Аҫҡар ауылында йәшәүсе З. Мирхәйҙәрова, М. Мирхәйҙәровтан яҙып алынған йыр түбәндәгесә яңғырай:

*Саҡырма ла кәкүк, әй ҡаршымда,*
*Саҡырһана ағас башында.*
*Уңлы ла ғына һуллы ҡашым тарта,*
*Ни булыр ҙа ғәзиз башыма?*
*Минең башҡайыма ниңә ултырҙың,*
*Бер-бер нәмә булырмы икән ни?*
*Юраусылар юрап шуны әйтте,*
*Ғүмерең зая-ҡайғылы үтәр, тип.*
*Иҫәпләнем кәкүк саҡырыуыңды,*
*Сак тултырҙым ҡырҡҡа-ҡырҡ бергә.*
*Ололарҙың әйтеүе буйынса,*
*Ҡырҡ бер ҙә үтмәй миңә үлергә.*
*Ике лә генә кәкүк тиң саҡыра,*
*Ҡыу ҡарағай башын шаңғыртып.*
*Азаматтар яуҙан ҡайтыр микән,*
*Киткән юлҡайҙарын яңыртып?*

"Кәкүк сәйе" уйындарҙа еңеүселәргә бүләктәр биреү менән тамамланған. Ҡалған ризыҡты иҫәплек, бәхет, мул уңыш теләп, ағас төбөндә ҡалдырғандар. Фольклорсылар фекеренсә, был кәкүктең рухын ризалатып, тотош ырыу-нәҫелгә бәрәкәт һорау менән бәйле булған.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# СӘСӘНЕН ҘУРЛАНЫ ҠЫПСАҠТАР



**Күптән түгел Бөрйән районыныың Әбделмәмбәт ауылында ошо ауылда тыуған билдәле сәсән, мәғрифәтсе Сабирйән Мөхәмәтзакир улы Мөхәмәтҡоловтың тыуыуына 125 йыл тулыу уңайынан, унын рухын ҡыуандырып, үҙҙәренең сәсән аманатына тоғро икәндәрен раҫлап, Әҙәбиәт йылы сиктәрендә бына тигән сара ойоштороп ебәрҙе ҡыпсаҡтар (Ҡыпсаҡ - Әбделмәмбәт ауылының халыҡса йөрөтөлмөшө).**

Сара Әбделмәмбәт мәктәбе биләмәһендә башланды - сәсән иҫтәлегенә таҡтаташ асылды. Уны асыу хоҡуғы арҙаҡлы яҡташыбыҙ Әхмәт Сөләймәнов менән район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәриповҡа бирелде. Әхмәт Мөхәмәтвәли улы сәсән хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеп, Сабирйән хәлфәнең ҡустыһы Хәкимйән бабайҙың һөйләп ҡалдырғандарының бер өлөшө менән дә уртаҡлашты.

-1990 йылда сәсән эҙҙәренән йөрөнөк. "Түңгәккә" тигән шиғыры яҙылған түңгәкте табып алдыҡ. Телевидениеға тапшырыу әҙерләнем. Сәсәндең ҡыҙы Зәкиә апай, Һарағынан Зөһрә апай Ғәлина Сабирйән сәсән хаҡында һөйләне, - тине ғалим яҡташыбыҙ.

Әйткәндәй, был шиғыр яҙылған түңгәкте Килдеғол мәктәбенең уҡытыусы-эҙәрмәне Мөнир Фәйзуллин табып ала һәм уны уҡыусылар менән кәртәләп ҡуялар. "Түңгәк хаҡында ишетеүселәр булһа ла, уны күргән-белгән кеше булмай сыҡты тәүҙә, - тип яҙған ҡыпсаҡтар сығарған "Сабирйән сәсән" тигән китаптағы хәтирәләрендә М. Фәйзуллин. - Шуға күрә урманды күп ҡыҙырырға тура килде. Бер көнө Ҡарағас йорттан Бертеш яланынан сығып килһәм, йылҡы көтөүсе һәм танылған һунарсы Хәбир ҡусты Исхаҡов осраны. Ул түңгәк, Мөнир ағай, мин күргән түңгәк түгел микән, әйҙә, ҡарайыҡ әле, ти. Икәүләп үҙәк буйлап тауға күтәреләбеҙ. Ҡуйы ағастар ышығында бына ҡайҙа ултыра икән беҙ эҙләгән ҡомартҡы! Түңгәкте ентекләп ҡарайбыҙ: сәсәндең ҡыҙы Зәкиә инәйҙең һөйләгәндәре менән тап килә - түңгәктең ҡояш төшмәгән яғында балта менән сабып тигеҙләнгән "китап" урыны бар. Өҫтәүенә, эргәнән генә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә арба юлы беленеп ята. 1930 йылда "Урал" колхозы ойошторолғас, Ҡыпсаҡ бригадаһының йәйләүе итеп Ҡарағас йорт урыны билдәләнә. Сабирйән сәсәндең ҡатыны Өмөлхаят тәүге һауынсыларҙың береһе - ер һелкетеп баҫып йөрөгән йәш ҡатын дәртләнеп бында эш башлай".

Утыҙынсы йылдарҙа золом ҡорбаны булған мәғрифәтсе-сәсәндең ижадын өйрәнәһе лә өйрәнәһе әле. Оҙаҡ йылдар буйына "халыҡ дошманының" ижадын өйрәнеү тыйылғанға күрә, сәсәндең байтаҡ күңел емештәре юҡҡа сығыуға ла дусар булғандыр.

Сабирйән Мөхәмәтҡолов 1890 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Ҡыпсаҡ ауылында хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы Мөхәмәтзакир ҙа билдәле генә сәсән булған. Сабирйән сәсән Әбйәлил районының Рауил ауылында, аҙаҡ Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһендә белем алған. Артабан мөғәллимлек эшен алып барған. Бөрйән районының байтаҡ ауылдарында белем усаҡтары асыуҙы ойошторошҡан. Ҡаҙаҡ далаларында ла мөғәллимлек эшен атҡарған. Ул рус, фарсы, ғәрәп телдәрен яҡшы белгән. Ул яҙып ҡына түгел, теге йәки был ваҡиғаға, кешегә ҡарата телдән дә шиғыр сығарып йөрөгән. Унын шиғырҙары халыҡ хәтерендә йәшәй.

Сәсән шәп бейеүсе һәм ҡурайсы ла, шаян кеше лә булған. Был турала сәсән ижадын байтаҡтан бирле өйрәнеүсе Мөнир Фәйзуллин бер хәтирә яҙып алған: "Ҡырҙан, уҡыуҙанмы-ниҙән ҡайтып килешләй, Сабирйән Мораҡҡа һуғыла. Йәйәүләп ҡайтып килә. Төҫкә һары кеше бит инде, фатир һорап берәүҙәргә инә. Урыҫса һорай. Кисенә өй хужалары ҡунаҡ йыя. Был һаман урыҫса һөйләшә, ти. Халыҡ бейей, йырлай, ҡурай уйнай. Сабирйәнде лә бейергә төшөргәндәр. Ул ябай ғына итеп бер бейеү бейегән. Был арыу уҡ баҫа бит, тиешкәндәр. Унан икенсе ҡунаҡ бейегән дә, тағы Сабирйәнде бейергә саҡырған. Быныһында арыуыраҡ баҫып бейей бит был. Өсөнсө ҡунаҡ бейергә саҡырғас, тағы ла һәйбәтерәк итеп бейей. Шулай табындың төп ҡунағы булып киткән ул. Ҡурайсы тын торған ваҡытта ҡурайҙы ҡулына алып, тотҡолап ҡарап торған була. Әйләндергеләп ҡарай, тикшерә. Бахыр, урыҫ егете, бынан нисек көй сыға икән, тип аптырайҙыр инде, өргән була бит әле, тиешә ҡунаҡтар. Апаруҡ шулайтып ҡыялғас, аңғармаҫтан ғына шыңғыратып ҡурайҙа уйнай ҙа ебәрә. Кешеләр аптырашып, хайран ҡала. "Башҡорт бит һин былай булғас, оятҡа ҡалдырҙың. Әгәр насар һүҙ әйткән булһаҡ, ғәфү ит", - тип ғәфү үтенеп, ҡунаҡтың түрендә йөрөтөп, бер аҙналап һыйлап, хөрмәт күрһәтеп, яҡшы аттарын ектереп, Сабирйән сәсәнде Бөрйәнгә килтереп ҡуялар..."

Ҡыпсаҡҡа әлеге сараға килгән ҡунаҡтар мәктәп янындағы Шәжәрә музейын һәм мәктәп эсендәге тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарын ҡараны. Сабирйән сәсәндең ҡыҙы Зәкиәнең улы Рафаэль менән килене Һәҙиә Фәтхуллиндар оҙаҡ йылдар ситтә йәшәп, атай менә әсәй баҡыйлыҡҡа күскәс, нигеҙҙе һыуытмаҫ өсөн ауылға ҡайтып төпләнгәйне. Улар арҙаҡлы олатайҙары иҫтәлегенә йорттарында музей асҡандар. Ыҡсым ғына музейҙа байтаҡ экспонаттар йыйылған: урындыҡ, сәңгелдәк, ҡаралты, сәсәндең һәм сәсәнгә ҡағылышлы яҙмалар, унын күҙлеге һәм башҡа ҡомартҡылар. Байрамға килеүселәрҙе йорт хужалары һәм уларҙың балалары, туған-тыумасалары сәк-сәк, буҙа менән ҡаршы алды, ҡалала үҫкән ейәндәре тырышып-тырышып ҡарт олатайҙарының шиғырҙарын ятҡа һөйләп ҡыуандырҙы. Хужабикә мандолинаһын сиртеп ебәрҙе.

Байрамдың төп өлөшө ауылдың иң матур урындарының береһендә - Ҡараташ шишмәһе янында үтте. Сараға ыңғайлаусыларҙы сәсәндең ейәнсәре, Килдеғол ауылында фельдшер булып эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан Ғәлиә Исҡужина аяҡсы булып, буҙалы көрәгә менән ҡаршы алды. Эйе, арҙаҡлы ауылдаштарының хәтер кисәһенә төплө әҙерләнгән ҡыпсаҡтар - сәсән хаҡында 60 битлек китап та сығарғандар, буклет та өлгөрткәндәр, сәсәндең, ауылдың фотолары, шәжәрә ҡуйылған бихисап баннерҙар ҙа эшләткәндәр.

Сәғәҙәтдин мулла сәсән рухына аят бағышлағас, Сабирйән хәлфәнең Һауа апаһының ейәне Ришат Абдуллин киң күкрәк тауышы менән халыҡ йырын башлап ебәрҙе. Дәртләнеп, ашҡынып, рухланып йырланы ул. Унын моңо эргәләге тауҙарға ҡаҡлығып, ауыл өҫтөнә таралды. Район үҙәгендә йәшәп ятҡан Ришат хаҡында бер ауылдашы оло ғорурлыҡ менән: "Бүтән ерҙә йырлап та йөрөмәй, ауылға ҡайтһа ғына асылып, күңеле моңға тулышып, яҙғы ташҡындай ағыла ошо Ришаттың", - тип ҡуйҙы.

- Бер яҡтан уйлаһаң, 125 йыл күп түгел, икенсе яҡтан ҡараһаң, быуаттан ашыу ваҡыт. Сәсәндең ижад ҡомарының быуындан-быуынға күсә килеүе ҡыуаныслы. Ауыл халҡының, мәктәптең, хакимиәттең бер төптән булып эшләүҙәре, йәшәүҙәре, ғөмүмән, бындағы халыҡтың берҙәмлеге һоҡландыра. Бындай саралар йәш быуын өсөн кәрәк. Улар үҙҙәренең арҙаҡлы яҡташтарын белеп үҫергә тейеш, - тине район хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы сарала сығыш яһап.

- Атайымдың сәсән менән бик ауыр юлды бергә үтеүе хаҡында ил ағаһы йәшенә еткәс кенә белеүем үкенеслерәк. Улар, сәйәси золом ҡорбандары, Беломорканал төҙөлөшөндә бергә булғандар. Унда, хеҙмәт шарттарына ярашлы, бер йыл ике йылға һанала. Шул рәүешле тиҙерәк ҡайтырға ашҡынған Сабирйән сәсән срогын тултыра алмай. Билбыуарҙан һыу кисеп йөрөп, ул үпкә ауырыуына дусар була һәм сит ерҙәрҙә ятып ҡала. Минең атайыма тыуған яҡтарына ҡайтыу бәхете тейә, тик ул да үпкә сиренән вафат булды, - тип ҡайһы бер күңел хәтирәләре менән бүлеште профессор, академик Әхмәт Мөхәмәтвәли улы.

Уҡытыусы Миңнур Ҡасимованың һәр яҡтан уйлап яҙылған сценарийы байрамды бербөтөн һәм мәғәнәле итте. Ғөмүмән, һәр кем үҙ тапҡырында тырышҡан, ауылы берҙең - ҡәүеме бер, тигән мәҡәлде девиз иткән. Сараның матди яғын сәсәндең вариҫтары күтәрешкән, аҡсалата ярҙам күрһәтеүселәр булған, ә Ғәлиә Исҡужина менән Гөлгөнә Ырыҫҡолова сәсән рухына бағышлап ҡорбан салдырған.

Сәсәндең "Ҡартлыҡ" тигән шиғырында шундай юлдар бар:

*Ҡырҡҡа еткәс ҡалдырған*
*бер һүрәткенәм,*
*Ҡалмаған шул һис бер рәткенәм.*
*Дуҫ-иштәрем бергә төшкәс,*
*төштөм мин дә,*
*Сыҙамай шул боронғо йәш йөрәккенәм.*
*Ҙур иҫтәлек булыр, тинем балаларыма,*
*Бер көндәре алып ҡарарҙар алдарына.*
*Рәсемгә төштөм шундай ниәт менән,*
*Ҡарамайса сикәләге салдарыма.*
*Үлем тигән тағы бер нәмәһе бар,*
*Үҙенә күрә, унын ҙур кәмәһе бар.*
*Шул кәмәгә ултыртып алып йөрөп,*
*Ниндәй ергә батырһа ла самаһы бар.*

Ысынлап та, сәсәндең ошо фоторәсеме байрамды сәхнә түренән "күҙәтте". Бөгөн ул портрет балаларына, ейәндәренә ҡиммәтле ҡомартҡы. Йәнә шиғырҙың артабанғы юлдары уйландыра: "Ниндәй ергә батырһа ла самаһы бар", - тип сәсән үҙенең килер яҙмышын, сит ерҙәрҙә ятып ҡалырын бер ни тиклем төҫмөрләгәндәй. Һағыш сағылып ҡала был юлдарҙа.

Ҡараташ буйҙарын яңғыратҡан был байрам, һис һүҙһеҙ, сәсән рухын ҡыуандырғандыр. Бөлөр илдең балаһы бер-береһен бахыр, тир; булыр илдең балаһы бер-береһен батыр, тир, тигәндәй, үҙ ауылдаштарын ҙурлаған ҡыпсаҡтарға афариндан башҡа һүҙ юҡ. Теләк беләккә көс, йөрәккә дәрт биргән, кәрәк тирәк йыҡтырған, берҙәмлек күңел һәм рух байрамы булдырған.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**

*✓ Ҡайһы бер улыс башҡорттары ҡасаҡтарҙы ҡайтарыуға ҡырҡа ҡаршы сыға, сөнки ҡасаҡтар башҡорт ерҙәрендә йәшәгән өсөн урындағы халыҡҡа бурыслы була.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**XVIII быуаттың башында, 1704 йылда ҡупҡан башҡорт ихтилалы тамамланғандан һуң, төбәктә үҙенсәлекле сәйәси хәл барлыҡҡа килә. Башҡорттар 1711 йылдан 1722 йылға тиклем Рәсәй подданныйлығынан сығып, тулы үҙаллылыҡ яулайҙар. Яһаҡ түләмәүҙән, Үҙәккә бойһонмауҙан тыш, уларҙың хатта бөтә институттары, ханы (башлығы) булған тулы мәғәнәләге дәүләт берләшмәһе, йә ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар менән бергә союз төҙөү мөмкинлеге лә була. Ләкин улар ҡабаттан Рәсәй ҡанаты аҫтына ҡайтыуҙы һайлай. Уларҙы быға нимә этәрә һуң, ниндәй сәбәптәр үҙаллы дәүләт төҙөүгә ҡамасаулай? Тарих фәндәре докторы Булат Әхмәр улы АҘНАБАЕВтың ошо темаға арналған хеҙмәтенең дауамын тәҡдим итәбеҙ.**

# УН ИКЕ ЙЫЛЛЫҠ ҮҘАЛЛЫЛЫҠ



XVIII быуаттың 1720-1730 йылдарында көньяҡ-көнсығышта урынлашҡан көстәр башҡорттарға әллә ни етди проблемалар тыуҙырмай. Мәҫәлән, 1733 йылда Уртансы Жузе Семек хандың 10 меңдән торған ғәскәре менән Өфө провинцияһының Себер юлына һөжүмен Таймаҫ батыр етәкселегендәге башҡорттар кире ҡаға. Ырымбур юлы буйлап төҙөлгән ҡәлғәләргә тиклем башҡорттар үҙ ерҙәренең хәүефһеҙлеген тик үҙҙәре генә тәьмин итә. 1731-1732 йылдарҙа Һамар, Кинель, Ыҡ, Садеф һәм Сәрмәсән йылғалары буйлап һаҡ ҡуйыу мәсьәләһе буйынса йыйындар саҡырыла. Шулай итеп, XVIII быуаттың 20-30-сы йылдарында башҡорттар бөйөк дәүләттең яҡлауына мохтаж булмайҙар.

Сенат материалдарынан сығып һүҙ йөрөткәндә, башҡорттар Рәсәй подданныйлығын тергеҙеү тураһындағы һорауҙы үҙҙәренең биләмә ерҙәренә килеп төпләнгән ҡасаҡ һәм күскенселәрҙән азат итеү мәсьәләһе менән бәйләгән. Подданныйлыҡ тураһында мәсьәләнең ҡалҡып сығыуы ниндәйҙер Бекбав Чимкиндың батшаға "Өфө провинцияһына ҡасҡан яһаҡ түләүселәрҙе кире Ҡаҙан өйәҙенә ҡайтарыуҙы" һорап мөрәжәғәт итеүенә бәйле. Сенат тикшереүе барышында, Ҡаҙан өйәҙенән яһаҡтың күп булыуынан ҡасып, Башҡортостанға килеүсе күскенселәрҙең Өфө провинцияһы коменданты Д. Бахметьевҡа үҙҙәрен яңы йәшәү урыны буйынса яһаҡ түләтеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итеүе асыҡлана. Ләкин комендант был үтенесте кире ҡаға. Чимкиндың мөрәжәғәте менән бер рәттән, Сенатта башҡорттарҙың Азов походында башҡорт отряды менән етәкселек иткән Ҡаҙан дворяны Д.И. Молостовҡа яҙған хатты ла тикшерәләр. Был хатта башҡорттар Өфө провинцияһына күсеп килеүсе ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡтарҙан яһаҡ йыйыу өсөн махсус кеше ебәреүҙәрен һорайҙар.

Ике үтенестә лә Өфө провинцияһы яһаҡ түләүселәре тураһында һүҙ барғанға күрә, уларҙы берләштерәләр. Тикшереү барышында, 1704-1711 йылдарҙағы ихтилалдан һуң башҡорттарҙың Рәсәй подданныйлығы ҡабул итеүенең иҫбатланмағаны асыҡлана. Шулай итеп, ҡаҙна эштәре буйынса башланған эшмәкәрлек башҡорттарҙы Рәсәй подданныйлығына ҡайтарыусы сәйәси сараға әйләнә. Ләкин башҡорттарҙың Д.И. Молостовҡа яҙған хатында ла, күсенеүселәр исеменән генә түгел, ә башҡорттар исеменән дә батшаға мөрәжәғәт итеүсе Бекбав Симкиндың үтенесендә лә башҡорттарҙың Рәсәй подданныйлығын алырға әҙер булыуҙары тураһында һүҙ булмай. Шуға күрә Сенат әлеге һорауҙы яҡшылап өйрәнеү кәрәклеген билдәләп, резолюция яҙа һәм 1719 йылдың 17 июлендә башҡорттарға "башҡорттар элеккесә батша подданныйлығы аҫтында һәм ошо сәбәпле әлегәсә күрһәтелгән ҡаршылыҡтарҙың башҡаса булмаясағына батшаны ышандырырҙар тигән өмөттә", тигән яҙыу менән батша грамотаһын ебәреү тураһында ҡарар сығарыла.

Артабанғы тикшереүҙәр башҡорттарҙың күскенселәргә ҡарата дөйөм фекере юҡлығын күрһәтә. Күпселек башҡорттар уларҙы ҡыуыу яҡлы булһа, ҡайһы берәүҙәр, киреһенсә, ҡасҡынсыларҙы ҡалдырыуҙы талап итә. Башҡорттарҙың был һорауға ҡарата бер төрлө фекере булмауы крайҙа урындағы халыҡ һәм власть араһында ышанмаусылыҡ тыуҙыра. Һөҙөмтәлә башҡорттарға батша грамоталарын тапшырыу тантанаһы өҙөлә. Был акция башҡорттарҙың Рәсәй подданыйлығын тергеҙеү процесы башланыуын кәүҙәләндерергә тейеш була, ләкин яҡтар грамотаның тапшырылыу урыны тураһында килешә алмай. Башҡорттар был ваҡиғаның Ағиҙел ярындағы Чесноковка тауы эргәһендә булыуын теләһә, грамотаны тапшырырға тейешле полковник И.Г. Головкин документты башҡорттарға тик Өфөлә генә бирәсәген белдерә.

Грамоталар тик ике ай үткәс, 1720 йылдың 13 сентябрендә, бөтә башҡорт өйәҙҙәре исеменән килгән вәкилдәргә тапшырыла. Беренсе грамотала башҡорттарҙың Рәсәй подданныйлығына ҡайтыуҙарына ҡарата мөрәжәғәтнамә, ә икенсеһендә бөтә ҡасаҡ һәм күскенселәрҙе кире ҡайтарыу мөһимлеге тураһында әйтелә. Ләкин башҡорттар уларҙы кире ҡайтарыуҙа үҙ талаптарын ҡуя - крайға 1678 йылдан һуң килеп төпләнеүселәрҙе генә ҡайтарырға ризалашалар. Шулай ҙа башҡорттарҙың подданныйлығын тергеҙеү процесы тулыһынса тик 1722 йылдың 22 июнендә генә тамамлана. Был көндә башҡорттарҙың 8 вәкиленә Санкт-Петербургта хоҡуҡ граматоһы тапшырыла.

Ни өсөн башҡорттар Өфө провинцияһынан ҡасаҡтарҙы ҡыуыу тураһында һорауҙы ҡуҙғатҡан? 1720 йылдағы һөйләшеүҙәр барышында И.Г. Головкин асыҡлауынса, башҡорттар ҡасаҡтарҙың аҫаба халыҡ ерҙәрен, мәкерле ысулдар менән губернаторҙан указ алып, үҙҙәренеке тип атауҙарын һәм шул ерҙәрҙә ауылдар булып ултырыуҙарына асыулана. Шул уҡ ваҡытта, әйтеп үтелгәнсә, ҡайһы бер улыс башҡорттары ҡасаҡтарҙы ҡайтарыуға ҡырҡа ҡаршы сыға, сөнки ҡасаҡтар башҡорт ерҙәрендә йәшәгән өсөн урындағы халыҡҡа бурыслы була. Башҡорттар уларҙы тейешле бурыстарын ҡайтарғас ҡына ебәрергә риза булыуҙары тураһында белдерә. Ҡасаҡтар мәсьәләһе буйынса башҡорттар араһында барған ҡапма-ҡаршылыҡ тураһында Ҡаҙан полкы драгундары ҡулдарына төшөргән Ҡаҙан һәм Уса (Осинская дорога) юлы башҡорттарының Нуғай һәм Себер юлы башҡорттарына яҙған хаты аша белеп була. Хаттың йөкмәткеһе бик теүәл тәржемә ителмәһә лә, уның эстәлеге был мәсьәләнең айышын аңларға ярҙам итә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, әлеге конфликт бер ниндәй рәсми хаттарҙа ла, хөкүмәттең ышанıслы кешеләренең яҙыуҙарында ла сағылмаған.

Үҙ-ара ҡапма-ҡаршылыҡтар булһа ла, башҡорттар башҡалар алдында үҙҙәрен берҙәм һәм ойошҡан халыҡ итеп күрһәтергә тырышҡан. Батшаға йүнәлтелгән мөрәжәғәттәрҙә лә, Мәскәүгә ебәрелгән делегациялар ҙа башҡорттар "бөтә дүрт юл" ("всех четырех дорог") исеменән сығыш яһауҙарын билдәләгән. Тик бихисап баш күтәреүҙәрҙәге ҡайһы бер эпизодтар ғына Ҡаҙан һәм Уса юлдары менән Нуғай һәм Себер юлдары башҡорттары араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтар булыуын күрһәтә.

Ихтилалдарға күтәрелгәндә башҡорттарҙың берҙәм башлығы юҡ, сөнки быны географик йәһәттән тормошҡа ашырыу мөмкин булмаған. Нуғай һәм Ҡаҙан юлы башҡорттары менән ҡалмыҡтар араһында сик асыҡ булған һәм ҡалмыҡтар төрлө ысулдар менән башҡорттарҙы үҙ яҡтарына ылыҡтырырға тырышҡан. Мәҫәлән, 1663 йылда ҡалмыҡтарҙың улысында булып киткән Әстерхан баяры Петр Шубников Мәскәүгә ҡалмыҡ ханы Әйүкәнең 1500 башҡорт ихатаһын үҙенең улыстарына күсергә өндәүе тураһында хәбәр иткән. Ошо уҡ йылдың ҡышында Нуғай юлы башҡорттарынан 8000 кеше Дайчан улысына күсеп китә. Ноғай юлының абруйлы тарханы Ишмөхәмәт Дәүләтбаев Әйүкә хандың власын таный һәм унан Яйыҡ буйында йәйләү өсөн ерҙәр ала. Тайша Дайчинға шулай уҡ Ыҡ (Ицкая волость) улысы башҡорто Ҡарабаш Утәүев та бойһона һәм үҙенең бөтә кешеләре һәм малдары менән уның менән бергә Волга буйында йәйләй.

**Булат АҘНАБАЕВ, тарих фәндәре докторы.**

**(Дауамы. Башы 30-сы һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Йылҡыларҙан ҡала башҡорт хужалыҡтарында һыйыр малы икенсе урында тора. Көтөүҙең продуктлылығын күтәреүгә айырым иғтибар бирелә. Әлеге ваҡытта күпселек колхоздарҙа һаман да урындағы һыйырҙарҙың тоҡомо өҫтөнлөк итһә, үгеҙҙәр, ҡайһы бер ташламаларҙан тыш, бестужев (**һүрәт**), симменталь, шартгорн тоҡомона ҡарай. Бәғзе колхоздарҙа эре малдарҙың тоҡомо яҡшыртылып, һыйырҙарҙың иҫәп кенәгәһе алып барыла, быҙауҙар тыуыу менән келәймәләнә. Һыйырҙарҙың тоҡомо колхоз фермаларында ғына түгел, районына ҡарап бер баштан өс башҡа тиклем һыйыр тотҡан шәхси хужалыҡтарҙа ла яҡшыртыла.



Эре мал көтөү ваҡытында икегә бүленә: һауын һыйырҙар һәм йәш малдар. Һауын ваҡытында ғына әсәләренә яҡын ебәрелгән быҙауҙар ҙа айырым көтөлә. Һыйырҙарҙы көнөнә өс тапҡыр һауалар.



Ҡышҡыһын эре малдар арандарҙа тотола (**һүрәттәр**), улар өсөн силос соҡорҙары эшләнә. Таналар дүрт йәшендә ҡасырыла.





Ҡайһы бер һөт фермалары һөттө май заводтарына тапшыра, ә айыртылған һөттө малдарға эсерәләр. Күпселек фермалар май заводтарына һөт өҫтөн тапшыра. Сепараттар фермаларҙа ғына түгел, һәр колхозсының өйөндә тигәндәй бар.

Башҡорттарҙа һарыҡ һаны һыйырҙар һанын яҡынса ике тапҡырға артып китә. Колхоздарҙағы һарыҡ һаны менән колхозсыларҙың шәхси хужалығындағы һарыҡтар һаны бер төрлө түгел.

Әлеге ваҡытта урындағы ғына һарыҡтарҙы үрсеткән бер генә коллектив хужалыҡ та юҡ, барлыҡ ерҙә нәҙек йөнлө һарыҡтарҙы үрсетеү күҙәтелә. Колхоздарҙың бер өлөшөндә (Белорет, Әбйәлил, Баймаҡ, Күгәрсен, Маҡар районодарында һ.б.) һарыҡтарҙың нисбәте 50-гә 50. Бер колхозда (Әбйәлил районы) урындағы, нәҙек йөнлө ҡатыш һарыҡтар булһа, икенселәрендә бары тик метистар, өсөнсөләрендә (Йомағужа, Баймаҡ һ.б. райондар) - нәҙек йөнлөләр һәм метистар. Ҡаҙаҡтарҙан алынған осалары майлы, ҡуй һарыҡтарҙы миңә бары тик Урал аръяғының бер генә колхозында (Әбйәлил районы) күрергә тура килде.

Тәкәләр араһында мериностар (урындағы меринос, себер мериносы, прекос) өҫтөнлөк итә, һирәк кенә кавказ рамбульеларын осратырға мөмкин.

Урындағы һарыҡтар тоҡомо нәҙек йөнлөләрҙән айырым тотола, нәҙек йөнлөләр йылы биналарҙа, яҡшы аҙыҡ ашатып аҫырала.

Һарыҡтар июндә ҡасырыла, йылына бер тапҡыр бәрәнләйҙәр. Тәкәләр 2-3 айлыҡ ваҡыттарында бестерелә. Урындағы һарыҡтарҙың ла, метистарҙың да йылына ике тапҡыр (яҙын һәм көҙөн), саф тоҡомлоларҙы йылына бер тапҡыр - яҙын ғына ҡырҡалар.

***✓ Халыҡҡа инде күптән күңел төшөнкөлөгөнән, шырлыҡ араһына алып китеп барған тар һуҡмаҡтан ситкә сығып, яңы мөмкинлектәр асылған офоҡҡа табан илтеүсе оло юлға төшөргә ваҡыт.***



**Рус яҙыусыһы, философ Авессалом Подводный: "Үткәндәр менән бәйләнешегеҙҙе тойоғоҙ һәм һеҙ уға таяна аласаҡһығыҙ", - тигән. Психология, астрология буйынса китаптар ижад итеүсе, төрлө имселәр, халыҡ дауаһы менән шөғөлләнеүселәр менән тығыҙ аралашҡан яҙыусы таяныс булырҙай үткәндәр тураһында әйткәндә, моғайын, быуындар араһындағы бәйләнеште күҙ уңында тотҡандыр. Башҡорт халҡының яҙмышы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, быуындар араһындағы бәйләнеш өҙөлмәгән, йәштәр ололар һүҙен һүҙ итеп, уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалып, кәңәш-төңәш итеп йәшәгән. Әммә был күркәм сифатыбыҙ заман шауҡымы менән онотола барған кеүек. Йыш ҡына йәштәр ололарҙы замандан артта ҡалыусылар рәтенә ҡуя, бөгөн донъяла барған хәлдәрҙе бөтөнләй аңламай, тип иҫәпләй. Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылында йәшәгән, 34 йыл ғүмерен мәктәптә биология фәнен уҡытыуға бағышлаған Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА менән нәҡ шундай аңлашылмаусанлыҡтар арҡаһында юғалып ҡалған белем, рух көсө тураһында әңгәмәләштек.**

### Килешмәҫкә килдем донъяға…

Уй-фекерҙәрем нишләптер бик һирәк осраҡта ғына халыҡ фекере, йәмғиәт ҡарашы менән тап килеүсән. Ахыр сиктә, бөтәһе лә яңылышып, үҙем генә дөрөҫ уйлап йөрөй алмайым бит, тип, үҙемде тәбиғәттең бер яңылышы итеп һанай башланым. Әммә үҙемдә икеләнгән осраҡтарҙа һәр ваҡыт өләсәйемдең кәңәшен иҫемә төшөрөп, күңелемә тыңлап ҡараһам, унда ниндәйҙер ризаһыҙлыҡ булыуын тоям. Кемдәрҙер менән килешә алмайым, ниҙер эстән өйкәп тик тора һымаҡ. Өҫтәүенә, йәш саҡта башкөллө эшкә сумып, ғаилә мәшәҡәттәре менән халыҡ араһында һүҙ һөйләп йөрөргә артыҡ ваҡыт та булманы. Әммә ил булғас, унда барған үҙгәрештәр, төрлө яңылыҡтар ишетелеп тора, эстән генә суверенитеттан ситләшеүебеҙгә, ер мәсьәләһендәге ҡарарҙарҙың дөрөҫлөгөнә шикләнеп, борсоулы уйҙар менән йөрөйөм. Республикала муниципаль ерҙәрҙе генә ҡалдырып, ҡалғанын Рәсәй дәүләте милкенә күсергәндәренә аптырауымдың сиге булманы, ауылдаштарға башта уйлашайыҡ, тип тә өндәшеп ҡараным. Ләкин ниндәй генә мәсьәлә килеп тыуғанда ла, мәктәп даирәһендә генә лә түгел, мине һәр ваҡыт: "Тыныслыҡты боҙорға итәһеңме? Һуғыш теләйһеңме әллә?" - тигән һорау менән шымыҙып килделәр. Тыныс йәшәү өҫтән төшөрөлгәндә үтәүҙән генә ғибәрәт, тип хаталанманыҡмы икән?

Йомағужа һыуһаҡлағысын төҙөргә ниәтләүҙәрен ишеткәс тә уға ҡаршы халыҡтан ҡултамғалар йыйҙыҡ. "Бөтөн ғалимдар ризалыҡ биреп, ҡултамғаларын ҡуйып бөткән, һин яңғыҙың ҡаршы йөрөйһең һаман", - тип, махсус рәүештә килеп, был эште туктатырға ҡуштылар. Ошо һыуһаҡлағысты төҙөргә ризалашып, ата-бабаларыбыҙҙың бер аманатын боҙҙоҡ, тип һанайым. Беҙгә бит улар риүәйәт аша, Ағиҙелгә тейһәң, уның һыуы ҡороп бөтәсәк, тип әйтеп ҡалдырған. Бөгөн Йомағужа һыуһаҡлағысы эше яйға һалынғас, йылғабыҙ йылдан-йыл һайыға, бысрана бара. Сөнки уны тулыландырыусы бәләкәй йылғалар, шишмәләр күпләп ҡороно. Бала саҡта Ғәлиәкбәрҙән 50 километр тирәһе алыҫлыҡтағы ауылға йөрөп уҡыныҡ, һәр 10 саҡрым һайын саф шишмәләр ағып ята торғайны. Һыуында йыуынып, икмәгебеҙҙе тылып ашап, һыуһынды ҡандырып йөрөргә ғәҙәтләнгәйнек. Ул шишмәләр тәүҙә һаҙлыҡҡа әйләнеп, хәҙер бөтөнләй ҡороп бөттө. Имәнйортта бер шишмә ҡалған, уның һыуы ла әсерғә яраҡһыҙ. Йомағужа һыуһаҡлағысын тәҙөгәс тә Ағиҙел ҡоромаһы ла инде, тиһәләр ҙә, Өфөлә теплоходтар туктап ҡала бит хәҙер. Хәлдең үтә мөшкөлләнеүенән ямғырҙар ғына бер аҙ ҡотҡарып тора ла баһа.

Һыуһаҡлағыстың тағы бер эҙемтәһе - Ағиҙелдә һыу инеүселәр тире ауырыуҙары йоҡтора башланы. Ә заманында беҙ ул һыуҙы ҡайнатмайынса эстек. Бөгөн Ағиҙелгә һыу инергә барғанда ла төшөргә ҡыймайһың, элек уртаһына тиклем төшһәң дә, ялтышыр, ә башҡорт бер ҡасан да тыуған ерен ташлап китеп өйрәнмәгән бит. Бер ерҙә лә беҙҙе ҡолас йәйеп ҡаршыламаҫтар, муҡсабыҙҙы тотоп, донъя буйлап сығып китербеҙме икән?..

### Оптимизм алдауға һатылған

Ҡалала йәшәй башлап, ялтыр бәҙрәфенә ултырҙымы, кеше үҙен мәҙәни тип иҫәпләй башлай. Юғары мәҙәни кешеләр күбеһенсә ауылда йәшәй, минеңсә.

ролен үтәй башланы. Халыҡтың өмөтөн өҙөү, тормошон маҡсатһыҙ итеү, тишек кәмәгә ултыртыуҙан килеп тыуҙы был ситуация. Беҙҙең халыҡтың оптимистик рухын алдыҡ "урланы".

Аллаға шөкөр, бөгөн бар эште "шешә" өсөн башҡарыу, мәжлестәрҙә өҫтәл түренә тәү сиратта эске ҡуйыу йолаһы яйлап моданан сыға бара. Тулыһынса уның йоғонтоһонан арынып бөтмәһәк тә, халыҡ аңына килә, уйлана, донъяһын ҡулына ала башланы. Бигерәк тә йәштәрҙең айыҡ туйҙар, мәжлестәр, байрам кисәләре үткәреүен күреү ҡыуаныслы. Аңлы, милләтенең киләсәген, бөтөн илдең мәнфәғәтен ҡайғырта алырлыҡ алдынғы ҡарашлы, белемле йәштәребеҙ булыуы уҡ алдағы көндәргә яҡты өмөт менән ҡарарға сәбәп. Халыҡҡа инде күптән күңел төшөнкөлөгөнән, шырлыҡ араһына алып китеп барған тар һуҡмаҡтан ситкә сығып, яңы мөмкинлектәр асылған офоҡҡа табан илтеүсе оло юлға төшөргә ваҡыт.

сөнки улар кәртәләге эштәрҙе башҡарғанда, мин гел өләсәйем эргәһендә өй мәшәҡәттәре менән булыштым. Балалыҡ менән мин уны наҙанға һанап, ҡайһы ваҡытта иғтибарлап тыңламағанмын, ә ул "Ғәлиә" мәҙрәсәһе тураһында һөйләп ултыра торғайны. Ул мәҙрәсәнең бөгөнгө юғары уҡыу йортона бәрәбәр булыуын кем белһен...

Совет власы урынлашҡас, ҡатын-ҡыҙҙы эшкә ҡыуғандар ҙа, балалар үҙ мәйелендә үҫкән. Ә элек ата-әсәләре донъя көткән хәлдә лә балалар өләсәй ҡарамаһында булған. Шаярған һәм илаған баланы тәртиптә тотам тиһәң, мәкәле, әкиәте, уйындары менән әүрәтергә кәрәк. Беҙҙе кескеһен йоҡларға ҡайтарыр өсөн урамға сыбыҡ тотоп сыҡмай торғайнылар, билдәле бер ваҡытта өләсәйем әкиәт һөйләй, тип, ишетмәй тороп ҡалмаҫ өсөн йүгереп ҡайтабыҙ. Шуныһы ҡыҙғаныс, ул әкиәттәр иҫтә бик һаҡланып ҡалмаған, хәҙерге әкиәт китаптарында ла осратып уҡығаным юҡ. Кемдәрҙең өлә-

# АУЫРЛЫҠТАРҒА

## ҡатын-ҡыҙға



Һуғыш мәләнә тура килеп, белемдәре лә булмаған, әммә тормош тәжрибәһе бай, аҡыллы, ябай кешеләр күп ине беҙҙә лә. Ауылдашым Шәмсениса Ишбулатова ғына ла телгә бай, үҙенә күрә фәйләсуф кеше була торғайны. Донъя йөгөн яңғыҙы тартты, биш балаһын бер үҙе тәрбиәләне, әммә зарланманы. Кемдер трагедия итеп ҡабул иткән ваҡиғаның да оптимистик яғын таба, шиғыр юлдарына һала ине. Ә бөгөн бөтөн халыҡтың күңел төшөнкөлөгө бер туктауһыҙ алдау, өмөтләндереүҙән килә. Революция булғандан

### Тәрбиә ғаиләнән килә

Кешенең рух ныҡлығы, тәрбиәһе әсәнән килә, тигәндәре дөрөҫ. Бөгөнгө көндә ғаиләлә тәрбиә традициялары яҡшы һаҡланған, тип әйтеп булмай, ул ептәр өҙөлгән. Баланың әҙәбе, белеме, рухи тәрбиәһе тулыһынса ғаиләлә күргән мөнәсәбәттән тора. Бөгөн беҙ ололар һөйләгәндә һүҙгә ҡыҫылырға рөхсәт итәбеҙ, ашарға һалғанда иң тәүҙә балаларға һалабыҙ, атай кешене һансәһе юҡ, улар көнө буйы үҙ алдына ҡарауһыҙ йөрөнө. Һуңыраҡ балалар баҡсаһында ла уларға тейешле иғтибар бирелмәне, хатта тәрбиәсе бөтәһен йыйып, әкиәт һөйләһә лә, ул өләсәйҙеке кеүек тәьҫир итмәй. Шуға күрә ул балаларҙың рухи тәрбиәһе юҡ. Әлеге көндә мин үҙем өләсәй, ләкин ҡайһы бер ваҡытта ейәндәрем менән аралашҡанда үҙемдә өйрәк бәпкәләрен баҫып сығарған тауыҡ кеүек хис итеп китәм: бәпкәләр бер төрлө сипылдай, тауыҡ икенсе "сит телдә" нимәләр һөйләп маташа. Әкиәттәр һөйләй белмәйем, китаптан уҡыйым.

***Әммә ил булғас, унда барған үҙгәрештәр, төрлө яңылыҡтар ишетелеп тора, эстән генә суверенитеттан ситләшеүебеҙгә, ер мәсьәләһендәге ҡарарҙарҙың дөрөҫлөгөнә шикләнеп, борсоулы уйҙар менән йөрөйөм. Республикала муниципаль ерҙәрҙе генә ҡалдырып, ҡалғанын Рәсәй дәүләте милкенә күсергәндәренә аптырауымдың сиге булманы, ауылдаштарға башта уйлашайыҡ, тип тә өндәшеп ҡараным. Ләкин ниндәй генә мәсьәлә килеп тыуғанда ла, мәктәп даирәһендә генә лә түгел, мине һәр ваҡыт: "Тыныслыҡты боҙорға итәһеңме? Һуғыш теләйһеңме әллә?" - тигән һорау менән шымыҙып килделәр. Тыныс йәшәү өҫтән төшөрөлгәндә үтәүҙән генә ғибәрәт, тип хаталанманыҡмы икән?***

### Ниңә хеҙмәттән ситләштерәбеҙ?

Хәҙер балаларҙы хеҙмәткә күнектереп өйрәтеү проблемаһы барлыҡҡа килде. Өс ҡыҙын атайым бала саҡтан төрлө эшкә өйрәтеп үҫтерҙе. Июль айының урталарында уҡ бесән әҙерләргә тотонабыҙ. Атайым иртә менән бесән сабырға алып китә, сәғәт теүәл туғыҙынсы яртыла беребеҙҙе сәй ҡайнатырға төшөрөп ебәрә. Ярты сәғәт эсендә сәй эсеп, бер аҙ ял иткәс, теүәл унда салғыларҙы киренән ҡулға алабыҙ. Атайым математик булғас, ваҡытында ғына йөрөй, тәшкә ашҡа бер сәғәткә туктайбыҙ, киске алтыла тағы берҙе тамаҡ ялғайбыҙ, шунан ҡараңғы төшкәнсә бесән сабабыҙ. Киске ашты усаҡ яҡтыһында ашайбыҙ. Беҙҙең бесәнлек урман эсендә булһа ла төн йоҡларға ҡала торғайныҡ, яҡындағылар бөтәһе лә ҡайтышып бөтә. Төндә ҡыуыш яғына айыу килә, ул өҫтөндән үтеп китһә лә торғо килмәй, ҡаты йоҡлайбыҙ, ә атай-

рап, таштары күренеп ята торғайны. Йылға хәҙер әсе көндәрҙә хатта ҡортлай, был тәбиғәттең гармонияһын боҙоуҙан килеп сыға. Быуаттар буйына килешеп йәшәүен иҫкелек ҡалдығы һанап, үҙебеҙҙе цивилизация кешеләре иҫәпләп, тәбиғәт законына ҡаршы сығыуҙың эҙемтәһе булып, ошо тиклем ҙур бер республикала төп йылғаларҙың береһе ҡороп ҡуйһа, халыҡ нишләр, ҡайҙа барыр, тигән уй борсой. Бында күсеп килгән башҡа милләттәр ҡайҙа булһа ла барып урынлаалып кешеләрҙә яҡты киләсәк, еңел тормош көтә, тип бушлай эшләттеләр ҙә эшләттеләр. Быуындар алмашынып тора, ә яҡшы тормош һаман да юҡ. Етмәһә, күҙ асып йомғансы улар тырышып төҙөгән колхоз-совхоздар елгә осто, бөтөн мөлкәтен йыйын бурҙар ташып алып бөтөрҙө, эт менән бесәй киңәнде инде. Бәлки, етештергән продукцияны хөкүмәткә тапшырмай, үҙ аллы һатырға рөхсәт итһәләр, хужалыҡтар бөлгөнлөккә төшмәҫ тә ине. Эш хаҡы түләнмәгәс, шул осорҙа самогон ауыл валютаһыға һуҡмайбыҙ. Ошоларҙы уйлайым да, мин күптәргә ҡарағанда бәхетлерәкмен икән, тием. Сөнки мин өләсәй тәрбиәһе алып, уның алтынға бәрәбәр һүҙҙәрен ишетеп үҫкән кеше. Ғаиләһендә күпме балаһы булһа ла, өләсәй бөтәһендә лә йәшәмәй, береһендә генә тора. Әсәйемдең бер туған апайы шуға бер аҙ көнләшә, һинең балаларыңды "минекеләр" тип һөйләй, ә минең балаларымды ул тиклем яҡын күрмәй, тип үпкә белдерә ине хатта. Ике өлкән апайыма ҡарағанда, өләсәйем мине яҡыныраҡ күрҙе,

***✓ Аңыҙды, күңелеңдә йылдар дауамында йыйылған керҙән, наҙанлыҡтан таҙалау өсөн билдәле ваҡыт үтергә тейештәр. Ниндәйҙер яҡшылыҡ кешегә ҡапыл һәм күп дәүмәлдә бирелһә, уның ҡәҙере булмай.***



# ТҮҘЕҮ СИФАТЫ...

## ҡайҙан килә?

ым ҡарауыллап ултыра. Айыу ҡылҡылдап килә-килә лә, мылтыҡ тауышы яңғырау менән кире китә. Шул темп менән бер аҙна эшләйбеҙ ҙә, шәмбе көндө мунса инергә тип ауылға ҡайтабыҙ, өләсәйемдең һитә балын берәр сынаяҡ эсереп, йоҡлаталар. Ул һитә балына бөгәнәш үләне төшөрөлгән була. Бөгәнәш, руссаһы воронец колосовидный, женьшень үләненә оҡшап тора. Өләсәйем ул үлән менән ауырыған саҡта дауаламай, һауыҡҡас, организмдың миктәүенән ҡуллана торғайны.

### Ирҙәрҙе һаҡлайыҡмы?

Замандың тағы бер афәте - ир-егеттәрҙең, атай кешенең абруйы төшөүе. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, шул ир-егеттәрҙе яҡлайыҡ, һаҡлайыҡ, тип хәбәр һөйләйбеҙ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың иңенә йөкмәтелгән ауыр йөк тураһында тигеҙлеккә ынтылып, улар үҙҙәре теләп алды, тип кенә фекер йөрөтәбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тылда ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарҙы шул тиклем ыҙалатҡандар, ауырлыҡтарға түҙә белеү сифаты йылдар буйы шулай һалынған, минеңсә. Һуғышта йөрөгән һалдаттарҙы ашатырға кәрәк булған, ә балаларын туйҙырырлыҡ ҡына бер ус бойҙай алып ҡайтҡан өсөн дә Себер ебәргәндәр. Көнө-төнө колхоз эшендә йөрөгән, һал ағыҙған ҡатын-ҡыҙҙар нисек кенә мал тотҡан, бесән әҙерләгән икән, тип аптырайым хәҙер. Һыйыры ятып үлһә үлгән, ләкин уны һуйырға ярамаған - һәр йорттан ит, май, йомортҡа йыйғандар. Нәби ауылында эшләгән сағымда ветерандар менән осрашыуҙа бер ҡатын: "Дүрт йыл рәттән һыйырым быҙауламағас, май һәм ит тапшырыу буйынса задание йыйылып китеп, судҡа тарттырҙылар. "Һыйырым быҙауламағанға мин ғәйепleme ни?" тип ҡысҡырып илап, төрмәнән саҡ тороп ҡалдым", - тип һөйләгәйне. Һуғыштан һуң да ҡатын-ҡыҙҙарҙың тормошо еңеләймәгән: ирҙәре һуғыштан ҡайтмаған, ҡайтһа ла, йәш кәләш алыусылар булған. Бөтөн ерҙә ирҙәр менән бер рәттән ауыр эштә йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡәҙерҙәре бөткән. Хәҙер ҙә шул уҡ хәл дауам итә, ҡатын-ҡыҙ эшләй, донъя йөгөн дә тарта, ирен дә ҡарай, балаларын да тәрбиәләй. Әммә тормош ауыр, тип, башын бауға тыға һалмай. Ирҙәргә яңылыш бер һүҙ әйтеп ысҡындырма, ғаилә тарҡала, үс итеп үҙенә ҡул һала. Тағы ла ҡатын ғәйепле булып тора ла ҡала. Элекке ғаилә традицияларын тергеҙмәйенсә, ир-егеттәр үҙҙәрен ғаилә башлығы булыуын аңлап, яуаплылыҡ тойоп, ҡатын-ҡыҙға ҡарата ихтирамлы булырға өйрәнмәйенсә, үҙҙәренең абруйын да күтәрә алмай, ғаиләләрҙең тарҡалыуы ла туҡталмай. Ирҙәр үҙҙәре егелеп донъя көтә, ғаиләһен ҡарай, аҡса таба башлағас ҡына халыҡ араһында абруйлы, ҡатынына һәм балаларына ҡәҙерле, өлгөлө ғаилә башлығы була ала.

### Хаҡлы ялда ни эшләргә?

Был һорауҙы бик йыш ишетергә тура килә, халыҡ араһында ҡайнап эшләп өйрәнгән кешеләр хаҡлы ялға сығыуҙы ауыр ҡабул итә. Мин иһә, артыҡ ҡайғырманым, үҙ сиратын көтөп ятҡан эшләйһе бүтән эштәр ҙә күп ине. Билдәле бер йәшкә етһәң, ғүмереңдең сикле икәнен аңлай башлап, күңелеңә ятҡан эштәрҙе генә эшләгең килеп тора. Шуға күрә, тарихи факттар һәр кем теләгәнсә үҙгәрергә әҙер торған осорҙа, киләсәк быуындарға дөрөҫ башҡорт тарихы барып етмәҫкә мөмкин булыуын күҙаллап, ошо үҙебеҙҙең төбәктә йәшәүселәрҙән, халыҡ хәтерендә ҡалған хәл-ваҡиғаларҙы яҙып, теркәп ҡалдырырға, тигән ниәтемде яйлап тормошҡа ашыра башланым. Был эшкә ун йыл самаһы алдан тотонһам, һорамаһаң да үҙҙәре һөйләп ултырған оло йәштәге ауылдаштарымдан яҙып алып өлгөргән дә булыр инем. Бөгөн күбеһе белмәй, күптәр иҫләмәй, шулай ҙа ҡалғанын ғына булһа ла йыяйыҡ, тигән уй менән ауылдың иң әүҙем ҡатын-ҡыҙҙары бергә берләште. Беребеҙ шәжәрә төҙөй, беребеҙ альбомдар эшләй, онотолоп барған йолаларҙы тергеҙергә ниәт итәбеҙ.

Элек бер бәләкәй ауылда ла әллә нисә мулла булған. Беҙ уларҙы йыназаға йөрөгән дә, бәлеш ашап ҡына ултырған, тип уйлайбыҙ. Ысынбарлыҡта улар еңел генә йәшәмәгән, донъяһын да көткән. Мәҫәлән, минең Садиҡ олатайым суфый булған, атайымдың олатаһы - ҡарый. Солоҡ ағастары тураһында яҙып ҡалдырған китабында үҙен ҡарый тип ҡул ҡуйған, йәғни, Ҡөрьәнде яттан белгән һәм уны күп төрлө итеп уҡый алыусы кеше булған. Садиҡ олатайым кешеләрҙе ҡаты ауырыуҙарҙан да дауалаған. Һөйләгәндәренән генә беләм, бер кеше аҡ йыланды үлтергән һәм сабынлыҡта яңғыҙы ҡуна ятып ҡалған. Төндә ҡыуыш эргәһенә айыу төшмәһен тип, ҡайынды йығып, усаҡ яғып ултырһа, эргәһенә ят һалдат килеп сығып, был кешенең атын шул утҡа тыҡҡан. Ҡурҡышынан ул аҡылдан яҙып, ауылға йүгереп ҡайтҡан, һуңынан уны Садиҡ олатайыма дауалатырға алып килгәндәр. Кәсепселек менән генә шөғөлләнгән кеше шуны дауаларлыҡ булғас, ғилемле муллалар ниндәй көслө булғандыр әле. Улар кеүек сифаттарға эйә булмаһаҡ та, күп белемдәре ваҡыт арауығында юғалып ҡалһа ла, мәғлүмәт туплауҙың файҙаһы кәрәк булыр, тип өмөт итәм. Хәҙер тарихи шәхестәргә иғтибар арта, йәштәр үҙебеҙҙең йолалар менән бер аҙ ҡыҙыҡһына ла башланы, күптәре шәжәрәһен дә белә.

### Кирәмәттәр

Бәндәләр донъяһынан тыш, тағы параллель донъяның булыуы тураһында төрлө мәғлүмәт ишетәбеҙ. Ул донъя менән кешеләр араһында бәйләнеш өҙөлә, беҙ уларҙы күрмәй, һиҙмәй башланыҡ. Элек параллель донъя менән бәйле хәл-ваҡиғалар йыш була торғайны. Кешеләрҙе пәрейҙәр алып китеп уҡытҡан, тиҙәр хатта. Минең Нәсиғә өләсәйем барыһын да белеп ултырған, уның был һәләте нәҡ шул пәрейҙәр алып китеп уҡытыуынан килергә тейеш. Ауылдашым Шәмсикамал инәй үҙе бер табышмаҡ ине, мәрхүмә. Ире һуғыштан ҡаты яралар менән ҡайтып, донъя ҡуйғас, Шәмсикамал инәй балалары менән яңғыҙы тороп ҡалған. Уны пәрейҙәр уҡытырға алып киткән. Шуғамылыр, уның ҡыҙыҡ яҡтары бар ине. Мәҫәлән, уның тураһында малдарының ҡолағына ниндәйҙер доғалар уҡып ебәрә лә, улары үҙе ҡайта торғайны, тиҙәр. Әгәр ҙә көтөүҙән оҙаҡ ҡайтмай торһалар, ишек алдына сығып: "Нишләп балаларҙы ҡаңғыртып, ҡайтмай йөрөйһөгөҙ", - тип, бер доға уҡый, уңарса теге малдары ҡайтып та етә, ти.

Бөрйән ере бик хикмәтле, мин үҙем дә шундай бер ваҡиғаға тарығаным булды. Ирем мәрхүм булғас, сабынлыҡты алмаштырҙыҡ, юлын яҡшы белмәйем әле. Аҫтан йөрөһәң, бейек тауға менергә кәрәк, кешеләр ҡайҙандыр икенсе юл менән шул тауҙың башы буйлап бара. Туҡта әле, беҙ ҙә шул яҡтан ҡайтып ҡарайыҡ, тип, ҡыҙым менән ҡайтырға сыҡтыҡ. Шул юл менән бара торғас, үҙебеҙ йөрөгән күнегелгән юлға килеп төштөк. Юл сатынан алыҫ түгел һул яҡта кеше кейеме кейҙерелгән ҡарасҡы тора. Күҙ һирпеп кенә ҡарап, был нәмә тиктәҫкә тормай, тип уйланым да, ҡапыл сатанлаған ҡатын образы күҙ алдыма килеп баҫты, үтеп киттек. Күп тә барманыҡ, аяғымдың йөҙлөгө ауырта башланы, ары киткән һайын көслөрәк һыҙлай был. Бесәнлегебеҙ ауылдан 19 саҡрым алыҫлыҡта, ҡайтып етергә тағы биш саҡрым тирәһе ара ҡалған. Ҡайта килә аяҡ түҙә алмаҫлыҡ булып ауырта башланы, төнө буйы һыҙлап сыҡты әлеге. Шаурап ятып ҡалған бесәнде үҙем барып эшләшә алмағас, күңелем тыныс түгел. Шунан ҡапыл әлеге Шәмсикамал инәй иҫемә төштө. Аяғымды ике сәғәт эсендә имләп ҡайтарҙы. Бындай ауырыуҙарҙы медицина бер нисек тә дауалай алмай.

Моразым ауылында Уйылдан мулланың атаһының бер туғанының улы Фәйзрахман ағай йәшәй. Ул ҡустыһы менән ауылға ҡайтҡанында Уйылдан мулланың хәлен белешә барғандар, мулла утын алып ҡайтып бушатырға ғына торған. Ярҙам итешәйек, тиһәләр, көлөмһөрәп, үҙем бушатам, тип яуап биргән. Ике егет күтәрһә лә ауыр булырлыҡ йыуан ҡайын утындарын яңғыҙы күтәреп бушатыуын Фәйзрахман ағайҙар ҡарап торған. Уйылдан мулла кеүек имселәр тейешле доға йә параллель донъянан ярҙамсылар аша эшләгәндәрҙер, тип уйлайым.

Ильяс хәҙрәт, ауылдарына яҡын ике тау араһындағы юлда ғифрит йөрөй, тип һөйләр булған. Ул ғифритте эшкә ҡушһаң, эш еткереп булмай, тигән. Ул ниндәй ғифрит була ла, уны нисек эшкә ҡушып булыуы мөмкин? Элек Совет заманында бындай кирәмәттәрҙең барыһын да әкиәт, тинеләр ҙә торҙолар, ысын булыуына ышанманыҡ та. Мин әле тулыһынса төшөнөп етә алмаған нәмәләр күп, әммә ауырыуҙарҙың ике төркөмгә бүленеүен беләм: бер төркөмөн медицина дауалай, икенсе төркөмөн - дауаламай. Уйылдан мулла ла үҙенә килгән ауырыуҙарҙы, быныһы дауахананыҡы, быныһын үҙем дауалайым, тип айырып ултыра ине.

Медицина ярҙамында аңлатып булмаған ауырыуҙарҙың береһе - һирпелеү. "Ат елпеүе тейгән", ти торғайны боронғолар, бының айышына төшөнөп етмәй инем. Бер апай һирпелеүҙең эҙемтәһе ни тиклем етди булыуы тураһында һөйләне. Үтеп барған һыбайлының ҡаршыһына бәләкәй бала йүгереп килеп сыҡҡан. Һыбайлы юлын дауам иткән, ә теге бала күп тә тормай донъя ҡуйған. Көтөү ҡайтҡанда бәләкәй балаларҙы малға ҡаршы сығарырға ярамай, тип тыйыуҙары ла бушҡа түгел. Һирпелеү оло кешеләргә лә ҡағылыуы мөмкин. Ҡан баҫымы юғары булған кешеләргә яңы ғына ҡайтып инеп торған һыйырҙы һауырға ултырырға ярамай. Сөнки һыйыр юлда ҡыҙып ҡайтып килә, былай ҙа уның температураһы, ҡан баҫымы кешенекенә ҡарағанда юғары. Ауырыу балаға малдан ғына түгел, берәй юлдан килгән кешенән дә һирпелергә мөмкин. Шуға күрә, бәләкәй балаларҙы килгән кеше үҙе инеп, түрҙән үтмәйенсә ҡаршыһына алып сыҡмайҙар, асылған ишектән ингән һауа балаға килеп етмәҫкә тейеш. Урындыҡтар был йәһәттән бик уңайлы булған, ишектән ингән һауа урындыҡ аҫтына инеп китә, өҫкә ҡалҡмай. Урындыҡтар халыҡтың үҙенә күрә бер табышмағы - ошо йәшәү рәүеше дөрөҫ булған.

Беҙ маңлай күҙе менән күрмәгәнде инҡар итәбеҙ. Әммә ультрафиолет нурҙарын, йә инфраҡыҙыл нурҙарҙы күрмәһәк тә, уларҙың булыуына шик белдермәйбеҙ. Бәлки, ауырыуҙарҙың да беҙ күрмәгән сәбәптәре барҙыр.

Мин ауырыуҙарҙы дауалайым, тип әйтә алмайым, сөнки ундай һәләт быуындан-быуынға тапшырыла. Нәсиғә өләсәйем Сәғүрә һәм Ғәйшә инәйемдәрҙе өйрәткән, әммә һәләтен күсермәгән. Миңә тапшырған кеше булмағас, дауаларға хоҡуғым да юҡ. Элек ундай белемгә уҡытыу баҫҡыслы булған, синыфтарға бүленмәй, һәүетемсә генә һәр кем үҙенең тиҙлеге менән материалды үҙләштергән. Ниндәйҙер бер кимәлгә еткәс, береһенең үҫеше туҡтаған, көслөрәктәре артабан дауам иткән. Әлеге көндә мин күңелем менән дауаланыу өсөн беренсе урында доға тороуын аңлап етә алмайым. Был аңлауға табан төрлө юлдар менән барам, тормош этеп-төртөп өйрәтеп килә. Кешенең һәр тән ағзаһын һауыҡтыра торған айырым доғаһы булырға тейеш, уларҙы белгән муллалар китеп бөткәс, өйрәнеүе лә еңелдән түгел. Доғалар ярҙамында үҙеңде һауыҡтырырға ла мөмкин. Өс йыл элек ғәрәп алфавитын өйрәнергә ниәтләп, китап алғайным, һаман тотоноп китә алмайым. Тимәк, һәр нәмәнең үҙ мөҙҙәте, тиҙерәк эшләргә теләп, ваҡыт ағышын тиҙләтеп булмай. Берәй бүлмәне, киңлекте таҙартам тиһәң дә ваҡыт кәрәк бит. Шуның кеүек, аңыңды, күңелеңде йылдар дауамында йыйылған керҙән, наҙанлыҡтан таҙалау өсөн билдәле ваҡыт үтергә тейештер. Ниндәйҙер яҡшылыҡ кешегә ҡапыл һәм күп дәүмәлдә бирелһә, уның ҡәҙере булмай. Тормоштоң ҡәҙерен аңлатыу өсөн кешегә төрлө ауырыуҙар ебәрелә, тик дауаланырға теләп килгән кеше һинән бер ҡул менән бөтөн ауырыуын һыпырып алып ташлауҙы өмөт итә, ә үҙҙәренә ниндәйҙер үлән ҡайнатып эсергә, башҡа төр халыҡ дауаһын ҡулланып, сәләмәтлеген ҡайтарырға тәҡдим итһәң, күп саҡта үҙе эшләргә теләмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яңы нәмәләрҙең асылына төшөнөү өсөн иҫкене ентекләп өйрәнергә кәрәк", - тигән Ҡытай философы, аҡыл эйәһе Конфуций ҙа. Фән үҫешкән, техника алға киткән заманда йәшәүсе быуынға был һүҙҙәр артыҡ әһәмиәтле лә кеүек түгелдер, бәлки. Аңлап торабыҙ, бер йыл эсендә телефондарҙың ғына ла әллә күпме төрҙәрен һатыуға сығарып торалар. Яңылары ҡулланылышҡа инә тора, иҫкеләре онотола бара. Ул ғынамы, хатта бөтөн кешелек белгән тарихи ваҡиғаларҙы үҙ күҙҙәре менән күрмәгән быуын онотоп, үҙгәртеп ебәрергә әҙер тора. Бәлки, шул үткәндәрҙе хәтерҙән юя һалып ҡуйырға тырышҡан өсөн дә артыҡ алға китеш һиҙелмәйҙер? Барыһына ла тарихи романдары менән билдәле совет яҙыусыһы Валентин Пикуль юҡҡа ғына "Үткәндәре булған илдәрҙең генә киләсәге бар", тимәгәндер бит. Әгәр ҙә беҙ башҡорт милләтенең киләсәге булыуын теләйбеҙ икән, яңы һәм замансаға ҡыҙығып китеп, тамырҙарыбыҙҙы һәм тарихыбыҙҙы иҫебеҙҙән сығармаҫҡа, ерлегебеҙҙән, рухыбыҙҙан ситләшмәҫкә бурыслыбыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

***✓ Бер заман атайым шаршауҙы елпелдәтә асып ебәрҙе лә: "Йыйын, алып ҡайтам!" - тип бойорҙо. "Атай, нимә һөйләйһең? Кейәүең дә өйҙә юҡ, һунарынан ҡайтһын әле", - тием.***



Һис тик ултырыуҙы белмәгән, йәшлегендә кисергән ауыр эштәрҙәнме, әллә билен биртендереүҙәнме яртылаш бөкөрәйеп ҡалған өләсәйемдең, туҡһанынсы тиҫтәһен ҡыуғанда ла һылыулығын юғалтмаған асыҡ сырайы, мөләйем күҙ ҡараштары күҙ алдымдан китмәй. Берәй ярҙамға мохтаж булһам, йә нык асыуым килһә, башынан төшөрмәҫ ап-аҡ яулығын елберләткән өләсәйемдең теп-тере һыны килеп баҫа. Әйтерһең, мине айыҡ аҡыллы, һалҡын ҡанлы булырға саҡыра, һаман булһа ҡурсый, яңылыш аҙым яһауҙан аралай. Ҡаты ауырып, дауахананың реанимация бүлегендә йәнтәслим ятҡанымда ла өләсәйем килде яныма.

- Сабыр итә күр, түҙ инде, балаҡайым! Һин күрәсәкте башҡа күрмәҫ, был ауырлыҡтарың да онотолор, аслан сабыр булырға тырыш. Мин эргәндәмен бит, ҡолонсағым, - өләсәйемдең әллә ҡайҙан ишетелгән ошо һүҙҙәренә аптырап, уға төбәләм:

- Өләсәй, һин килдеңме ни? Һин күптән гүр эйәһе инең дә... Үҙең һөйләшмәйһең дә шикелле, ә тауышың ҡайҙан ишетелә ул?

- Ай, балаҡайым, кешенең йәне үлә тиме ни ул - беҙ бит һәр саҡ һеҙҙең янда. Йәнең алҡымыңа килеп, үтә лә ҡыҫталанғаныңды тойоп килдем, түҙмәнем, күҙ нурҡайым. Әҙ булһа ла хәлеңде еңеләйткем килә. Беҙҙең янға килергә ашыҡма. Фани донъяға изгелек таратыр өсөн яралған өлөшлө бала бит һин. Йәшәр йылдарың, күрер шатлыҡ-ҡыуаныстарың алда әле, кешеләргә өләшер монаятың бар...

- Өләсәй... өләсәй! - үҙ тауышыма үҙем күҙҙәремде асам. Тәнем лысма һыу, янымда бер кем дә юҡ. Өнөммө был, әллә төшөммө? Уңғансы булмай, яныма ап-аҡ кейемле шәфҡәт туташы йүгереп килә: "Нимә борсой һеҙҙе? Тағы ла берәй ерегеҙ ауыртамы әллә? Бәлки, докторҙы саҡырырға кәрәктер?" - уның һүҙҙәрен ишетәм, әммә аңлап етмәйем. Бары бер аҙҙан һуң ғына аңыма килгәндәй итәм. "Юҡ, мин былай ғына, һаташам шикелле..." - хәлһеҙ генә әйтелгән ошо һүҙҙәремдән һуң шәфҡәт туташы мамыҡтай йомшаҡ ҡулдарын маңлайыма ҡуя. "Абау, ағай, тағы янып бараһығыҙ бит... Хәҙер докторҙы алып киләм!" - ул йүгерә-атлай ишектән сығып китте.

"Эх, өләс, өләс... Ни эшләп һин иң ауыр мәлемдә генә килеп күренәһең дә, шунда уҡ юҡ булаһың? Әллә ысынлап янымда ғынамы һин?" - уйҙарымды докторҙың тауыш-тынһыҙ ғына яныма килеп, барлау тамырын тотоп ҡарауы бүлә. "Йөрәк тибеше хәлһеҙләнгән. Тиҙ генә укол ҡаҙағыҙ! - шәфҡәт туташына күрһәтмәләрен биргәс, ул минең күҙҙәремә текләй. - Йә, иптәш Азатҡолов, ниңә бирешергә уйланың? Ҡара уны, беҙҙән тиҙ генә ҡотола алмаҫһың, - доктор уйынлы-ысынлы һөйләнә-һөйләнә, баш аҫтымдағы мендәрҙе рәтләп һала, башымдан һыйпап ҡуя. - Хәҙер укол ҡаҙарҙар, аҙ ғына сабыр ит. Бирешмәйек инде, туғаным, йәшәүгә өмөтөңдө өҙә генә күрмә!.." "Беҙҙең ағай бирешмәй ул! Ауыр операцияларҙы үткәргәс, ҡалғаны уның өсөн бер ни ҙә түгел инде, - ҡайһы аралалыр яныма килгән шәфҡәт туташы беләгемә тоташтырылған системаға ниндәйҙер уколдар өҫтәп ҡаҙай. - Хәҙер еңеләйерһегеҙ..." Үҙем хаҡында шундай хәстәрлек күреүҙәрен күреп, яңғыҙ түгеллегемде тойоп, күҙҙәремә йәш эркелә. "Рәхмәт, бөтәгеҙгә лә!" - тип әйтеп өлгөрәм, күҙҙәрем тағы йомола һәм мин тағы уйҙар тулҡынында бәүеләм...



Мотал РӘМОВ

# Өләсәйем хикәйәте

* * *

Өләсәйемдең алты балаһынан тыуған егерме ете ейән-ейәнсәре араһында иң һөйөклө, иң әһел ейәне булып үҫтем. Иҫ белә башлағанымдан алып уның: "Үҙенә бер башҡа бала бит ул, минең йөрәк майым! Баламдың балдан татлы балаһы!" - тип һамаҡлай-һамаҡлай һөйгәнен, кеҫәһенән һис өҙөлмәгән тәмлекәстәрҙең иң татлыһын миңә һонғанын тоя инем. Малай ғына сағымда әсәйемдән кинолыҡ аҡса һораһам, өләсәйем шунда уҡ түшелдереген ҡапшай башлай: "Туҡта, ҡыҙым, үҙем бирәм синнайыма... Мә, бәләкәсем, киноңа ла етер, көндөҙ магазиндан тәмтом да алырһың..." - тип, көмөш тәңкәләрен, йә ҡағыҙ бер һумлығын сығарып тоттора һалыр ине. "Ҡуй, әсәй, ҡотортмасы шуны. Кәнфит-прәник былай ҙа тулып ята. Быныһы ла, минән һораған кеше булып, өләсәһенән алып өйрәнде тамам", - әсәйемдең асыуланмай ғына орошоуын ишетмәйем дә, урамға һыҙам.

Өләсәйем беҙҙең менән йәшәмәй, кинйә улында тора. Ә ул беҙгә берәр айға ҡунаҡҡа килһә, ул көндәр минең өсөн тотош байрамға әйләнә. Йәй көндәре уның бүтән балаларының балалары ла беҙҙә ҡунаҡлап ала. Кис етеп, йоҡларға ваҡыт етһә, түр яҡтың иркен иҙәненә урын йәйәбеҙ. Ҡап уртаға, әлбиттә, өләсәй ята. Ә беҙ, йыйын ыбыр-сыбыр, уның янынараҡ ятырға тырышып талашабыҙ - беренсенән, өләсәйҙең бер ҙә генә бөтмәҫ әкиәттәрен яҡшыраҡ ишетке килә, икенсенән, йоҡо аралаш тибеп осорған юрғанды ул әлдән-әле төҙәтеп, беҙҙе ҡымтып ябып тора. Миңә былай ҡайғырырға түгел: өләс мине мотлаҡ үҙ эргәһенә ала. Риза булмағандарҙың ауыҙын тиҙ яба: "Сыулашып, башымды ауыртһағыҙ, әкиәт һөйләмәйем дә ҡуям!" Шунда берәйһе: "Ошо бер Тимерәйенде ҡосаҡлаған булаһың да, шуны яҡлай ҙа тораһың", - тип ысҡындырһа, өләстең тауышы ғәҙәттәгенән ҡатыраҡ һәм уҫалыраҡ яңғырай: "Шым, тел менән яҡҡа һалышма! Минең өсөн барығыҙ ҙа бер тигеҙ. Сынтимерем ошо өйҙөң хужаһы - өләсәй эргәһе уныҡы!" Ошо һүҙҙәре менән ул мине һыңар ҡулы менән ҡосаҡлап, тупылдатып һөйөп тә ала.

- Әйҙәгеҙ, балалар, башта доға ҡылып алайыҡ. Түшәккә ятҡас, аят-доға уҡып алырға ғәҙәтләнегеҙ - йоҡоғоҙ тыныс булыр, изге төштәр күрерһегеҙ. Йәле, Сынтимер, һин матур уҡый торғанһың, ҡысҡырып берәй доға уҡы әле.

Өләс менән икебеҙ генә йоҡлағанда ятлаған доғаларҙы иҫемә төшөрә алмай ятам. Шуны һиҙгәндәй, ул әкрен генә үҙе башлап ебәрә. "Фатиха", "Әлифләммим", "Көлһуаллаһ" сүрәләрен икәүләп уҡыйбыҙ артабан. Аранан берәүһе, ниндәйҙер ҡыҙыҡ табып, пырх итеп көлөп ебәрә. Башта иғтибар итмәгән һымаҡ булһа ла, аят сүрәләрен уҡып бөтөп, доға ҡылғас, өләстән ярайһы ғына эләгә ул оронсоҡҡа.

- Ә-ә-әй, балаһығыҙ шул әле һеҙ, балаһығыҙ - ҡолон майы өҫтөгөҙҙә әле. Ошондай ваҡытығыҙҙың бер мәл генә икәнлеген аңлап бөтмәйһегеҙ шул...

- Өләс, һин дә беҙҙең кеүек бәләкәй булдыңмы ул? - өләсәйемде бәләкәй генә ҡыҙ итеп күҙ алдына килтерә алмағанлыҡтан, мин уға үҙемдең эскерһеҙ һорауымды бирәм.

- Ай, һантый, бар кешеләр ҙә бәләкәйҙән ҙур була инде ул. Әллә мине ошолай әбей булып тыуған, тип уйлайһыңмы? - өләсәйем аптыраған булып китә.

- Әтеү һинең дә атайың, әсәйең булдымы ни?

- Булмай тағы. Мин дә һеҙҙең кеүек иркә генә бер ҡыҙ инем...

- Өләсәй, бәләкәй сағыңды һөйлә әле! - тиктормаҫ Сәүиә апайым, өләсәйемдең өсөнсө ҡыҙының ҡыҙы шулайтып һорай һала.

- Юҡ, ул турала өләс миңә күп һөйләне инде. Лутсы, әкиәт һөйләһен! - кинйә ҡыҙының ҡыҙы Йәнбикә лә һүҙгә ҡушыла.

- Әйе һиңә, һиңә һөйләһә ни, беҙ ишеткәнебеҙ юҡ та баһа! - һүҙгә әллә ни әүәҫ булмаған Зилә апайым Йәнбикә апайҙы бүлдерергә ашыға. - Үҙең тураһында һөйлә, өләсәй!

- Ярар, ярар, талашмағыҙ. Ана, Фирүзә кеүек өндәшмәй ята алмайһығыҙмы әллә? - Байтаҡ ҡына өндәшмәй, уйланып ятҡас, тамағын ҡырып ҡуя ла: - Моҡ заманғыны ҡутартырға уйланығыҙмы, сырылдаҡтар? Тыңлағыҙ улайһа, тик бүлдермәй генә ятығыҙ!

Өләсәйҙән әллә ниндәй тылсымлы хикәйәт көткәндәй, барыбыҙ ҙа шымып, уға боролоп ятабыҙ. Алғы өйҙәге урындыҡҡа үҙҙәренә урын һалып булашҡан әсәйем дә түр яҡҡа сыға.

- Был тел биҫтәләренә ҡыҙыҡ нәмә һөйләргә итәһең түгелме? Ҡана, мин дә тыңлайым әле, - ул ситтә ятҡан Фирүзә апайҙың эргәһенән урын ала.

- Һин дә балаға әйләндеңме әллә? - өләсәйем ғәҙәтенсә кеткелдәп ҡуя. - Әйҙә, йыбанмаһаң ни, тыңла. Минең өсөн һин дә бала бит әле, - тип, хикәйәтен башлай.

* * *

- Борон-борон заманда ла, әллә ҡайҙағы Ҡаф тауҙары артында ла түгел һөйләйһе һүҙҙәрем. Үҙем ғүмерлеккә ғашиҡ булған, һоҡланып туймаған Һаҡмар йылғаһының түбән яғында элегерәк Этбармаҫ тигән бер ауыл була торғайны. Йылға бөгөләндә, бейек тауҙар ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған бәләкәй генә ауыл. Өйҙәр тыштан һыланған, аҡ балсыҡ менән ағартылған. Ана шул ауылда әсәйем Фәтхиә менән атайым Уйылдандың йәндәрендәй күргән бер бөртөк кенә ҡыҙы инем...

- Һеңлең менән ҡустың бар ҙа инде, - был ни эшләп Һөснекамал инәйем менән Әүхәҙей ағайымды төшөрөп ҡалдырҙы икән, тип аптырап, үҙемсә төҙәтеү индермәксе итәм.

- Улар, улым, һуңынан булған балалар. Әүхәҙей ағайың әсәйең менән йылдаш, әсәйемдең икенсе ҡартынан тыуған бала ул. Етеш кенә йәшәнек. Өҫтөмдә гел балитәкләп тегелгән ебәк күлдәктәр, тәңкәләр тағылған камзул, елән булды. Оҙон сәсемде әсәйем һәр ваҡыт сулпы ҡушып үреп ебәрер ине, - өләсәйем ауыр көрһөнөп ала. - Этбармаҫтың тирә-яғы емеш-еләк булыр ине. Ер асылыу менән бөтөн ауыл тау һырттарына сығыр, ашарға яраҡлы үләндәр йыя башлар ине. Унан күп тә тормай, икенсе, өсөнсө емеш өлгөрә. Ҡайҙа беҙгә һеҙҙең ише кәнфит-прәник менән тәғәмләнеү! Ер емештәрен ожмах ашылай күрҙек...

Тик донъялар таушалып торған йылдарға тура килде минең бала сағым, йәшлегем. Ун дүрт-ун биш йәштәрҙә булғанмындыр, аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышы сығып китте. Төпкөлдә, бөтөнләй тайыҙ ятҡан беҙҙең ауылға ла килеп сыҡҡылайҙар. Бер аҙна тирәһе аҡтар йөрөһә, икенсе аҙнаһына ҡыҙылдары баҫып ала. Ололар йәш-елкенсәкте, ҡыҙҡырҡынды ҡурсыр ине. Берәй имеш булһа, еткән ҡыҙҙарҙы, бала-сағаны, йәшерәк ҡатындарҙы тау-таш араһына йәшерерҙәр ине. Бер оло ғына йәштәге олатай - Шаһыбал ағай ауылдан килеп-китеп, тамаҡ килтереп йөрөй яныбыҙға. Ярай әле, Этбармаҫ тирәһе торғаны бер лапылыҡ, ҡаяташ булды. Тау ҡыуыштарына боҫоп ултыра торғайныҡ... Шундай бер мәлдә ун биш йәштәр тирәһендәге бер малайҙы күрәләтә атып киттеләр. Байғош, дыуамаллығы менәндер инде, тау башына сыҡҡан булған. Кемдәре атҡандыр, аҡтарымы, ҡыҙылдарымы, мәрхүмкәйҙе бер нисә көн үткәс кенә алып ҡайтып ерләнеләр. Ә беҙҙе Шаһыбал олатай берәм-берәм алып китеп, тағы ла алыҫҡараҡ йәшерҙе. Әллә үҙенсә ҡурсыған булып микән, балалыҡтан да сығып бөтмәйенсә, атайым күрше ауылдан - волость үҙәгенән яусылап килгән берәүгә бирҙе лә ебәрҙе мине...

- Туй ҙа яһап торманылармы? - быныһы өндәшмәҫ Фирүзә апайҙың тауышы.

- Батаһы ла, туйы ла - вис булды. Әүәле ни ҡыҙ биреү, килен төшөрөү ҡырҡ мәшәҡәт менән үтер ине. Башта яусылап килделәр, унан ике ир килеп, никах уҡыттылар, шунан кейәүем үнгәре менән килде. Көҙ еткәс, атайымдар ике ағайымды ҡоҙаларҙы туйға саҡыра ебәрҙе. Туй өс көн беҙҙең яҡта, өс көн егет яғында үтте. Шулай, матур ғына йәшәп киттек. Ҡайны-ҡәйнә менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәйбеҙ. Атай-әсәйҙәр ҙә татыу ғына, саҡырышып, ҡунаҡ булышып торалар. Кейәүемдең исеме Дәүләткилде ине - бик тыныс холоҡло, ипле генә кеше. Үҙ-ара һис һүҙ әйтешмәй, һәүетемсә генә йәшәп ятабыҙ.

Бер ҡыш атайым ат менән беҙгә килде лә, ике ҡоҙа әсегән балды эсә-эсә, донъя хәлдәрен һөйләшеп, урындыҡта ултыралар. Бейемем менән беҙ шаршау артында ирҙәргә ашһыу яраштырған булып йөрөйбөҙ. Бер мәл әлеге икәү үҙ-ара бәхәсләшеп киттеләр. "Былар бер нимә сығармаһалар ярар ине", - тип, бейемем менән мин борсоуға төштөк.

Бер заман атайым шаршауҙы елпелдәтә асып ебәрҙе лә: "Йыйын, алып ҡайтам!" - тип бойорҙо. "Атай, нимә һөйләйһең? Кейәүең дә өйҙә юҡ, һунарынан ҡайтһын әле", - тием. Ҡайҙа ул мине тыңлау: "Йыйын тиҙәр һиңә! Эт бармаҫ ерҙән килен алғандар, имеш. Мал бирмәҫ ергә һәләктәй ҡыҙымды биргән мин алйот", - тип аҡыра атайым.

Өндәшмәй генә күҙ йәштәремә быуылып, атайымдың

✓ ***Бәйгегә һайлап алынған бейеүҙәр ҙә халыҡсанлығы, башҡорт бейеүенә хас сюжетлы булыуы менән айырылып торҙо. Бөгөнгө заман сәнғәтенә бик хас булған халыҡ бейеүҙәрен стилләштереү тигән кире күренеш юҡ бында.***



әмеренә баш эйҙем. Бейемемдең илаулап, сарбайлауына ҡарамай, атайым мине үҙе менән алып ҡайтты ла китте. Аҙаҡ ни Дәүләткилдемә бөтөнләй күрһәтмәнеләр ҙә. Беҙҙең ауылға килеп, урамдан үткәнендә генә, әсәйемә һиҙҙермәскә тырышып, артынан ҡарап ҡала торғайным. Күп тә тормай, ҡартатайыгыҙға оҙатып ебәрҙеләр, - өләсәйем тағы ла тынып ҡала. - Аллаһыма рәхмәт, Мотаһарым да һәйбәт кеше булып сыҡты. Ярлы ғына булһалар ҙа күнелдәре бай, эсҡаҫтыһыҙ кешеләр ине. Мине бер рәнйетмәнеләр. Бала-сағалы булып, һин дә мин йәшәп киттек. Э-э-й, ҡәһәр төшкөр ярман һуғыш асмаһа, һеҙ ҙә күрер инегеҙ ҡартатайығыҙҙы. Ошо Сынтимерем оҡшаған уға, баҙыҡ кәүҙәле, еҙ мыйыҡлы мыҡты ир ине, мәрхүмем.

-Йә, ярай, йоҡларға ваҡыт! - өләсәйем урынынан ҡалҡынып, беҙҙең юрғандарҙы ҡымтыштыра.

- Һөйләп бөтмәнең дә инде... - минең бер ҙә генә йоҡом килмәй, шуға хикәйәттең аҙағын ишеткем килә.

- Тәмле нәмә күп булмай, йоҡла, ана, апайҙарың әүен баҙарына китә лә башланы...

- Әсәй, йырлап ҡына ишеттер ҙә, мин дә үҙ урыныма шылайым, - өләсәйҙең һөйләгәндәренән бала сағын иҫенә төшөргән әсәйем, өләсәйемдең моңло тауышын тағы бер ишеткеһе килептер, үтенесен белдерә. Ифрат матур йырлай шул ул - йырлағанында тыңлаусылары өнһеҙ-тынһыҙ ҡала.

Өләсәйем тауышын көйләгәндәй, тамаҡ ҡырып ала ла үҙе генә белгән "Ирмәк" көйөн һуҙып ебәрә:

*Бейек тә генә тауҙың,*
*ай, башында,*
*Ана, ултыра, йәнейем,*
*ҡуш ҡайын.*
*Шул ҡуш ҡайын*
*кеүек серләшергә*
*Насип булыр микән,*
*дуҫҡайым?..*

*Сәскенәйең һыйпап,*
*башың тотоп,*
*Мин ултырам, йәнейем,*
*яныңда...*
*Төртөп тә генә*
*төртөп күрһәтәһең,*
*Күренә микән*
*йәннәттәр алдыңда...*

- Үә-әй, ғүмер тигәндәрең үтә лә китә икән шул! Беребеҙ ҙә мәңгелек түгел, ошолайтып яңғыҙ ологайыуҙары ғына ауыр.

- Өләсәйем менән әсәйемдең тағы ла оҙаҡ бышылдап ҡына һөйләшеүҙәрен тыңлап ята торғас, мин дә йоҡоға сумам.

* * *

Өләсәйемдең ул саҡта балалыҡ менән аңламаған күп һүҙҙәре, уфтаныуҙары бары бөгөн генә зиһенемә барып етә. Фани донъяла туҡһан йыл йәшәп, кеше ғүмеренең барлыҡ хәсрәт-михнәттәрен, ҡыуаныс-бәхеттәрен татыған ул! Беҙҙең өсөн әкиәт кеүек булып тойолған бер хикәйәттә генә лә күпме селпәрәмә килгән яҙмыштар, ҡыйрылған өмөттәр, һыҙланыу-көйөнөүҙәр, юғалтыутабышыуҙар...

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# "БАЙЫҠ"ТЫ БЕР КҮРҺӘҢ...

## күрге килеп тик тора



*Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Дуҫлыҡ" ансамбле.*

**(Башы 1-се биттә).**

Балаларҙың бейеү оҫталығы, тимәк, дөйөм бәйгенең кимәле күтәрелеүе тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Бейеүҙәр хистойғоға ла бай, артистизм, драматургия бар. Бөгөн йәш бейеүселәр, яңылышып ҡуйыуҙан ҡурҡып, күршеһенә ҡарап түгел, ә йөрәге менән тойоп башҡара бейеүҙе. "Был проектты башлап ебәргәндә ул шундай киң ҡолас алыр, тип уйламағайныҡ та. Дөрөҫөн әйткәндә, күнелдән генә быға ышанғайныҡ, сөнки халҡыбыҙ иҫ киткес талантлы бит. Бәләкәй балаларҙа ошо талантты уятып ебәреү өсөн бер бәйге етте лә ҡуйҙы. Бөгөн күп мәктәптәрҙә ансамблдәр барлыҡҡа килде, яңы бейеүҙәр тыуҙы, беҙ Башҡортостандың исемен донъя кимәлендә яңғырата алдыҡ, бында сағыулығы сит ил ҡунаҡтары башҡорт халҡын юғары мәҙәниәте булған халыҡ тип танып белә. Әйтә башлаһаң, бәйгенең ыңғай яҡтары күп. Был проектты ҡабул итеп, күтәрмәләп алғандары өсөн Башҡортостан Хөкүмәтенә, Мәҙәниәт министрлығына, Күгәрсен районы хакимиәтенә һәм, әлбиттә, йәш бейеүселәргә рәхмәт. Быйыл һайлап алыу турында 2 меңгә яҡын бала ҡатнашты, уларҙың араһынан иң-индәрҙе һайлап алыуы ла еңел булманы", - ти проект авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре Рита Өмөтбаева.

Бәйгегә һайлап алынған бейеүҙәр ҙә халыҡсанлығы, башҡорт бейеүенә хас сюжетлы булыуы менән айырылып торҙо. Бөгөнгө заман сәнғәтенә бик хас булған халыҡ бейеүҙәрен стилләштереү тигән кире күренеш юҡ бында. Киреһенсә, йәш хореографтарҙың үҙенсәлекле коллектив бейеүҙәр ҡуя башлауын күреп һөйөндөк. Ансамблдәр араһында бәйгенең гран-приһына эйә булыусылар - Учалы районы "Оҫҡон" ансамбленең "Ҡапҡа урлау" бейеүе бәйгенең йөҙөк ҡашына әүерелде. "Беҙҙең төбәктә "Ҡапҡа урлау" тигән йола бар. Ҡайһылыр төбәктә йорт алдында ултырған эскәмйәләрҙе алып китһәләр, бында иһә йәштәр, шаярып, берәйһенең ҡапҡаһын ҡутарып ала. Ошо сюжетты нигеҙ итеп алып, бейеү һалдым, тик ул быға тиклем бер коллективта ла ерегеп китә алманы. "Оҫҡон" ансамбленең бейеүе булып сыҡты ул", - ти хореограф һәм ансамблдең етәксеһе Динис Ғатауллин. Ул үҙе лә ҡасандыр ошо ансамблдә бейергә өйрәнгән, бөгөн үҙе балаларҙы бейеү серҙәренә төшөндөрә. Ауылдағы балалар менән эшләүе күнеллерәк, сөнки улар күпкә дәртлерәк, тигәйне Динис беҙҙең менән һөйләшкәндә. Уны саҡ ҡына төҙәтеп әйткәндә, бында эш, моғайын да, был төбәк халҡының һәр береһенең бейеүгә маһир булыуындалыр ул.

Учалыларҙың "Оҙонгүл" ансамбленең "Биш бармаҡ" бейеүе лә барыһына да һоҡландырҙы. Был бейеүҙе ҡатын-ҡыҙҙар башҡарыуындағы "Бишбармаҡ" менән бер урталыҡлы ла юҡ, бында ҡулдың биш бармағы кеүек булған бер туған уландарҙың үҙ-ара дуҫлығы һәм татыулығы тураһында бара һүҙ. Бейеүҙе Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжы уҡытыусыһы Гөлназ Ғайсарова ҡуйған, ул барабан тауышына һәм һамаҡтарға ғына башҡарыла. Был егеттәр бөтәһе лә бер - Ишмөхәмәтовтар ғаиләһе уландары, ике улдары Камалов фамилияһын йөрөтһә лә, ошо ғаиләлә тәрбиәләнә.



*Искәндәр Хәлилов.*



*"Оҫҡон" ансамбле.*
*Азамат Ғәҙелшин фотолары.*

Бәйгене үҙ ерендә ҡабул итеүсе хужалар - күгәрсендәр быйыл да бик лайыҡлы сығыш яһаны. "Гөрләүек" өлгөлө балалар ансамбле лә, уның солисы Илсур Айытҡолов айырым бейеүҙә лә һынатманы. Башҡорт хореографияһы шуныһы менән үҙенсәлекле: йәшәгән төбәгенә ҡарап, башҡорт бейеүе лә айырылып тора. Мәҫәлән, тау башҡорттары дала башҡорттары кеүек бейемәй. Шуның өсөн дә башҡорт бейеү сәнғәте бай һәм төрлө. "Үҙем Дыуан районынан, Күгәрсен районында таралған бейеүҙәр хореографияһы ағинан беҙҙең яҡтыҡына бик оҡшаған. Шуның өсөн дә был районда эшләүе минә бик еңел, райондың мәҙәниәткә ҡарашы ла ыңғай. Республиканың бар бейеүселәре үҙ бейеүҙәре менән килә, уларҙың бер урында осрашып, тәжрибә уртаҡлашыуы бейеү сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индерә", - ти "Гөрләүек" ансамбленең етәксеһе Илгиз Ниғмәтуллин да. Етмәһә, балалар бер генә авторҙың бейеүен бейеһә, уның стиль үҙенсәлеген алып, шул сиктән сыға алмай яфаланыуы бар. Шуның өсөн дә төрлө хореографтарға мөрәжәғәт итеү иң дөрөҫө, тигәйне Баймаҡ районының "Еҙ үксә" ансамбле етәксеһе Зарифа Аралбаева. Был йәһәттән дә "Байыҡ"тың әһәмиәтен баһаламау мөмкин түгел.

Бәйгелә ҙур коллективтар күберәк ҡатнашһа ла, башҡорт бейеүенең үҙенсәлеген тап яңғыҙ бейеүҙәр билдәләй. Бәлки, шуның өсөн улар беҙҙә киңерәк таралғандыр ҙа. Искәндәр Хәлилов былтыр иң бәләкәй ҡатнашыусы булараҡ билдәләнһә, быйыл ул гран-при яуланы. Тағы бер Әбйәлил егете Салауат Аманғолов Советтар Союзы Геройы Таһир Кусимовҡа арналған "Батыр ейәне" тигән бейеү башҡарҙы. Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Урал Ҡолмөхәмәтов менән Илһам Ғималов "Башҡорт казачийы" бейеүе менән парлы бейеүҙәр номинацияһында еңеүсе булды. Шулай ҙа алдағы йылдарҙағы бәйгеләрҙәге кеүек, егеттәрҙең хәрби, һунарсы, көтөүсе һ.б. тематикалы яңғыҙ бейеүҙәрҙә көс һынашыуы етмәне кеүек быйылғы "Байыҡ"ҡа.

Өфө ҡалаһы ла быйыл, ниһайәт, "Байыҡ" бәйгеһендә ҡатнашты. Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Дуҫлыҡ" ансамбле баш ҡалалағы башҡа мәктәптәргә матур өлгө күрһәтте. "Гимназияла 960 бала, уларҙың һәр береһе үҙенең һәләтенә һәм теләгенә ҡарап, уҡыу йортонда эшләгән 3 бейеү ансамбленең береһендә шөғөлләнә ала. Халыҡ бейеүҙәре баланы үҙ милли рухында тәрбиәләргә булышлыҡ итә, күнелен үҫтерә, үҙ-үҙенә ышанысын арттыра. Быны ата-әсәләр ҙә яҡшы аңлай. Улар булмаһа, беҙ әллә нимә эшләй ҙә алмаҫ инек. Костюмдар тектереү, юл сығымдарын ҡаплау кеүек матди мәсьәләләрҙе хәл итешеүҙән тыш, баланың теләген һүндермәй, уға терәк булыу, теләгенә өлгәшеү өсөн дөрөҫ маҡсат ҡуйырға өйрәтеү ҙә ата-әсәнән тора", - ти уҡыусыларының сығышын ҡарарға килгән гимназия директоры Гөлназ Ғафир ҡыҙы Әхмәҙиева.

Ысынлап та, баланың һәләтен күреп, уға артабан камиллашырға ярҙам итеү ата-әсәнең ҡулында шул. Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында йәшәп, улдарын аҙнаһына бер нисә тапҡыр Сибайға бейергә йөрөтөүсе Фәйзуллиндарға ни әйтәһең инде! Үҙ телен, мәҙәниәтен белеп, үҙ мөхитендә үҫһен, ти улар, шуға ла йөҙәр саҡрым юл үтеүҙең ауырлығын да тоймай. Бәйгелә Руслан Фәйзуллин менән Гүзәл Ситдиҡова беренсе урынға лайыҡ булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөрйән ҡыҙы, ете генә йәшлек Әҙилә Ишмөхәмәтова бейегән сағында: "Байыҡ"ҡа бер килһәң, килге килеп тик тора", - тип таҡмаҡлағайны. Бер тамсы ла шыттырыу юҡ был һүҙҙәрҙә. Бәйге бейеүселәрҙе лә, уларҙың иждына ғашиҡ булған тамашасыларҙы ла үҙенә тартып тора. Балалар араһында теге йәки был бейеүҙе иң камил, иң оҫта башҡарыусылар ҙа барлыҡҡа килде хәҙер. Мәҫәлән, Динис Әхмәтовтың "Генерал Игзаков"ынан һис ялҡыу мөмкин түгел. Ҡатын-ҡыҙҙар бейеүенең иң гүзәл өлгөһө "Ете ҡыҙ"ҙы бейеүселәрҙең бер мәлгә генә күҙ һирпеп ҡарап алыуын һәр ваҡыт эске бер тулҡынланыу менән көтөп алған кеүек, Динистың да генерал образында бик етди бейеп йөрөй торғас, сығышының аҙағында ғына ихлас итеп йылмайып ебәреүен сираттағы, хатта йөҙөнсө тапҡыр күреү өсөн әллә ниҙәр бирерҙәй булаһың. Сәнғәттең, бигерәк тә бейеү сәнғәтенең көсө лә ошонда бит. Бейей белмәгәнгә генә майҙан тар, ти халыҡ. Әле етенсе тапҡыр ғына үткән "Байыҡ" сәхнәһендә бәхетле минуттар кисереп баҫып тороусыларҙың һаны киләсәктә тағы ла күберәк булһын. Нимә генә тиһәгеҙ ҙә, "Байыҡ"ты бер күрһәң, күрге килеп тик тора!**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

**✓ Америка ғалимдары көнөнә 5,8 граммдан артыҡ (бер балғалаҡтан саҡ ҡына күберәк) тоҙ ашамаҫҡа кәңәш итә. Ҡан баҫымы менән яфаланыусылар өсөн норма - 3,7 грамм. Был кешеләр көн һайын ҡулланған тоҙ күләменән 2-3 тапҡыр аҙыраҡ.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ТОҘҘОҢ ЗЫЯНЫ...

## тәмәкегә тиң

■ Нәҫелендә эсәк яман шеше булған кешеләр был хәүефте фолий кислотаһына бай ризыҡтар менән туҡланып түбәнәйтә ала. Америка ғалимдары 90 мең кешене тикшереп, шундай һығымтаға килгән. Улар яман шеш менән ауырымаҫ өсөн көнөнә 400 мг фолий кислотаһы ашарға ҡуша. Был кислота шпинатта, брокколи һәм башҡа төр кәбеҫтәләрҙә, һыйыр бауырында күп. Ғалимдар фекеренсә, фолий кислотаһы ДНК төҙәлөшөндә ҙур роль уйнай һәм ул етешмәй башлаһа, организм сиргә тиҙ бирешә башлай.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында калий һәм кальций күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүегә ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-ның Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Иртән яҡшы кәйефтә уянып та, көн дауамында унын ҡапыл кирегә үҙгәреүе - эш аҙнаһы дауамында йоҡо туймау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән арыуға бәйле. Һуңғы ун йыл дауамында был бәлә бер кемде лә урап үтмәй. Кешеләр эштәге көсөргәнештән арый, һуң йоҡларға ята, иртә тора. Быҙдай күнелһеҙлек булмаһын өсөн көн һайын сәғәт 10-да йоҡларға ятырға кәңәш итә ғалимдар.

■ Тоҙҙо артыҡ ҡулланыуҙың организмға зыяны тәмәке тартҡандағы кеүек уҡ, ти белгестәр. Тоҙло ризыҡтарҙы кешеләр аҙыраҡ ашаһа, инсульт һәм инфаркт менән үлеүселәр һаны ул тиклем ҙур булмаҫ ине тиелә "New England Journal of Medicine" медицина журналының сираттағы һанында. Америка ғалимдары көнөнә 5,8 граммдан артыҡ (бер балғалаҡтан саҡ ҡына күберәк) тоҙ ашамаҫҡа кәңәш итә. Ҡан баҫымы менән яфаланыусылар өсөн норма - 3,7 грамм. Был кешеләр көн һайын ҡулланған тоҙ күләменән 2-3 тапҡыр аҙыраҡ. Тоҙ шулай уҡ маринадтарҙа, тоҙло сәтләүектәрҙә, колбасала, ярымфабрикаттарҙа күп.

■ Кембридж университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡояш нуры етешмәгән кешелә йөрәк һәм яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеү хәүефе арта. D витамины етешмәһә, һөйәктәр мурткә әйләнә, диабет, йөрәк сирҙәре, яман шеш аҙа. Көнө буйы ябыҡ бинала ултырып эшләүселәрҙең һәр унынсыһы хәүеф аҫтында, ти ғалимдар. D витамины күп кенә химик реакцияларҙа ҡатнаша. Был витаминдың төп сығанағы булып ҡояш нурҙары тора. Йәйен ҡояш аҫтында 20 минут йөрөү ҙә етә, әммә ҡышын организмды D витамины менән тулыландырыу өсөн туҡланыуға ла иғтибар арттырығыҙ. Балыҡтың майлы сорттары ашау файҙалы. D витамины тулыһынса үҙләштерелһен өсөн кальций кәрәк, шуға ла һөт аҙыҡтары ла өҫтәлеүҙҙә гел булһын.

ХӘТЕРКИТАП

# СӘМӘРӘ



**Миңә ул мәлдә ни бары ун туғыҙ йәш ине. Уҡыу йортон тамамлап, "башланғыс синыф уҡытыусыһы" тигән танытма алғас, Баймаҡ ҡалаһына юлландым. Йәйҙең һуңғы айының тап уртаһы - йәш белгестәрҙе мәктәптәргә тәғәйенләү ваҡыты еткән саҡ. "Йә, ҡустым, ҡайҙа эшләргә теләйһең: Бөрйән-Йылғаламы әллә Сәйетбатталдамы? Икеһенә лә директор кәрәк. Һайла!" тине район мәғариф бүлеге мөдире Юнай ағай. Әлбиттә, Сәйетбатталды һайланым, сөнки унда олатайым-өләсәйем, ғаиләһе менән Әхиәр ағайымдар йәшәй ине. Бала сағымда ла йәй айҙарының яртыһынан күберәген ошо ауылда үткәрә торғайным. Шуға икеләнеп торманым, "Сәйетбатталға", тип кенә яуап бирҙем.**

Сәйетбаттал тигән исем рәсми ҡағыҙҙарҙа ғына йәшәне. Ул төбәктә йәшәгән халыҡ ауылды Ҡуяндар тип йөрөттө. Бөгөн ул ауыл юҡ, шуға ошо йәтеш кенә ауыл тураһында бер аҙ булһа ла һөйләп китеү кәрәктер, тип иҫәпләйем. Кеше ата-бабаларының ғына түгел, юҡҡа сыҡҡан ауылдарының да яҡты иҫтәлеген ваҡыты-ваҡыты менән яңыртып торорға тейештер, тигән фекерҙәмен. Бөгөн алдыма шундай маҡсат ҡуям - ауылдың исемен яңыртыу һәм унда йәшәгән бер иплә ғаиләнең тормошон һүрәтләп биреү.

Ауыл ҙур түгел ине - барлығы өс тиҫтә самаһы йорто булғандыр. Мәктәбемә, тип тәүге тапҡыр сыҡҡанымда, әйәреп, өләсәйем дә урамға сыҡты. "Анна, мәктәбең, - тине ул ҡулы менән ауыл осона күрһәтеп. - Күрәһеңме тау башындағы йортто?" Ауылдың түбәнге осондағы ҡалҡыулыҡта ыҡсым ғына йорт күрҙем. Ҡояшта янған ҡыйыҡы менән ап-аҡ итеп буялған стеналары шундай сағыу төҫтәрҙә ине, әйтерһең, ул сәхнәне биҙәү өсөн тәғәйенләнгән һүрәт.

Мәктәптең ҙур булмаған ихатаһына килеп инеүем булды, ишек асылып китте. Унан миңә тиклем директор булып эшләгән апай килеп сыҡты. Иҫәнлек-һаулыҡ һораштыҡ та ихатаны ҡарап сығырға булдыҡ. Мин шунда уҡ бөтә ерҙәге бөхтәлеккә иғтибар иттем. Кирбес менән кәртәләп алынған ике түтәл беренсе сиратта иғтибарҙы йәлеп итте. Кирбестәр яртылаш ергә күмелгәйне, ә остары, өсмөйөш яһап, өҫкә ҡалҡып тора ине. Өсмөйөштәр күптән түгел генә буялһа ла, кирбестәрҙең ергә-тирәһендә бер генә тамсы эҙбиз дә юҡ ине. әйтерһең, улар, бәшмәк кеүек, ерҙән ап-аҡ булып үҫеп сыҡҡандар. Уҡыусы сағымда миңә лә кирбестән ошондай кәртәләр ҡорорға тура килгәләне. Ерҙе бер аҙ ҡаҙаһың да яртыһын ергә күмәһең, бер мөйөшөн тышҡа сығарып ҡуяһың. Бер кирбестең тирә-яғына тупраҡ тултырғас, уға терәтеп, икенсеһен ҡуяһың. Шул рәүешле түтәлде әйләндереп сыҡҡас, ҡуйы итеп иҙелгән эҙбиз менән һөрәйеп торған өсмөйөштәрҙе буярға тотонаһың. Шундай ялҡытҡыс эш был, дошманыңа ла теләмәҫһең уны! Кирбестең ҡыҙылы күренеп тормаһын, тип, бумала менән ергә яҡынырак төшһән, эҙбиз тупраҡты йәбештереп тә ала. Күпме генә тырышһаң да, бер тиҫтә самаһы кирбесте буяп сығыуға иҙелмә ҡарағусҡыл төҫ ала. Иң күңелһеҙе шул - буяп киткән урындарың аҡ таптар менән ҡаплана. Һөҙөмтәлә башҡарған эшеңдән һис кенә лә ҡәнәғәтләнеү тапмайһың.

"Кем шулай матур итеп буяны кирбестәрҙе?" - тип һораным эргәмдә барған мәктәп етәксеһенән. - Тирә-яғына бер тамсы ла эҙбиз сәсрәмәгән". "Кем булһын, Сәмәрә инде. Шәмбе көн төштән һуң килһәм, ихатаны бөхтә итеп йыйыштырып, ошо түтәлдәрҙе кәртәләп ҡуйған". Мәктәптә ике кеше эшләгәнен белә инем, шуға Сәмәрә тигән исем икенсе уҡытыусыныҡылыр, тигән фекергә килдем.

Мәктәптең ҙур булмаған хужалығын әйләнеп сыҡҡас, эскә үттек. Мин хужа булырға тейешле уҡыу йортонон ике бүлмәһе, бәләкәй генә китапханаһы бар ине. Һуңғыһы йылытылмай торған бүлмәлә урынлашҡайны. Уҡыу бүлмәләренең стеналары, түшәмдәре ап-аҡ итеп буялғайны - дауахананың операция яһай торған бүлмәләре өсөн тәғәйенләнгән былар, тип уйларһың. Шуға иғтибар иттем: бүрәнәләр араһындағы уйпат урындар балсыҡ менән тип-тигеҙ итеп һыланғайны, әйтерһең, стена кирбестән һалынған. Алһыу төҫтәге пәрҙәләр аша төшкән ҡояш нурҙары бүлмәләргә байрам кәйефе биреп тора. Күңелем күтәрелеп китте - бындай мәктәптә эшләргә була!

Китапханалағы әсбаптарҙы, өҫтәлултырғыстарҙы һәм һауыт-һабаны ҡабул итеп алғас, тейешле ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйып, мәктәптең мәшәҡәттәрен үҙ инемә алдым. Етәкселектән арынған апай менән йылы итеп хушлашҡандан һуң, кире эскә үттем. Уҡытыусы өсөн тәғәйенләнгән өҫтәл артына барып ултырҙым. Һарғылт-көрән төҫтәге иҙәнгә тип-тигеҙ итеп теҙелгән парталарға күҙ һалдым да хистәргә бирелеп киттем. Ун ике парта алтышарҙан ике рәт булып теҙелеп киткәйне. Шул саҡта мин тәүге тапҡыр балаларһыҙ ҡалған буш бүлмәнең ҡото юҡ икәнен тойҙом. Балаһы булмаған ғаиләнең дә ҡото булмайҙыр, тигән фекергә килдем. Егерме йәше лә тулмаған егеттең башына килгән тәүге фәлсәфәүи уй булғандыр был, ахырыһы.

Шул саҡ иплә генә итеп ишек шаҡыныллар. Кем икәнен күрмәһәм дә, һиҙҙем - шаҡыусы үҙ баһаһын белә һәм шул уҡ ваҡытта бик итәғәтле кеше булырға тейеш. "Әйҙәгеҙ, инегеҙ", - тинем дә урынымдан торҙом. Ишектән утыҙ-утыҙ биш йәштәр тирәһендәге ҡатын килеп инде. Бер аҙ ғына икеләнеп торғандай итте лә, кәүҙәһен тура тотоп, алға атланы. Иң алғы өҫтәлгә үтмәйенсә, икенсеһенең артына барып ултырҙы. Башын күтәреп миңә ҡараны ла иплә генә итеп йылмайып: "Мин Сәмәрә булам. Мәктәптә йыйыштырыусы булып эшләйем. Төнгө ҡараулысы вазифаһын да башҡарам. Ҡыштарын мейестәрҙе яғам", - тине. Мин дә уны исем-шәрифем, затым менән таныштырҙым, бөгөнгө көндән мәктәп етәксеһе вазифаһын башҡарасыһым хаҡында әйттем. "Атайыңды ла, Бибинур апайҙы ла яҡшы беләм. - тине ул, һөйкөмлө йылмайып. - Баҡмал инәйҙең нисәнсе ейәне булаһың? Бибинур апай тик малайҙар ғына тыуҙыра, тигән хәбәрҙе ике-өс мәртәбә ишеттем". "Өләсәмдең өсөнсө ейәне булам, - тинем мин көләмһерәп. - Ысынлап та, ғаиләбеҙҙә алты малай, ә ҡыҙҙар бер бөртөк кенә".

Ана шулай башланып китте минең хеҙмәт юлым. Бер аҙна мәктәпте Сәмәрә апай менән икәүләп кенә тәртипкә килтерҙек. Шунан беҙгә Гөлнәзирә исемле ҡыҙ килеп ҡушылды. Ул ике ай элек кенә урта мәктәпте тамамлаған ҡыҙ бала ине. Уҡытыусылар етешмәгәнлектән, уны Сәйетбаттал башланғыс мәктәбенә эшкә тәғәйенләгәйнеләр.

Уҡыу йылы башланыуға өс көн ҡалғас, Сәмәрә апай ярҙамға ике ҡыҙын алып килде. Уларҙың өлкәнерәге ярылған утынды лапаҫ аҫтына ташый башланы, ә бәләкәсерәге түтәл эргәһенә килеп сүкте. Мин рәшәткә менән уратып алынған ихатаның серегән бағанаһын алмаштырыры менән мәшғүл инем. Үҙем эшләйем, ваҡыты-ваҡыты менән эргәмдә йөрөгән ҡыҙҙарға ла күҙ һирпеп алам. Өлкән ҡыҙ, тейен һүрәте төшөрөлгән алъяпҡысын йәһәт кенә биленә бәйләп, ярылған утынды лапаҫ аҫтына ташый башланы.

Мин, күрәгемде ҡоймаға һөйәп, ҡыҙыҡайҙың эшен күҙәтәм. Дүрт-биш ҡосаҡ утын индергәндән һуң, ул бармаҡ йыуанлығындағы ике сыра эҙләп тапты. Шуларҙың берәүһен лапаҫтың арғы башына сәнсеп ҡуйҙы ла алъяпҡысының кеҫәһенән бер кәтүк еп килтереп сығарҙы. Ептең бер осон арғы баштағы сыраға бәйләп, кәтүкте әйләндерә-әйләндерә, был яғына атлап китте. Кәрәк тиклем епте өҙөп алғандан һуң, осон миңә яҡынырaҡ сыраға бәйләп ҡуйҙы. Эргәһендә ятҡан утындың берәүһен алып, тартылған еп менән арҡы стена араһын самалап ҡараны. Шунан тартылған еп йәнәшәһенә буйынан буйына ике рәт утын һалып сыҡты. Утын дымланмаһын өсөн теҙеп сыҡты ҡыҙыҡай уларҙы.

Ун бер-ун ике йәштәр тирәһендәге ҡыҙҙың эш әмәлен шундай яҡшы үҙләштереүенә хайран ҡалып, бер килке уйланып торҙом. Атай, мәрхүм, заманында беҙҙән дә бөхтәлек талап итә торғайны, әммә беҙ бер ваҡытта ла еп тартып мәшәҡәтләмәнек - утынды күҙ самаһы менән генә теҙеп сыға торғайныҡ. Ғөмүмән, Муллаҡай, Ҡолсора ауылдарында бер кем дә утынды еп тартып һалғаны булманы. ә бына Ҡуяндарҙа иһә, бәләкәй генә ауылда, уҡыусы ҡыҙ миңә шул рәүешле бөхтәлек һабағы бирҙе.

Өс көндән гөрләтеп тәүге ҡыңғырау байрамын үткәреп ебәрҙек. Гөлнәзирә беренсе һәм өсөнсө синыф уҡыусыларын уҡыта башланы, ә мин икенсе һәм дүртенсе синыф балалары менән эш башланым. Уҡыусыларымдың һаны егерме дүрт, ә Гөлнәзирәнеке ун һигеҙ ине. Шуҡ ҡына балалар әлекте миңә - ҡайһыларын тәртипкә күндергәнсе, ун көн тирәһе ваҡыт үтеп китте.

Етәкләгән уҡыу йоротом Байым ауылында урынлашҡан һигеҙ йыллыҡ мәктәпкә ҡарай ине. Беҙ, уҡытыусылар, шул ауылға кәңәшмәләргә йөрөнөк, асыҡ дәрестәрҙә ҡатнаштыҡ. Көҙҙөң тәүге айы мәшәҡәтле булды, шуға Ҡуяндар менән Байым араһын йыш тапарға тура килде. Байымда Рафаил ағайым менән Зәбирә еңгәмдәрҙә туктап йөрөнөм. Улар мине һәр саҡ йылмайып ҡаршы алды, сәй эсермәйенсә сығарманы.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**

**(Дауамы бар).**

КИТАБЕННАС




# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

### "Беҙгә кейем-һалым тураһында һөйлә", тигән туҡыусы...

"Кейем һеҙҙеге матурлыҡтың күп өлөшөн ҡаплай, ләкин йәмһеҙ урындарығыҙҙы йәшермәй, - тигән Бәйғәмбәр. - Серҙәрегеҙҙе кейем эсенә йәшереп, азатлыраҡ булырға теләһәгеҙ ҙә, кейем һеҙҙең өсөн ҡамыт һәм бығау. Кейем булмаһа, ҡояшты һәм елде тәнегеҙ менән тойор инегеҙ, сөнки тормош һулышы ҡояш нурҙарында, ә ел - уның ҡулдары. "Төньяҡтың һалҡын елдәре булмаһа, кейем дә булмаҫ ине", тиерһегеҙ. Эйе, кейемдәрегеҙҙе төньяҡ елдәре туҡыған. Оятығыҙ - уның туҡыу станогы булған, наҙлылыҡ, үтә иркәлек тигән ептәр менән тегелгән улар. Елдәр һеҙҙең кейемегеҙҙән көлә. Боҙоҡ ҡарашлы күҙгә матур кейем түгел, ә инсафлыҡ - ҡалҡан. Онотмағыҙ, ер һеҙҙе яланаяҡ килеш ярата, елдәр һеҙҙең сәстәрегеҙ менән уйнарға теләй".

### "Һатыу һәм һатып алыу тураһында һөйлә", тип үтенгән сауҙагәр...

"Ер һеҙгә үҙенең һутын һәм емештәрен бирә, - тигән Бәйғәмбәр. - Уны дөрөҫ ҡуллана белһәгеҙ, мохтажлыҡ булмаҫ. Ер байлыҡтарын үҙ-ара алмаштырып, һеҙ байлыҡ, муллыҡ һәм ләззәт табырһығыҙ. Ләкин алмашыу һөйөү һәм ризалыҡ менән атҡарылмаһа, берәүҙәр ҡомһоҙға әйләнер, икенселәр - ярлыға. Һеҙ, диңгеҙ гиҙеп балыҡ тотҡандар, ер һөрөп иген иккәндәр, йөҙөм үҫтергәндәр, баҙарҙа - туҡыусы, балсыҡтан һауыт-һаба эшләүсе һәм башҡа һөнәр оҫталары менән осрашаһығыҙ. Алмашыр алдынан Ергә ҡот биреүсе изге рухтан һәр тауарҙың сағыштырмаса хаҡын белешегеҙ. Һеҙҙең хеҙмәт емешен үҙҙәренеке күреп, бушты лығырлаусы әрәмтамаҡтарҙан ситләшегеҙ. Ундайҙарға: "Әйҙә, минең менән баҫыуға бар, диңгеҙгә сығып, ауҙы үҙең һал, ер ҙә, диңгеҙ ҙә миңә йомарт булған кеүек, һиңә лә йомарт булыр", - тип әйтегеҙ. Әгәр ҙә һеҙгә йырсылар, бейеүселәр, музыканттар килһә, уларҙың һөләтен дә һатып алығыҙ. Хыял емеше булһа ла, уларҙың тауары - һеҙгә күңел аҙығы. Баҙар майҙанынан бер кем дә буш ҡул менән китмәһен. Һеҙҙең барығыҙ ҙа ҡәнәғәт булмаһа, Ер рухы тыныс йоҡлай алмаҫ".

### "Беҙгә белем тураһында һөйләгеҙ әле", тигән уҡытыусы...

"Белем таңығыҙҙа яулы-йоҡоло ятҡандан артығын һеҙгә бер кем дә күрһәтә алмай, - тигән Бәйғәмбәр. - Уҡытыусы уҡыусыларына аҡылын бүлеп бирмәй, һәр кемдең һөйөүгә һәләтле булыуына ышаныс ҡына уята ала. Әгәр ҙә уҡытыусы ысынлап та аҡыллы икән, үҙенең аҡыл-өйөнә саҡырмаҫ, киреһенсә, һеҙҙе үҙегеҙҙең аҡыл-өйөгөҙҙөң тупһаһына алып килер. Йондоҙҙарҙы күҙәтеүсе Йыһан киңлеге тураһында һөйләй ала, ләкин ул киңлекте ҡулығыҙға тоттора алмай. Музыкант ритм тураһында йырлай, ләкин ул үҙе тойған ритмды тойған ҡолаҡ, йә бермә-бер ҡабатлаҙған тауыш бирә алмай. Математик һандар тураһында һөйләй, ләкин үлсәмдәр донъяһына етәкләп алып бара алмай. Сөнки бер кешенең һиҙгерлеге тулыһынса икенсе кешегә күсмәй. Һәр берегеҙ Уның алдында яңғыҙ баҫып торған кеүек, Уны белеүҙә һәм Ерҙе аңлау кимәлегеҙҙә лә һеҙ яңғыҙһығыҙ.

Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ДӨРӨҪ ТУҠЛАНЫУ СЕРҘӘРЕ



**Дөрөҫ туҡланыу бөгөн һәр кем өсөн көнүҙәк проблемаларҙың береһе булып тора. Сөнки ашаған ризығыбыҙҙың сифаты сәләмәтлегебеҙ торошона, йәшкиәфәтебеҙгә, кәйефебеҙгә йоғонто яһауы бер кемгә лә сер түгел.**

Әлеге ваҡытта күпселектең рационы сәләмәт туҡланыу принциптарына тап килмәй. Иртәнге аш урынына йәки эштәге ял ваҡытында печенье, кәнфит менән генә сәй эсеү, киске аш урынына ярымфабрикаттар, тиҙ бешерелгән аҙыҡ-түлек - күптәребеҙ туҡланған ризыҡ бына шуларҙан ғибәрәт.

Шул уҡ ваҡытта рәсәйҙәрҙең рационында балыҡ, диңгеҙ продукттары, йәшелсә, емеш-еләк етешмәй.

Күпселек үҫешкән илдәр халҡының дүрттән өс өлөшө дөрөҫ туҡланмау һөҙөмтәһендә килеп тыуған сирҙәр менән яфалана. Уларға артыҡ ауырлыҡ, юғары ҡан баҫымы, атеросклероз, шәкәр сире, бауыр һәм эсәк ауырыуҙары, онкологик сирҙәр инә. Туҡланыуҙағы дөрөҫ булмаған ғәҙәттәр һөҙөмтәһендә организмда кәрәкле матдәләр ҡытлығы башлана, шул уҡ ваҡытта зыянлы матдәләр артыҡ тупланып, беҙҙе көсһөҙләндерә. Улай ғына ла түгел, улар йылдар буйына йыйылып килеп, төрлө ауырыуҙарға сәбәпсе була. Организм файҙалы, туҡлыҡлы матдәләрҙе генә алһын һәм уларҙы тулыһынса үҙләштерһен өсөн дөрөҫ туҡланыуҙың төп ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәк. Бында һәр кешенең йәшен, конституцияһын, ауырыуҙарын һәм башҡа факторҙарҙы иҫәпкә алып һайланған рацион иң яҡшыһы. Уйлап ҡараһаң, сәләмәтлегеңде яҡшыртыу, үҙеңде яҡшы тойоу өсөн артыҡ күп тә кәрәкмәй, бары тик дөйөм ҡабул ителгән, әммә бик һөҙөмтәле принциптарҙы үтәргә түҙемлегегеҙ генә етһен.

● Иң беренсе, туҡланыу төрләндерелергә тейеш, сөнки бер генә ризыҡ организмды кәрәкле матдәләр менән тәьмин итә алмай.

● Икмәк, ярма йәки макарондан бешерелгән аҙыҡты көнөнә бер тапҡыр булһа ла ашарға кәрәк. Көндәлек рациондың яртыһынан күберәк күләмен ошо аҙыҡтар алып торорға тейеш. Уларҙа крахмал ғына түгел, аш епсәләре, минераль ҡатышмалар, В һәм С төркөмө витаминдары бар. Әгәр кире күрһәтмәләр юҡ икән, күберәк икмәк, бигерәк тә ҡара һәм көрпәле ондан бешерелгән икмәк ҡулланырға кәрәк.

● Көндәлек менюла емеш-еләк һәм йәшелсә мотлаҡ һәм ул 400 грамдан да кәм булмаҫҡа тейеш. Был картуфтан башҡа ғына. Сөнки емеш-еләк һәм йәшелсәләр - яҡшы антиоксидант, атеросклероз һәм башҡа йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙар күләмен кәметеүсе фолий кислотаһы, тимер, минералдар һәм витаминдар сығанағы.

● Һөт һәм һөт аҙыҡтары (кефир, сыр, йогурт, ряженка, эремсек) ризыҡтарын көн һайын ҡулланыу кәрәк. Бигерәк тә балаларға, үҫмерҙәргә һәм ҡатын-ҡыҙҙарға.

● Ит, балыҡ йәки ҡош ите порциялары ҙур булырға тейеш түгел. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау экспертарының яман шеш проблемаларына арналған докладында көнөнә 80 грамдан күп булмаған күләмдә ҡыҙыл ит ашарға тәҡдим ителә.

● Май көндәлек ризыҡ калорияһының 20 процентынан да күберәк булырға тейеш түгел. Бигерәк тә май кислоталарына бик бай булмаған майҙарға, бигерәк тә зәйтүн майына айырым иғтибар бирергә кәрәк. Улар антиоксидант булып тора һәм ҡан холестеринын әсеүҙән һаҡлай.

Дөрөҫ туҡланырға ҡарар иттегеҙ икән, иң ябай углеводтар - шәкәр ҡулланыуҙы сикләргә кәрәк. Ул сәләмәт диетаның файҙалы элементы түгел. Консерва, тоҙло, ыҫланған аҙыҡ-түлекте лә көн һайын файҙаланыу тәҡдим ителмәй. Аҙыҡты енелсә генә тоҙларға кәрәк. Тәмде көсәйтер өсөн тәмләткес үләндәр өҫтәргә мөмкин. Һыу эсеү режимын һаҡлағыҙ. Көнөнә 1,5 - 2 литр һыу эсегеҙ.

Сәләмәт туҡланыуға күсеү менән шунда уҡ һөҙөмтә көтмәгеҙ. Әммә яйлап энергияғыҙҙың артыуын, йоҡоғоҙ тынысланыуын һиҙерһегеҙ. Һирәк ауырып, тиҙ генә һауыға башларһығыҙ, кәүҙә ауырлығы нормаға килер һәм башҡа бик күп ыңғай мәлдәр кисерерһегеҙ.

Гөлнара ӘМИРХАНОВА,
5-се ҡала дауаханаһының табип-гастроэнтерологы, медицина фәндәре кандидаты.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Был миллионлаған кеше быдай һөйөүҙе ҡабул итмәй тигәнде аңлатмай. Ундайҙар бик күп, улар һеҙҙең шатлығығыҙҙы, тәнегеҙҙән тормошоғоҙҙо һәм энергияғыҙҙы һурып, үҙҙәре кеүек үк йәнһеҙ булып ҡалғас, ошо мәхлүк тормошоғоҙҙо ҡыуанып уртаҡлашасаҡ.

Сәләмәт мөнәсәбәттәрҙә үҙегеҙ яратҡан кешегеҙҙе һайлайһығыҙ һәм үҙегеҙ уларға ғашиҡ булаһығыҙ, сөнки улар һеҙҙең тормошоғоҙға бәхет өҫтәй. Был иң яҡшы комплимент һәм кешегә күрһәтеп булған иң юғары ихтирам - уны үҙегеҙҙең эгоизмығыҙ арҡаһында, һеҙгә бәхет һәм шатлыҡ бүләк иткән өсөн яратыу.

Әммә быны гедонизм менән бутарға ярамай; гедонизм фәлсәфәһе яҡшы йәки яҡшы эҙемтәләргә килтергән нәмәләр генә һәйбәт, тип күҙаллай. Гедонизм психологияһында ҡылыҡ ҡәнәғәтлек алырға һәм ауыртыныуҙан ҡасырға тырышыу менән аңлатыла, йәғни ҡәнәғәтлек алыу әхлаҡи стандарт булып тора, ә мин бөтөнләй икенсе нәмә хаҡында һүҙ алып барам.

Гедонизмда һеҙҙең барлыҡ ҡиммәттәрегеҙ, уларҙы аңлы рәүештә һайлағанһығыҙмы, юҡмы, айыҡ аҡыл менән башҡараһығыҙмы, хис-тойғоларға бирелепме - бер нәмәгә ҡарамаҫтан башта әхлаҡи була. Шул ваҡытта һеҙҙең әхлағығыҙ теләктәрегеҙ, көйһөҙләгөгөҙ, ошо ваҡытта өҫтөнлөк алған башҡа теләктәрегеҙ менән аңлатылыр ине, ә был әхлаҡһыҙлыҡ.

Яҡшы нәмә ҡиммәттәрҙең рациональ нормалары менән билдәләнергә тейеш. Ҡәнәғәтлек - тәүсәбәп түгел, киреһенсә, ул айыҡ фекерләү һөҙөмтәһендә ҡабул иткән ғәмәлдәр эҙемтәһе.

Хәҙер, әйҙәгеҙ, тормошта беҙ тоторға тейешле философияны логик тикшереүҙе дауам итәйек. Был стадияла күптәрҙә йәмғиәткә хеҙмәт итеү һәм мәрхәмәтлек эштәрендә ҡатнашыу буйынса һорауҙар тыуыр. Улар башҡаларға ярҙам итергә йәки мәрхәмәтлек эштәрендә ҡатнашырға тейешме, түгелме икәнен белгеһе килә. Юҡ, мин бөтөнләй был хаҡта түгел. Әммә хөкүмәт йәки дәүләт дине йөкләмә итеп биргән шундай инаныу йәшәй: үҙегеҙҙән ярлыраҡҡа ярҙам итеү әхлаҡи бурысығыҙ булып тора. Әммә был хәҡиҡәттән бик алыҫ.

Әгәр һеҙ беҙ әлегә тиклем фекер алышҡан принциптар буйынса йәшәһәгеҙ, бирәү ҙә башҡаларға ярҙам итеүгә, мәрхәмәтлек ярҙамы күрһәтеүгә ҡамасаулай алмай. Һуңғы 10 йылда шәхсән үҙемдең сығымдарымдың төп пункты булып мәрхәмәтлек ярҙамы тора һәм ул ғүмеремдең ахырына саҡлы шулай булып ҡаласаҡ. Мин быны ғәҙәттә аноним эшләйем һәм бер ниндәй һалым ташламаларым да юҡ. Мәрхәмәтлек ярҙамын күрһәткәндә төп өс критерийҙан сығып эш итәм:

1. Ярҙам иткән кеше йәки ойошма быға лайыҡ.
2. Быны эшләргә мөмкинлегем бар.
3. Был миңә ҡәнәғәтлек килтерә.

Шулай итеп, мин аҡсамды ҡайҙа, кемгә бирергә икәнлеген хәл итәм һәм был кемгәләр "кәрәгерәк" йәки сәйәси йәһәттән дөрөҫмө, тигән күҙлектән сығып эшләнмәй. Мин бик күп ойошмаларға ярҙам иттем. Әммә быларҙың барыһын да тик эгоистик сәбәптәр буйынса эшләнем - ҡәнәғәтлек алдым!

Рэнди ГЕЙДЖ.



## 3 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Без свидетелей". Драматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". Мелодраматический сериал. 9-я и 10-я серии (12+).
23.40 "Как избежать наказания за убийство". Криминальный сериал (18+).
01.15 "Обезьянья кость". Худ. фильм
03.00 Новости.
03.05 "Драконий жемчуг: эволюция". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00 "Вести".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Женские слезы" (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Марьина роща". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Своя чужая". 9-я и 10-я серии. Детективный сериал (12+).
22.55 "Чужое гнездо". 43-я и 44-я серии
00.50 "Табачный капитан". Худ. фильм.
02.45 "Прости меня, мама". Сериал
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 13.30, 18.30, 22.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**10.30 "Фанташ" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30 Новости недели.**
**12.15 "Весело живем" (12+).**
**12.30 "Автограф" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.00 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.15 "Преград.net" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Хазина" (6+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**17.30, 21.30 Новости.**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости спорта.**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Опасный Бангкок". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Красная звезда" (12+).**

## 4 АВГУСТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Дом с лилиями". Сериал (16+).
14.25 "Без свидетелей". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 11-я и 12-я серии (16+).
23.40 "Как избежать наказания за убийство?" (18+).
01.15, 03.05 "28 дней спустя". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Ауаз".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Женские слезы" (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Марьина роща". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Своя чужая". 11-я и 12-я серии
22.55 "Чужое гнездо". 45-я и 46-я серии (12+).
00.50 "Дождь в чужом городе". Худ. фильм.
03.45 "Прости меня, мама". Сериал (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Зеркальце" (0+).**
**10.45 "Перекличка" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Башҡорттар" (6+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Шәп арба" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Орнамент" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Как ты красива". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.00 "Ночь, как вся жизнь" (12+).**

## 5 АВГУСТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Дом с лилиями". Мелодраматический сериал (16+).
14.25 "Без свидетелей". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 13-я и 14-я серии (16+).
23.40 "Как избежать наказания за убийство?" (18+).
01.15, 03.05 "Все о Стиве". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.10 "Господа Бронко". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00 "Вести".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Чужой крест" (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Своя чужая". 13-я и 14-я серии (16+).
22.55 "Чужое гнездо". 47-я и 48-я серии (12+).
00.50 "Трест, который лопнул". Сериал.
03.45 "Прости меня, мама". Сериал
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Книга сказок" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра. Блог спецкора" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (6+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Орнамент" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Поезд на Юму". Худ. фильм (16+)**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Черноликие" (12+).**

## 6 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Дом с лилиями". Сериал (12+).
14.25 "Без свидетелей". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 15-я и 16-я серии (12+).
23.40 "День, когда сбросили бомбу" (12+).
0.50 "Как избежать наказания за убийство". Криминальный сериал (16+).
01.40, 03.05 "Чудо на 34-й улице". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Ауаз".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Чужой крест" (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Своя чужая". 7-я и 8-я серии
22.55 "Чужое гнездо". 15-я и 16-я, заключительная, серии (16+).
22.55 "Жертвоприношение". Док. фильм (16+).
23.35 "Чужое гнездо". 49-я и 50-я серии (12+).
01.35 "Трест, который лопнул". Сериал.
03.00 "Прости меня, мама". Сериал
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Дети-герои" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Фанташ" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Орнамент" (0+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.30 "Спасибо, папа". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Лебедушка моя" (12+).**

## 7 АВГУСТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.40 "Дом с лилиями". Сериал (12+).
14.25 "Без свидетелей". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда". Муз. шоу (16+).
23.20 "Pink Floyd: История "The Dark Side of The Moon" (12+).
00.25 "Морской бой". Боевик (16+).
02.50 "Появляется Данстон". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Хрустальный соловей".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал. "Практикантка" (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-ПФО".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "В жизни раз бывает 60!". Часть 2-я. Юбилейный концерт Игоря Крутого.
23.20 "Муж счастливой женщины". Мелодрама (12+).
01.15 "Живой звук". Конкурс караоке.
03.15 "Горячая десятка" (12+).
04.20 "Аркадий Кошко. Гений русского сыска" (12+).
05.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм".**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30, 21.00 "Автограф" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Байтус" (6+).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Литра" (0+).**
**15.30 "Каникулы нестрогого режима"**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Орнамент" (12+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Темя дня (на башк. яз.).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**23.00 "Возвращение в Брайдсхед". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Песнь во сне" (12+).**

## 8 АВГУСТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06:00 Новости
06:10 Фильм "Суровые километры". Продолжение (12+)
06:45 "Дурная кровь". 1-2 серии (16+)
08:45 "Смешарики. Новые приключения"
09:00 "Играй, гармонь любимая!"
09:45 "Слово пастыря"
10:00 Новости с субтитрами
10:15 "Смак" (12+)
10:55 Премьера. "Олег Попов. "Я жив!"
12:00 Новости с субтитрами
12:15 "Идеальный ремонт"
13:10 "Личная жизнь следователя Савельева". Многосерийный фильм
15:00 Новости с субтитрами
15:10 "Личная жизнь следователя Савельева". Продолжение (16+)
17:25 "Угадай мелодию" Стерео (12+)
18:00 Вечерние новости с субтитрами
18:15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым
19:15 Коллекция Первого канала. "ДОстояние РЕспублики: Владимир Шаинский"
21:00 "Время"
21:20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+)
22:55 "КВН". Премьер-лига (16+)
00:30 Остросюжетный фильм "Люди Икс 2" (16+)
02:55 Комедия "Убрать перископ" (12+)
04:40 "Мужское / Женское" (16+)

### РОССИЯ 1

05:10 Комната смеха
06:00 Облако-рай. Х/ф (12+)
07:30 Сельское утро
08:00 Вести
08:10 Вести-Башкортостан
08:20 "Военная программа" А.Сладкова
08:50 Планета собак
09:25 Субботник
10:05 Осовец. Крепость духа (12+)
11:00 Вести
11:10 Вести-Башкортостан
11:20 Кулинарная звезда
12:20 Катино счастье. Х/ф (12+)
14:00 Вести
14:15 Вести- Башкортостан
14:30 Катино счастье. Х/ф. Продолжение (12+)
16:10 Субботний вечер
18:05 Не в парнях счастье. Х/ф (12+)
20:00 Вести в 20:00
20:35 Провинциалка. Х/ф (12+)
00:30 Солнцекруг. Х/ф (12+)
02:15 Циники. Х/ф (16+)
04:30 Осовец. Крепость духа (12+)

### БСТ

**07:00 Гимн Республики Башкортостан**
**07:05 Новости /на баш.яз./**
**07:15 "Доброе утро!" Концерт (12+)**
**08:15 Мультфильм "Джордж из джунглей" (0+ )**
**09:30 "Здоровое решение" (12+)**
**10:00 "КЛИО". (6+)**
**10:45 "Большой чемодан" (6+)**
**11:30 "Аль-Фатиха"(6+)**
**12:00 Следопыт (12+)**
**12:30 Новости /на рус.яз./**
**12:45 "Наука 102" (6+)**
**13:15 Позывной "Барс" (12+)**
**13:30 Автограф (12+)**
**14:00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей (12+)**
**16:00 "Байыҡ" (6+)**
**16:45 "Хазина". Салават Хайбуллин (6+)**
**17:30 Н.Гаитбаев "Откройте, милиция!". Спектакль (12+)**
**19:00 Башҡорттар (6+)**
**19:30 История признания (6+)**
**19:45 Художественный фильм "Исчезнувшая империя" (12+)**
**21:30 Новости /на рус.яз./**
**22:00 Бизнес-обзор (12+)**
**22:30 Новости /на баш.яз./**
**23:00 "Башҡорт йыры-2015". (12+)**
**23:45 Художественный фильм "Падение Олимпа". (12+) По окончании: Новости /на баш.яз./**
**02:15 Т.Давлетбердина "Моя семья". Спектакль (12+)**
**04:20 Документальный фильм "Обратная сторона СССР. Цеховики" (16+)**
**05:00 Концерт народного ансамбля бального танца "Вираж" (12+)**
**06:30 Новости /на рус.яз./**

## 9 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Дурная кровь". Худ. фильм (16+).
08.10 "Служу Отчизне!"
08.40 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.40 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.05 "Папа напрокат". Комедия (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Романовы". Док. фильм.
17.20 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
19.50 "Аффатар жжот" (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Перевозчик-2". Боевик (16+).
23.20 "Танцуй!" (16+).
01.10 "Разрушенный дворец". Приключения (12+).
03.00 "Школа выживания выпускников". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

06.20 "Отпуск в сентябре". Худ. фильм
09.10 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
09.40 "Утренняя почта".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.25 "Родители". Сериал (12+).
12.20 "Стерва". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
16.00, 21.00 "Полоса отчуждения". Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
00.50 "Приказано женить". Худ. фильм (16+).
03.05 "Планета собак".
03.40 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Внимание, черепаха!" Худ. фильм**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Ал да гөл" (0+).**
**11.15 "Байтус" (0+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.30 "Рожденный дважды" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа"**
**16.45 "Замандаш" (6+).**
**17.00, 02.00 "И день, и век…" (12+).**
**18.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (0+).**
**19.30 "История признания" (6+).**
**19.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Любимое дело" (12+).**
**20.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Байыҡ-2015" (6+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.30 "Мы из джаза". Худ. фильм (12+).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ МАТЕМАТИКТАРЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**29-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Нумератив. Сингармонизм. Мөршит. Аборт. Инеш. Синоним. Ҡылым. Теркәүес. Иманы. Синтаксис. Нурия. Фонетика. Ять. Пакт. Яго. Өмөтбаев. Неологизм. Имидж. Шарҙыуан. Һалым. Өтөр. Байрам. Өноҡшаш. Ранецы. Маҡсат. Укупник. Ҡорт. Ырғандаҡ. Ҡалым. Икешәр. Ҡурмас. Саҡрым. Марс.

**Вертикаль буйынса:** Ясин. Сантьяго. Лайыҡ. Омоним. Откуп. Өмөт. Абай. Сумо. Мисәт. Мажор. Ҡаҡшатҡыс. Нөгөш. Шытым. Ташҡын. Еймә. Исем. Айыл. Прозаик. Есем. Трибохимия. Норд. Тартюф. Өндәш. Ҡырлас. Ором. Айырыу. Өлгөр. Кредит. Ҙурлау. Байҡы. Илла. Уҙаман. Атавин. Наждак.

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

# ШЫТТЫРЫЛҒАН ОРЛОҠТОҢ ФАЙҘАҺЫ



**Бойҙай** шытымында булған файҙалы матдәләр иммунитетты яҡшырта, көс өҫтәй, бөйөр, бәүел ҡыуығын, эсәктәрҙе, бауырҙы таҙарта, шешенеүҙе бөтөрә, яраларҙы уңалта, тирене һәм сәстәрҙе яҡшырта. Шыттырылған бойҙай орлоҡтары организмды бик яҡшы таҙарта, әммә быны өсөн уны бер йылдан ашыу ашарға кәрәк. Шыттырылған бойҙай орлоҡтары ашай башлағас та, уның ыңғай һөҙөмтәһе сәстәрҙә күренә - улар ҡиммәтле шампунь һәм маскалар ҡулланмаған осраҡта ла яҡшыра. Шулай уҡ шыттырылған бойҙай орлоҡтары кариес, яман шеш ауырыуҙарын иҫкәртә, организмдың хәлен яҡшырта, нервыларҙы тынысландыра һәм һәйбәт йоҡларға ярҙам итә.

**Шыттырылған һоло** орлоҡтары бик күп ҡаты ауырыуҙарҙан дауаланырға ярҙам итә. Мәҫәлән, туберкулез, бөйөр, бауыр, үт ҡыуығы ауырыуҙарынан, гепатит, ҡалҡан биҙ сирҙәренән файҙалы. Шыттырылған һоло бойҙайы оҙайлы ауырыған йә йәрәхәтләнгәндән һуң кешегә аяҡҡа баҫырға ярҙам итә, ул иммунитетты яҡшырта, мускулдарҙы нығыта, ашҡаҙан-эсәк юлдары хәлен нормаға килтерә, ҡан составын яңырта. Әйткәндәй, шыттырылған һоло орлоҡтары ҡан ойошоуын профилактикалау өсөн бик уңайлы.

**Шыттырылған борсаҡ** шешеү процесын туҡтатыусы һәм ауыҙ ҡурыштыра торған сифаттарға эйә. Шыттырылған борсаҡ яраларҙы тиҙ уңалдырырға ярҙам итә, тире торошон яҡшырта, хатта артыҡ ауырлыҡтан арынырға булышлыҡ итә. Ғәҙәттә, ноҡот борсағын шыттыралар, унда A, C, B төркөмө витаминдары, марганец, кремний, тимер, бор, калий һәм кальций матдәләре, күҙәнәклек, углеводтар, аҡһым һәм аминокислоталар бик күп.

**Шыттырылған арпа** орлоҡтарын ашау организмға төрлө ауырыуҙарға бирешмәҫкә ярҙам итә, кислота-һелте балансын яҡшырта. Шыттырылған арпаның көсө уның составында булған B12, K, C витаминдары, A провитамины, цинк, еҙ, марганец, тимер матдәләрендә.

**Шыттырылған арыш** орлоғо организмдың микроб һәм вирустарға ҡаршы тороусанлығын арттыра, тын юлдарын дауалағанда ҡаҡырыҡты сығарырға булышлыҡ итә, ҡанда глюкоза кимәлен нормаға килтерә, организмдан ағыулы матдәләрҙе һәм радионуклидтарҙы сығара, атеросклероздан һаҡлай һәм иртә ҡартайыуҙы кисектерә.

**Шыттырылған ҡабаҡ** орлоғо цинк матдәһенә бай, шуға уны ашау бигерәк тә ир-егеттәргә файҙалы. Улар шулай уҡ баш мейеһе эшенә яҡшы тәьҫир итә, организмды юғары сифатлы майҙар, C, E, B төркөмө витаминдары, тимер, фосфор, магний, кобальт, еҙ минералдары менән тәьмин итә.

**Шыттырылған яҫы борсаҡ** аҡһымдарға, кальций, тимер, цинк, магний, фосфор, селен, еҙ минералдарына, F, E һәм B төркөмө витаминдарына бай. Уның шытымдарында C витамины башҡа төр ҡыяҡлы үҫемлектәрҙекенә ҡарағанда күберәк, сөнки орлоҡтары шыта башлаған осорҙа C витамины 600 тапҡырға арта. Шуға күрә, шыттырылған яҫы борсаҡ анемия, танау йыш ҡанағанда, тиҙ генә һыуыҡ тейҙереүсән булғанда, бронхит, тамаҡ шешеп һәм үпкә шешеүе менән яфаланғанда ярҙам итә.

Шыттырылған орлоҡтар ярҙамында дауаланғанда сәсеүгә тәғәйенләнгән орлоҡтарҙы ҡулланырға ярамай, сөнки уларға махсус ашлама һибелгән була. Орлоҡтарҙың сифатына ла ҙур иғтибар бүлергә кәрәк. Шыттырылған орлоҡтарға үҙегеҙгә оҡшаған төрлө тәмләткестәр, сәтләүектәр ҡушып ашарға мөмкин, ләкин бал бутарға ярамай. Шыттырылған орлоҡтарҙы ашағандан һуң, бер сәғәт дауамында бер нәмә лә ашамай һәм эсмәй торорға кәрәк. Шыттырылған орлоҡтарҙы 3-4 көн дауамында һаҡлап ашарға мөмкин, әммә һыуытҡысҡа ҡуйылған шыттырылған бойҙай ҡарайһа, бигерәк тә төрлө сәтләүектәр, башҡа ҡушылмалар менән булһа, уны ашауҙан тыйылырға. Шыттырылған орлоҡтарҙан ашамлыҡ әҙерләгәндә һәм уны һаҡларға һалғанда алюминдан яһалған һауыт-һаба менән ҡулланмаҫҡа кәрәк. Шулай уҡ, орлоҡтарҙы ҡәһүә тартҡыста ваҡларға, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға ярамай, сөнки был шыттырылған орлоҡтоң файҙалы үҙенсәлектәрен кәметә.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҒӘҘЕЛ БУЛ

Әжер-сауаптарын ун тапҡырға һәм унан да күберәккә арттырып биргәндә Аллаһ Үҙенең мәрхәмәт-шәфҡәтен һәм хуш күңеллеген терәк итеп ала, яза биргәндә самаһын белеп, уны ғәҙеллек менән генә бирә.

"Дөрөҫлөктә, һаҡлап тотор өсөн үҙегеҙгә ышанып тапшырылғанды Аллаһ эйәһенә ҡайтарып бирергә бойора. Кешеләр араһында хөкөм йөрөтөр булһағыҙ ҙа, ғәҙеллек менән хөкөм йөрөтөргә бойора. Аллаһтың һеҙгә биреп торған өгөт-нәсихәттәре ниндәй ҙә гүзәл! Бөтәһен дә Ишетеп, Күреп тороусы зат бит Ул", - тиелә аятта ла.

**"Әл-Ниса" ("Ҡатын-ҡыҙҙар") сүрәһе, 58-се аят.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1436 һижри йыл.***

| Август (Шәүүәл) | Иртәнгә намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (18) дүшәмбе | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |
| 4 (19) шишәмбе | 4:02 | 5:32 | 13:30 | 19:40 | 21:10 | 22:40 |
| 5 (20) шаршамбы | 4:04 | 5:34 | 13:30 | 19:38 | 21:08 | 22:38 |
| 6 (21) кесе йома | 4:06 | 5:36 | 13:30 | 19:36 | 21:06 | 22:36 |
| 7 (22) йома | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 19:34 | 21:04 | 22:34 |
| 8 (23) шәмбе | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 19:32 | 21:02 | 22:32 |
| 9 (24) йәкшәмбе | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 19:30 | 21:00 | 22:30 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МӘҘӘНИӘТ, СӘНҒӘТ...

# БӨЙӨК ӘҘИБӘЛӘР САФЫНДА



**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева төрки донъяһының бөйөк ҡатын-ҡыҙҙары исемлегенә индерелде. Төркиә телерадиокомпанияһының журналистары әҙибә хаҡында тапшырыу әҙерләү барышында Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала ла булды.**

Журналистарға яҙыусының әҫәрҙәре баҫылған китаптар, шулай уҡ 1942 йылда донъя күргән "Партизан малай" исемле тәүге китабы күрһәтелде. Әҙибәнең 1977 йылда Милли китапхана өсөн ҡалдырған автографы ла уларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге етәксеһе Айгөл Буранғолова төрөк дуҫтарыбыҙға бөйөк милләттәшебеҙҙең ижады тураһында бәйән итте.

ТРТ каналының ижади төркөмө күп илдәрҙә булған. Билдәле һәм арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙар хаҡында тапшырыуҙар циклын Төркиәлә, Кипрҙа, Молдовала, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстанда, Төркмәнстанда, Хакасияла, Татарстанда, Ҡырымда, Һиндостанда төшөргәндәр.

- Оҙаҡ йылдар төрки донъяһы, төрки мәҙәниәте, тамырҙарыбыҙ һәм тарихи үткәнебеҙ тураһында тапшырыуҙар әҙерләйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, бөйөк ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың яҙмыштарын күрһәткән тапшырыуҙар бик аҙ. Шуның өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙың төрки донъяһындағы һәм йәмғиәттәге урынына һәм роленә арналған тапшырыуҙар циклын төшөрөү идеяһы тыуҙы, - ти программаның етәксеһе Рафет Коксал.

# ИҢ ГҮЗӘЛЕ - БЕҘҘЕКЕ!



**Өфө студенты "Волга буйы федераль округы студенттары гүзәле" исемен яуланы.**

Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһының юридик факультеты студенты Рушана Әпсәләмова менән Өфө дәүләт иктисад һәм сервис университетының туризм һәм коммуникациялар факультеты студенты Эльвира Ғәлиева Санкт-Петербургта үткән "Рәсәй студенттары гүзәле" II Бөтөн Рәсәй конкурсында ҡатнашты. Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, конкурс йомғаҡтары буйынса Эльвира Ғәлиева "Волга буйы федераль округы студенттары гүзәле" тажына лайыҡ булды. Рушана Әпсәләмова Рәсәй халыҡтарының йолаларын һаҡлауҙа һәм пропагандалауҙағы әүҙем эшмәкәрлеге өсөн махсус диплом менән билдәләнде.

"Рәсәй студенттары гүзәле" бәйгеһендә илдең төрлө төбәктәренән иң яҡшы студенттар һынау тотто. Аҙна дауамында ҡыҙҙар үҙҙәренең һөнәрҙәрен, милли кейемдәребеҙҙе күрһәтте, "Балтик буйы илдәренең студент яҙы" фестивалендә ҡатнашты. Конкурс жюрийын Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Дмитрий Певцов етәкләне. Конкурсты ойоштороусылар - Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы, Мәғариф һәм фән министрлығы, Рәсәй Йәштәр союзы.

# ТАҒЫ ЛА БЕР ФИЛЬМ




**Яңыраҡ "Йәшә, һалдат, йәшә" документаль фильмы Македонияның Струмица ҡалаһында үткән "Asterfest" Халыҡ-ара ҡыҫҡа метрлы кинофестивалдә өсөнсө урынға лайыҡ булды.**

Фильмдың төп геройы Ғәзиз - ябай ауыл кешеһе, Ғафури районынан. 1986 йылда уны Чернобылгә атом станцияһындағы шартлау эҙемтәләрен бөтөрөргә ебәрәләр. 28 йыл үткәс, ул ҡасабала фатир ала. Әммә геройҙың ғаиләһе лә юҡ, сәләмәтлеге лә ҡаҡшаған. Әсәһе менән буш фатирҙа көн күрә.

Фильмдың сценарий авторы, режиссеры, продюсеры һәм операторы - Кирстен Гайнет (Айгөл Ғәйнетдинова). Ул Башҡортостандың Инйәр ҡасабаһында тыуған. 2005 йылда Өфөгә күсә. Бала саҡтан актриса булырға хыялланһа ла, медицина белеменә эйә була. 2007 йылда "Сыйылған эҙ" фильмында уйнай. 2009 йылда Санкт-Петербург Мәҙәниәт һәм сәнғәт университетына уҡырға инә. Фото төшөрөү менән мауыға, ике шәхси күргәҙмә авторы.

"Геройымдың, халҡымдың фажиғәле тормош юлын сит ил тамашасылары ла ҡараны. Мин быға бик шатмын. Илебеҙҙең еңеүҙәрен генә түгел, һәләкәт арҡаһында меңдәрсә кешенең ғүмере өҙөлгән фажиғәне онотмау бик мөһим. Фильмды күрһәткәндә эргәлә ултырған бер ир-егет: "Был башҡорт телеме?" - тип һораны. Башҡа милләттәрҙең туған телебеҙҙе ишетеүенән яҡшырағы юҡтыр", - тип һөйләй автор үҙе.

"Йәшә, һалдат, йәшә" фильмы Мәскәүҙә ойошторолған "Арткино", "Будем жить!" һәм "Сталкер" фестивалдәрендә, шулай уҡ Санкт-Петербургта үткән "Послания к Человеку" конкурсында ҡатнашҡан. Апрелдә фильм "Святая Анна" фестивалендә күрһәтелгән.

# БРАЗИЛИЯ САҠЫРА...



**Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Өфөлә уҙған Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттарының мәҙәни программаһында әүҙем ҡатнашты. Саралар ҙан һуң саммитта ҡатнашыусылар коллективҡа ШОС һәм БРИКС илдәрендә ансамблдең гастролдәрен ойоштороға тәҡдим итте. Хәҙерге ваҡытта коллектив етәкселеге Бразилия менән һөйләшеүҙәр алып бара, тип хәбәр итә ансамблдең матбуғат хеҙмәте.**

Саммиттар алдынан дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең репертуарына яңы бейеүҙәр өҫтәлде. Улар араһында "Ҡаҙаҡ сюитаһы", "Ҡырғыҙҙарҙың туй бейеүе", "Ляэги" хореэм бейеүе һәм "Айлы төндә күбәләктең осоуы" ҡытай ҡатын-ҡыҙҙары бейеүҙәре бар. Тиҙҙән республика халҡы "Планета ритмдары" тип аталған концерт программаһын тамаша ҡыласаҡ. Сентябрҙән алып декабргәсә коллектив Башҡортостан ҡалалары һәм районтары буйлап гастролдәргә сығырға ниәтләй. 28 ноябрҙә Өфөнөң Конгресс-холл сәхнәһендә Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамблдең гала-концерты була. "Тәүге бүлек "Ғәскәров мираҫы" юбилей программаһы сиктәрендә әҙерләнгән башҡорт бейеүҙәренән тора. Икенсе бүлеккә донъя халыҡтары, шул иҫәптән ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек барышында ҡуйылған яңы бейеүҙәр индереләсәк", - тип һөйләне дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле директоры Филүс Ҡаҙаҡбаев.

# МОҢОБОҘҘО СИТТӘР ТЫҢЛАНЫ

**Танылған ҡурайсы, Башҡортостандың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрының художество етәксеһе Рәмил Ғәйзуллин төрки донъяһының сәнғәт оҫталары концертында ҡатнашты. Программалар "Мары - 2015 йылда төрки донъяһының мәҙәни баш ҡалаһы" акцияһы сиктәрендә июнь аҙағына тиклем дауам итте.**

Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Ғәйзуллин Төркмәнстан дәүләт симфоник оркестрының дирижер пульты артына баҫты, шулай уҡ ҡурайҙа ла уйнаны. "Мин тәүге тапҡыр Төркмәнстандың симфоник оркестры дирижеры сифатында сығыш яһаным. Беҙ башҡорт композиторы Нур Дауытовтың "Ҡыҙҙар бейеүе" башҡарҙыҡ. Шулай уҡ мин ҡурайҙа халыҡ көйҙәрен һәм Морат Әхмәтовтың оркестр өсөн яҙған музыкаһын уйнаным", - ти Рәмил Ғәйзуллин. Концерттарҙа Төркиәнән, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан, Рәсәйҙән (Башҡортостан, Татарстан, Ҡырым Республикаһы) солистар ҡатнашты. Музыканттар репертуарҙарын байытыу өсөн үҙҙәренең яҙмалары менән алышты. Сараны ойоштороусы - ТӨРКСОЙ төрки мәҙәниәте халыҡ-ара ойошмаһы.

**"Башинформ"дан.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һыҡымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡулан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛГӘ КИЛГӘН...

## алға килер

Ҡәйнәмә килдем - михнәт күрҙем; ҡәйнә булдым - михнәт бирҙем.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.

**(Андре Жид).**

Күрә алмаһалар, алмаһындар, тик ҡурҡһындар ғына.

**(Каин).**

Кәрәкмәгән нәмә гел ҡыйбат тора.

**(Катон).**

Автор китаптың яртыһын ғына яҙа: ҡалған яртыһын уҡыусы үҙе тултырып ҡуя.

**(Джозеф Конрад).**

Гонаһ ҡылырға теләмәү һәм белмәү араһында айырма ҙур.

**(Мишель Монтень).**

Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда, мин өс бөртөк гәзиттән нығыраҡ ҡурҡам.

**(Наполеон I).**

Һәр бала - рәссам. Эш балалыҡтан сыҡҡа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.

**(Пабло Пикассо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһе һәм аҡылға зәғиф кеше йәшәгән. Аҡыл эйәһе эргәһенә уның аҡыллы телмәрен тыңларға, кәңәш һорарға халыҡ ағылған да ағылған, ә аҡылһыҙҙы барыһы ла урап үткән. Аҡылһыҙҙы көнсөллөк яфалаған, ни эшләргә белмәй, үрле-ҡырлы һикергән. Бер көндө ул аҡыл эйәһе эргәһенә барып, уның һөйләгәндәрен тыңларға, унан ишеткәндәрен лайыҡлы баһаларға ҡарар иткән. Халыҡ араһына барып ултырған, аҡыл эйәһен тыңлаған-тыңлаған, тыңлаған- тыңлаған, ләкин бер ни ҙә аңламаған. Урамға сыҡҡас, йыйылып торған халыҡҡа былай тип хәбәр һалған:**

**- Үҙен аҡыллы тип иҫәпләгән был кеше һау түгел, һау кеше бындай һүҙҙәр һөйләмәҫ. Уның аҡылынан баш ауырта, мейе ҡаба. Ҡурҡығыҙ, ҡурҡығыҙ унан! Уны тыңлаһағыҙ, минең көнгә ҡалырһығыҙ. Был кешенең аҡыллы телмәренән мәңгелеккә иҫәргә әйләнәләр...**

**Урамда торған халыҡтың ошо аҡылға зәғиф кеше һымаҡтары һәм һуңғы аҡылын да юғалтыуҙан ҡурҡҡандары был йорт эргәһенән тайыу ягын ҡарай. Ә аҡыл эйәһенең һүҙҙәренән күңел яҡтыра тип иҫәпләгәндәре тороп ҡала..**

**Аҡмаҡлыҡ аҡылды тағы ла нығыраҡ айырып күрһәтеү, аҡылһыҙлыҡ ҡараңғылығында тағы ла балҡыбыраҡ яҡтырыу өсөн йәшәй ҙә инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3487